ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 ғинуар (һыуығай) 2019

№2 (836)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Эргә-тирәләге танышларығыҙға, туғандарығыҙға иҫкәртегеҙ, зинһар: 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - 18 ғинуарға тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе февралдән алдыра башлаясаҡтар. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә биш айға яҙылыу хаҡы - 508 һум 30 тин. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Алыҫ юл атты һынай...**



ауыр юл ирҙе һынай

3

**Каталон атласында...**

Мәскәү юҡ, ә Башҡорт ҡалаһы бар



7

**Минең тормошомдоң...**

оялырлыҡ та, йәшерерлек тә ектәре юҡ



8-9

**Театр сәнғәте менән...**

бала саҡта танышырға кәрәк



11

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Күптәребеҙ үҙ хәбәрен "Гәзиттә шулай яҙылған", тип йөпләп ҡуйырға ғәҙәтләнгән. Был матбуғат һүҙенә ышаныуҙан киләме?

***Хәбирйән ТАҺИРОВ, журналистика ветераны:*** Халыҡ матбуғат фекеренә өйрәнгән шул инде. Уға ҡарата ихтирам айырыуса үткән быуатта ныҡ һиҙелә ине. Бөгөнгө көн шарттарында матбуғат һүҙе яңы кимәлгә күтәрелергә тейеш, сөнки уның бурысы уҡыусыға хәбәр, яңылыҡ еткереүҙә генә түгел. Яңылыҡ сығанаҡтары күп хәҙер, ә матбуғат саралары илдәге һәм халыҡ-ара даирәләге бөгөнгө хәлдәрҙе, уларҙың сәбәп-эҙемтәләрен тәфсирләп аңлатыусы, тикшереүсе, һығымта яһаусы аналитикаға ҡоролорға тейеш, тип уйлайым. Бөгөнгө матбуғат биттәренән публицистика жанры төшөп ҡалды, тип әйтергә лә була. Ә бит тап публицистика замана бөгөн. Уҡыусы иғтибарына төбәк-ара бәйләнештәр хаҡында ғына түгел, үҙебеҙҙең республикала барған хәлдәр тураһында ла хәбәрҙәр бик килеп етмәй кеүек тойола. Инвестиция, Ҡытай тураһында яҙырға әүәҫләнде гәзиттәр. Бер яҡтан, был кәрәктер ҙә, ләкин тулыһынса инвестицияға ғына һалынырға, алтын тауҙар өмөт итергә ярамай. Шул уҡ ваҡытта уның эҙемтәһе хаҡында уйланыу юҡ: заманында күп бәләкәй илдәр ана сит илдәрҙән аҡса йөкмәп килеүсе инвесторҙар арҡаһында илдәрен юғалтты ла инде. Инвестор фәҡәт үҙ мәнфәғәтен алға ҡуя, ә беҙгә ярҙам итәйем, тимәй. Шуға ла беҙгә үҙ көсөбөҙ менән аяҡҡа баҫырға тырышырға кәрәк, ә матбуғат был өлкәлә тәжрибә уртаҡлашыу, алдынғы алымдарҙы таратыу, эшҡыуарлыҡты дәртләндереү йәһәтенән ҙур ярҙам күрһәтә аласаҡ.

Хәҙер республикабыҙҙы яңы Башлыҡ етәкләй. Ул килеү менән матбуғатта тәнҡит, асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр күренә башланы былай. Район хакимиәттәре яңы етәкселек башланғыстарын дәррәү күтәреп алырға бурыслы, ләкин ҡайһы бер райондарға Радий Фәрит улының һүҙҙәре килеп тә етмәгән һымаҡ әле. Бигерәк тә район гәзиттәре үҙ һүҙен дә, йөҙөн дә юғалта бара, сөнки былай ҙа бәләкәй генә форматлы һәм аҙнаһына бер-ике тапҡыр сыҡҡан гәзиттәрҙең яртыһы "Нәшриәт йорто" әҙерләгән материалдарҙан торһа, яртыһы реклама, белдереүҙәр, ҡотлауҙар кеүек ваҡ-төйәктән хасил. Урындарҙа әллә ни күтәрелеш, йәнләнеү һиҙелмәй.

Әйткәндәй, матбуғат коррупция менән көрәштә лә ҡеүәтле көс булырға тейеш, ә беҙҙең матбуғат "йығылғанды түпәләргә", йәғни фашланған юғары түрәләрҙе генә түпәләргә белә, ә бит муниципаль кимәлдә лә ошондай уҡ ҡырын-мырын эштәр менән шөғөлләнеүсе "бәләкәй" түрәләр етерлек. Ана шундайҙарҙы фашлаусы тәнҡит баҫыла башлаһын әле - гәзит эҙләп йүгереп йөрөйәсәктәр. Иманым камил - матбуғат баҫмаларының тираждары ла арта төшәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ҮҘ ГӘЗИТЕБЕҘ



**"Киске Өфө"нө уҡып, рухи һыуһыныбыҙҙы ҡандырабыҙ. Берҙән-бер теләгем: ошо йүнәлештән тайпыла күрмәгеҙ. Халҡыбыҙҙы үҙ асылына ҡайтарырға, тарихи булмышын иҫенә төшөрөргә, үҙ милләте, тамырҙары менән ғорурланырға өйрәтеүҙе дауам итегеҙ. Үҙенең кемлеген белеп, тарихи хәтере уянһа, улдарыбыҙ, ҡыҙҙарыбыҙ үҙ алдына маҡсат ҡуйырға өйрәнәсәк, үҙенән-үҙе бөгөнгө заман ҡатмарлыҡтарын йырып, алға барасаҡ.**

"Киске Өфө"нө Өфөлә йәшәгән һәр башҡорт ғаиләһе яҙҙырһын ине. Бының менән беҙ үҙебеҙҙең барлыҡты белгертәбеҙ, үҙебеҙҙең абруйҙы арттырабыҙ. Юҡһа, Өфөлә башҡорттар юҡ, ти ҙә ҡалалар. Бар улар, тик үҙ туған телендә уҡырға, балаларын уҡытырға ҡыйынһынып ятыусылар күп улар араһында. Былай итеп нимәгә ирешәбеҙ? Барыбер урыҫ булып китеп булмай, барыбер һине башҡорт тиҙәр. Балаларҙы ла үҙебеҙҙең маңҡортлоҡ яҙмышына дусар итмәһәк ине инде. "Киске Өфө" күптәрҙең күҙен асты, быныһына иманым кимил. Шуға ла һәр башҡорт ғаиләһе уны үҙ гәзите тип ҡабул итһен, уның тиражын 20, 30 меңгә еткереү өсөн тырышһын ине. Был да аҙ әле. Сөнки бөгөн Өфөлә кәмендә 200 меңләп башҡорт йәшәй. Уларҙың яртыһы ғына туған телдә уҡый тип алһаҡ та, "Киске Өфө"нөң тиражы 50 меңгә етергә тейеш. Әйҙәгеҙ, милләттәштәр, ошо баҫманың тиражы аша үҙ тауышыбыҙҙы башҡаларға ишеттерәйек.

**Камилә ЯЙЫҠБАЕВА, пенсиялағы уҡытыусы.**

12+

✔ Ҡайҙа ул, министрҙы урынынан алып ырғытырлыҡ түгел, өй эсендә безелдәп бимазалаған себенде һуғып үлтерергә лә гәзите юҡ бит йортонда хәҙер бәғзе халыҡтың. Уйлаһаң, ҡурҡыныс булып китә.



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Тәү сиратта ауыл хужалығын тергеҙеү кәрәк. Был осраҡта халыҡты эш урындары менән тәьмин итеп булыр, йәштәр ғаилә ҡороп, тыуған төйәгендә тороп ҡалыр, белем усаҡтары, мәҙәни үҙәктәр тергеҙелер ине. Беҙ ауылдарыбыҙ, бәләкәй ҡалаларыбыҙ менән көслө. Уларға инвестициялар йәлеп итеп, иҡтисади хәлде генә түгел, социаль хәлде лә яҡшыртырға кәрәк.**

# ВАЗИФАҒА...

## ғаиләле кеше үрләтелһен

Республикала, әлбиттә, күп балалы ғаиләләрҙә тейешле шарттар булдырыуға йүнәлтелгән эштәр алып барыла, әммә был ғына етмәй. Яҡшы уҡыған, олимпиадаларҙа һәм төрлө ижади конкурстарҙа еңеүҙәр яулаған талантлы балаларҙың ғаиләләренә лә ярҙам итергә кәрәк. Сөнки бала бәләкәйҙән әүҙем икән, тимәк, бының өсөн атай-әсәһе ҙур тырышлыҡ һалған һәм уларҙың хеҙмәттәре лә Хөкүмәт тарафынан билдәләнергә тейеш. Педагог, балалар табибы көсөк һөнәр һайлаған кешеләрҙең, шулай уҡ вазифаға үрләтелгән йәш кадрҙарҙың ғаиләле булыуына, балаларын нисек тәрбиәләүенә иғтибар бүлергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Кеше үҙ ғаиләһен ҡарарлыҡ булһа, үҙ балаларын яҡшы тәрбиәләһә генә уның яуаплылыҡ кимәле тураһында фекер йөрөтөп була. Был яуаплылыҡты күтәрә алмағандар иһә бөтәндәр тураһында ла хәстәрлек күрә алмай, йәки нисек хәстәрлек күрергә, ни эшләргә икәнен яҡшы төшөнөп етә алмаҫҡа мөмкин.

Шулай уҡ йәштәргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү өлкәһендә лә яңы проекттар эшләнеүен теләр инем. Уларҙы эш урындары менән тәьмин итеү ҙә, торлаҡ мәсьәләләрен дә иғтибар итергә кәрәк. Ғаилә ҡорған студенттар, эшләп йөрөгәндәре лә баш ҡала тороп ҡалыу өсөн ҡуртымға алынған фатирҙа йәшәй. Улар эшләп тапҡан аҡсаһының 80 процентын шул фатир хужаһына түләй, атай-әсәһе ярҙам итә алмаһа, үҙенә фатир алырлыҡ хәле лә юҡ. 2007-2009 йылдар тирәһендә республикала аҙ ҡатлы төҙөләш проекты тормошҡа ашырылды, тик ул әле коммерция нигеҙендә дауам итә. Демография мәсьәләһе торлаҡ шарттарына туранан-тура бәйле булыуын иҫәпкә алып, социаль йүнәлешле берәй программа эшләнһә, яҡшы булыр ине.

Ғөмүмән, республика халҡына ғаиләһен аҫрарлыҡ эш хаҡын үҙебеҙҙә тәҡдим итергә кәрәк. Берәүгә лә сер түгел, ситкә китеп аҡса тапҡан ир-егеттәр араһында техник һөнәрлеләре генә түгел, башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең үҫешенә йөгонто яһарлыҡ талант эйәләре лә бар. Ижад кешеһенең кеҫә төбө һәр заманда һай булған, тиһәләр ҙә, уларҙың хеҙмәтен һәм талантын халыҡ ҡына түгел, дәүләт тә баһаларға тейеш. Башҡортостан Республикаһында тәү сиратта башҡорт халҡының туған телен, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, сәнғәтен үҫтереүгә өҫтөнлөк бирелергә тейеш. Сөнки башҡорт кешеһе үҙенең тыуған төйәгенән башҡа бер ерҙә лә ундай уңайлыҡтарҙы талап итә алмай. Бигерәк тә ҡала шарттарында йәшәгән милләттәштәргә рухи ҡиммәттәрен һаҡлап ҡалырға, балаларына тапшырырға мөмкинлектәр артһын. Кеше тураһында хәстәрлек күреү байрам саралары үткәреүгә генә ҡайтарып ҡалдырылмаһын, ә төплө һәм тейешле кимәлдә социаль-иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеүҙән ғибәрәт булһын.

Әйткәндәй, Башҡортостандың Башлығы вазифаһына тәғәйенләнгәндән алып Радий Хәбиров халыҡҡа яҡын булыуын, бөтәһенең дә фекеренә ҡолаҡ һалырға әҙерлеген күрһәтте. Артабан да халыҡ менән шулай тығыҙ бәйләнештә эшләһен.

**Азамат АҠЪЮЛОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Күптәребеҙ үҙ хәбәрен "Гәзиттә шулай яҙылған", тип йөпләп ҡуйырға ғәҙәтләнгән. Был матбуғат һүҙенә ышаныуҙан киләме?



(Башы 1-се биттә).

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, "Киске Өфө" гәзитенең даими уҡыусыһы:*** Матбуғат һүҙенә һылтаныу, әлбиттә, уға - ташҡа баҫылғанға - ышаныуҙан килә. Дөрөҫ, һуңғы йылдарҙа "һары матбуғат" ҡушаматы алған баҫмаларҙың күбәйеп китеүе беҙҙең күҙ терәп торған гәзит-журналдар абруйына бер аҙ зыян килтерә биреп ҡуйһа ла, улар беҙҙең арала әллә ни йәшәп китә алманы, сөнки яҙғандары хаҡлыҡҡа тап килмәгән, ниндәйҙер сит идеологияларҙы пропагандалаған, билдәле шәхестәр һәм кино-эстрада йондоҙҙары тормошонан ғәйбәт таратыусы был гәзиттәрҙе халыҡ барыбер үҙ итмәне. Әле улар, бәхеткә, киоск кәштәләрендә әллә ни күренмәй башланы. Уның ҡарауы, беҙ электән һәр һүҙенә ышанып, уҡып, хәбәрләшеп өйрәнгән башҡорт баҫмалары үҙ асылдарына тоғро ҡалып, туған телебеҙҙе йәшәтеү маҡсатына бөтөн иждиһатын һалып эшләй һәм йәшәй бирә. Кемдәр туған матбуғатыбыҙ баҫмаларының бындай изге, оло бурысын, ниәтен аңлай һәм уртаҡлаша - улар һаман да гәзит-журналды әфтиәк урынына уҡый, сөнки улар белә: гәзит үҙенең уҡыусыһы булған шартта ғына йәшәй һәм әйтер һүҙен уға еткерә ала.

Күптәрҙең, башҡорт телендәге матбуғатҡа яҙылмайынса, "Мин уны интернеттан уҡыйым", тигәненә лә мин бик ышанып бармайым, ихласһыҙ кешеләр һүҙе был. Йәштәрҙең инде интернеттан ни уҡыуҙары, ни менән шөғөлләнеүе билдәле, уларҙа гәзит ҡайғыһы юҡ - мине шул бик борсоуға һала. Бер кемгә лә сер түгел: хатта йәштәр өсөн махсус тәғәйенләнгән гәзиттәрҙең дә уҡыусылары пенсионерҙар бит бөгөн. Аҡсалары артып барғандан түгел, ә гәзит-журналһыҙ тормошто күҙ алдына килтерә алмағандары өсөн яҙыла һәм уҡый улар матбуғат баҫмаларын. Был инде, әлбиттә, матбуғатҡа булған ышаныс хаҡында ла һөйләп тора. Үкенесҡә, ундайҙар һаны кәмей бара, ләкин быны ғына гәзит-журналдар донъя күреүҙән туҡтамаясаҡ, сөнки, бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, донъяның ҡояшлы яғында йәшәүселәр һаны күберәк икәнлегенә минең дә бик ышанғым килә. Ә ҡояшлы яҡ, яҡты яҡ - ул уҡыу, белем, мәғрифәт һәм уның емештәре - изгелек, илһөйәрлек, телһөйәрлек.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Матбуғат һүҙенә ышаныу элек-электән ана шул матбуғат баҫмаларын ижад итеүсе журналистарҙың яуаплылығын һәм компетентлылығын раҫлаусы сифат билдәһе булараҡ нығынған. "Гәзит менән себенде лә, министрҙы ла үлтерергә була", тигән лаҡап йөрөр ине элек журналист халҡы араһында. Был гәзит һүҙененең ҡеүәтенә, абруйына бер ишара ине. Бөгөн был лаҡап онотола төштө, буғай. Ҡайҙа ул, министрҙы урынынан алып ырғытырлыҡ түгел, өй эсендә безелдәп бимазалаған себенде һуғып үлтерергә лә гәзите юҡ бит йортонда хәҙер бәғзе халыҡтың. Уйлаһаң, ҡурҡыныс булып китә: гәзитһеҙ тормошон күҙ алдына ла килтермәгән быуын китеп бөтһә, уларҙы уҡыусы ҡалмай башлаһа?..

Ә бит матбуғат - ул гәзит кенә лә түгел. Китап, журнал уҡыусылар менән дә шундай уҡ хәл күҙәтелә. Ләкин бындай күренеш бер заманда ла булмаған һәм булмаҫ та тип ышанам, сөнки тәүге гәзит һәм китап сыға башлаған осорҙан алып булған бөтөн тарихыбыҙ, әҙәби мираҫыбыҙ, ҡиммәтле документтар, тормош йылъяҙмабыҙ ҡағыҙға теркәлгән, гәзит-журналда баҫылған һәм ҡәҙерләп архивтарҙа һаҡлана. Ә виртуаль донъяның мәңгелегенә ышаныс бармы һуң? Бер заман "гөлт" итер ҙә һүнер. Ярай ҙа, "хәтерендә" ҡалһа...

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: кеше, халыҡ хәтере генә мәңгелек. Ошо мәңгелек йылъяҙмаға үҙ өлөшөн индереүсе сығанаҡтарҙың береһе лә ул - гәзит-журнал һәм китаптарыбыҙ. Улар беҙҙең бөгөнгөнө, иртәгәне теркәй бара, тарихыбыҙҙың "аҡ" биттәрен асыҡлаған фәнни хеҙмәттәрҙе баҫып сығара, халыҡтың үҙаң даирәһен байыта, туған телен йәшәтә. Матбуғат баҫмаһы үҙенең уҡыусыһы менән көслө, тиҙәйнек. Ләкин уға тағы ла көслөрәк һәм ҡыйыураҡ булыр өсөн уны ойоштороусы дәүләт органдары ярҙамы һәм ышанысы ла кәрәк. Бөгөн матбуғат баҫмалары, ғөмүмән, ил буйынса ла күптән инде "дүртенсе власть" түгел, ә ҡыҙығыраҡ хәлдә көн күрә. Минеңсә, дәүләт илдә тәртип булдырыу, коррупцияға ҡаршы көрәш, иҡтисадты аяҡҡа баҫтырыу, халыҡ тормошон яҡшыртыу кеүек мөһим проблемаларҙы хәл итеүҙә матбуғат кеүек яҡшы мәғәнәлә "һуғышсан" ярҙамсыһын үҙенән ситләтеп, йәғни уны үҙ көнөн үҙе күреүгә этәреп, дөрөҫ эшләмәй. Күп кенә гәзит-журналдар бөлгөнлөк сигенә етте, шул хаҡта лә улар үҙ һүҙҙәрен әйтеп ҡалырға, халыҡҡа аң-белем таратырға тырыша, тик быға дәүләт тарафынан яҡлаулы ла булһа... Халыҡ та бит меҫкен хәлендәгегә түгел, ә өмөтлөгә, көслөгә нығыраҡ ышана.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Салауат Юлаев" хоккей клубы етәкселеге, баш тренер Николай Цулыгин һәм команда капитаны Григорий Панин менән осрашты. Төбәк етәксеһе: "Бер нисә мәсьәләгә ҡарата фекеремде белдерәм. "Салауат Юлаев" - беҙҙең өсөн бик мөһим. Беҙ 60-сы йылдарҙа ойошторолған клубты, данлы еңеүҙәр яулаған клубты үҫтереү өсөн яуаплы. Һис шикһеҙ, ярҙам буласаҡ, беҙ был мәсьәләне "Башнефть" менән дә тикшерҙек. Шул уҡ ваҡытта футболға һәм башҡа профессиональ төрҙәргә (ләкин был турала һуңыраҡ) лә ярҙам итәсәкбеҙ", - тип белдерҙе.

✔ 15 ғинуарҙан Фәрхәд Самедов йәмәғәтселек башланғысында Башҡортостан Башлығының сәнәғәт һәм ағыулыҡ-энергетика комплексы мәсьәләләре буйынса советнигы вазифаһын башҡара.

✔ Икенсе указ менән Фәрхәд Самедов үҙ теләге менән республиканың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы вазифаһынан бушатылды.

✔ Роман Симандуев - Башҡортостандың Мәскәүҙә Рәсәй Президенты ҡарамағындағы яңы тулы хоҡуҡлы вәкиле. Бынан алда ул бер нисә йыл республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән Кремлдең эске сәйәсәт идаралығында референт булып эшләй. Роман Симандуевтың рәсми биографияһы әлегә баҫылмаған. Ул яңы вазифала 15 ғинуарҙа эшләй башларға тейеш, тип хәбәр итәлә.

✔ 2019 йылдың тәүге аҙнаһында Башҡортостанда 9200 кеше киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләгән, уларҙың күбеһе - балалар. Өфөлә 2900 кешелә, шул иҫәптән 1800 балала киҫкен респиратор вирус инфекцияһы теркәлгән. Сирҙең эпидемик күтәрелеше күҙәтелмәгән. Төбәктә киҙеү менән ауырыусылар юҡ, тип белдерҙеләр Башҡортостан буйынса Роспотребнадзорҙың матбуғат хеҙмәтендә.

**"БАШИНФОРМ"**
**материалдары ҡулланылды.**

*✓ Революциянан һуң халыҡты тоталь грамотаға өйрәткән кеүек, бөгөн әҙәп ҡанундары буйынса ликбез үткәрергә ине. Руль артында кемдәр генә осрамай: иҫереге, наркоманы, аҡылы зәғифтәр...*



УЙЛЫҒА - УЙ...



# АЛЫҪ ЮЛ АТТЫ ҺЫНАЙ...

## ауыр юл ирҙе һынай

**Былтыр республикала юл-транспорт һәләкәттәренең унан алдағы йылға ҡарағанда кәмерәк булыуы хаҡында Рәсәй Эске эштәр министрлығының Башҡортостан буйынса ЮХХДИ идаралығы мәғлүмәттәренә ышанырға буламы, юҡмылыр - әммә көн һайын яңылыҡтар блогында бер генә түгел, ә бер нисә автоавария хаҡында кемуҙарҙан хәбәр ителә. Мәҫәлән, "Башҡортостанда Мерседес автобусы ҡатнашлығында үлемесле авария теркәлде." "63 йәшлек ир МАЗ йөк машинаһы тәгәрмәстәре аҫтында ҡалды..." 25 декабрь: "Өфө районы Михайловка ауылында бынан алда таныҡлығынан мәхрүм ителгән 39 йәшлек ир беренсе класс балаһын тапатып үлтерә"...**

Хәйер, был хаҡта хәбәр булмаған көн юҡ. Йыш ҡына ҡорбандар һаны берәү-икәү генә лә түгел. Тимәк, транспорт һәләкәтенән тыш бер генә көн дә "йәшәй алмайбыҙ", тигән һүҙ. Һуңғы ваҡыт бигерәк тә эскән килеш руль артына ултырырға баҙнат иткән әҙәмдәр һәм ҡатын-ҡыҙ водителдәр ғәйебе менән яһалған аварияларҙың йышайыуы билдәләнә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров республика юлдарындағы үлемесле һәләкәт динамикаһы хаҡында көн дә мәғлүмәт биреп тороуҙы юҡҡа ғына талап итмәне. Юл-транспорт һәләкәттәренең арта барыуы сәбәпсе бындай ҡарарға. Сағыштырырға, анализларға, сәбәптәрен асыҡларға, һәләкәттәр йыш ҡабатланып торған урындарҙа һаҡ билдәләре ҡуйып сығырға һ.б. маҡсаттарға ярашлы эшләнә был. 1 декабргә ҡарата былтыр республика юлдарында һәләк булыусылар һаны 504 кеше тәшкил итә. Унан алдағы йылда 12 ай эсендә был күрһәткес 512 кеше ине. 2017 йылда Башҡортостан юл-транспорт аварияларында һәләк булыусылар һаны буйынса илдә 11-се урында булһа, былтыр 4-се урынға "күтәрелде". Йәғни, былтыр 2017 йылдағыға ҡарағанда йәйәүлеләр үлеме 22,1 процентҡа артҡан. Шуныһы аптырата: уларҙы юл аша йәйәүле сыға торған махсус, рөхсәт ителгән урындарҙа бәрҙереп китеү осраҡтары күп: 3 процентҡа артҡан. Айырыуса ҡыҙғаныс хәлдәр балалар үлеме менән бәйле. Былтыр йыл башынан алып 3,6 мең юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлеп, 448 кеше һәләк булған. Республика буйынса ЮХХДИ етәксеһе Д.Ғилметдинов әйтеүенсә, юл фажиғәһе ҡорбандарының һәр өсөнсөһө - йәйәүле. Балалар ҡатнашлығында 380-дән ашыу юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлеп, унда 15 бала һәләк була, 408 бала йәрәхәт ала. Был, әлбиттә, былтырғы йылдың ун айына ҡарата мәғлүмәттәр. Ә бына 10-16 декабрҙә 15. 608 юл-транспорт ҡағиҙәләрен боҙоу осрағы, шул иҫәптән эскән килеш руль артына ултырыу фактары теркәлгән. Иғтибар итегеҙ: 6 көндә - 258 иҫерек водитель тотола! Ә уларҙың рейд ваҡытына эләкмәй ҡалғандары күпмелер? Уйлауы ла ҡурҡыныс...

Әлбиттә, республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Фәрит улы был йүнәлештә мәсьәләне ҡаты контролгә алмаҡсы, күптән кәрәк ине юлдарҙағы баш-баштаҡлыҡтарға ҡарата тап бына ошондай түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт. Күпме ғүмерҙәр һаҡлап ҡалыныр ине... Юл-транспорт тәртипһеҙлектәренә ҡаршы ҡуйыласаҡ комплекслы саралар системаһында юлдарға күп функциялы фото- һәм видеокамералар урынлаштырыу мәсьәләһе лә ҡарала. "Беҙгә камералар етмәй,- тип зарлана Д.Ғилметдинов. - Әлеге көндә улар ни бары - 200 дана, тағы ла 653 комплекс кәрәк". Әйткәндәй, бөгөнгө техник саралар иҫ киткес тиҙлек менән камиллаша. Заман фото- һәм видеокамера комплекстары хәрәкәт тиҙлеге, башҡа төр ҡағиҙә боҙоуҙарҙы ғына түгел, хатта руль артындағы иҫерек водителде лә шәйләп алыу һәләтенә эйә, тиҙәр. Бына быныһы шәп! Тик барыбер юл-транспорт ҡағиҙәләрен боҙоусылар менән көрәшеү өсөн был ғына етмәйәсәк. Хәүефһеҙлек күп йәһәттән юл-транспорт хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың бер-береһенә һәм йәйәүлеләргә ҡарата толерантлығы, аң һәм тәрбиә кимәленә ныҡ бәйле. Революциянан һуң халыҡты тоталь грамотаға өйрәткән кеүек, бөгөн әҙәп ҡанундары буйынса ликбез үткәрергә ине. Руль артында кемдәр генә осрамай: иҫереге, наркоманы, аҡылы зәғифтәр... Шундайҙарҙың ҡайһылары багажниктарында - махсус суҡмар, ҡуйынында пистолет йөрөтә, һәм бәләкәй генә юл конфликтын да ҡорал менән хәл итергә тотона. Бигерәк тә үҙенә юл бирмәгәндәрҙе ендәре һөймәй уларҙың. Автоһәүәҫкәрҙәр араһында үҙҙәрен закондан да, башҡаларҙан да өҫтөн ҡуйырға күнеккән әҙәмдәр күп. Машинаһы текә булған һайын, танау ҙа күтәрелә бара. Ә бит машина, ул ниндәй марка һәм күпме тороуына ҡарамаҫтан, тимер-томор объекты ғына ни бары; һаҡһыҙ, тәкәббер ҡыланыуҙан һынаулы секундтар эсендә металл өйөмөнә әйләнеүе ихтимал уның. Эйәһенә ул бер тамсы ла интеллект, аҡыл, мәртәбә өҫтәмәй. Тағы ла шуныһы: бер генә аҙым да йәйәү йөрөргә теләмәй хәҙер әҙәм балаһы, хатта 300 метр араны ла машинаһына ултырып барыу яғын ҡарай. Йәйәүле урамда йөрөү түгел, йортона ла яҡын килә алмай башланы: эштән ҡайтышлай, машиналар араһында ҡалған тар ғына аралыҡтан үтеп йөрөп, кейемен бысратырға мәжбүр. Мәскәүҙең үҙәк кварталдарын баҫып алған шәхси транспорт сараларынан бер аҙ бушатыу өсөн 15 декабрҙән түләүле туҡталҡаларҙа ваҡытлыса парковка хаҡы сәғәтенә 380 һумға тиклем арттырылды. Ял көндәре был райондарҙағы бушлай туҡталҡалар ҙа түләүлегә әйләнәсәк. Штраф һәм һалымдарҙың арттырыла барыуы ла күбеһенсә шул маҡсаттарҙа - урам-юлдарҙы бушатыу өсөн эшләнә. Өфөлә лә ошо тәжрибәне ҡулланыу яҡшы булыр ине. Ләкин халыҡты берҙәм генә машинаһынан "велик"тарға күсереп ултыртыу йә йәйәүлеләр сафына баҫтырыу мөмкин булмаған эш. Машинала йөрөүселәр ҙә, уны етештереүселәр һаны ла кәмемәйәсәк, ә бына хаҡтар артыуға табан ғына барасаҡ, ти белгестәр, сөнки һауаға бүленеп сығарылыусы эшкәртелгән ҡалдыҡ газдар буйынса яңы донъя стандарттары нормаһына ярашлы итеү өсөн конвейерҙағы автомобилдәрҙе даими рәүештә камиллаштырырға, ҡайтанан ҡорорға, яңы проекттар өҫтөндә эшләргә тура киләсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ИШАРА*

**Коррупцияға ҡаршы көрәш шойҡаны уҡытыусылар менән табиптарға ла килеп етмәксе икән. Әгәр ҙә ошо көндәрҙә генә Дәүләт Думаһы ҡарауына тәҡдим ителгән закон проекты ҡабул ителһә, уҡытыусыларға, табиптарға һәм чиновниктарға сәскә гөлләмәһенән башҡа ниндәй ҙә булһа бүләк ҡабул итеү тыйыласаҡ.**

# СӘСКӘЛӘР ҺӘМ... БАШҠАЛАР

Әлегә, белеүебеҙсә, Граждандар кодексындағы мәҙәниәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә 3 мең һумлыҡтан ҡиммәтерәк бүләк алырға ярамай, тигән 575-се статья ғәмәлдә булһа ла, яңы закон ҡабул ителгән хәлдә, был статья юҡҡа сығарыласаҡ һәм уҡытыусылар менән табиптар сәскәнән башҡа бүләккә өмөт итә алмаясаҡ. Был закон, әлбиттә, үҙ эшен намыҫлы, йәнетәне менән бирелеп башҡарған белгестәрҙе кәмһетәлер, ә шулай ҙа утһыҙ төтөн булмай икәнен дә онотмайыҡ. Мәҫәлән, балаһы мәктәп тамамлаған ата-әсәләр уҡытыусыларға үҙҙәре лә тағалмаған алтын биҙәүестәр, башҡа затлы әйберҙәр бүләк итә башлауы тураһында ишетеп-белеп торҙоҡ табаһа... Уҡытыусыларҙың, ишетеп белеүебеҙсә, хатта ниндәй бүләк алырға теләүе хаҡында үҙе "заказ" бирергә оялмағандары ла бар, имеш. "Сервиз алмағыҙ, былтыр ғына бирҙеләр, алтын муйын сылбыры кәрәк", ти икән ана шундайҙарҙың береһе минең танышыма - ата-әсәләр советы рәйесенә. Ә сирлеләр? Табип иғтибарын һәм хәстәрлеген үҙенә нығыраҡ йәлеп итеү өсөн нимәләр генә ташымайҙар уларға! Берҙән, ҡиммәтле дарыу һатып алып, өҫтәүенә, табип күңелен күрәм тип күпме йолона, бахырҡайҙар. Ә табипҡа нимә: был бүләк бирҙе бит әле, тип, әллә ниҙәр эшләргә йыйынмай ҙа ул, сөнки раҫланған стандарт схема буйынса булған дарыуҙар менән дауалай. Ул дарыуҙары ла булһа әле. Булмаһа, йыш ҡына уныһын да сирленең үҙенә һатып алырға тура килә: икеләтә сығым...

Закон ҡабул ителгән хәлдә лә, беҙҙә өйрәнелгәнсә, уны эшкә һынамай, буйһонмай, боҙорға йөрьәт итеүселәрҙе Хеҙмәт кодексында ҡаралған дисциплинар яуаплылыҡ көтә. Иҫкәртеү, шелтә биреүҙәре, хатта ки эштән ҡыуыуҙары ла ихтимал, имеш. Бөтәһе лә эш биреүсенең ғәҙеллегенә, принципиаллегенә бәйле буласаҡ. Тик... уның үҙенә лә бүләк биреп кенә язанан ҡотолоп ҡалмаһалар...

**Фәрзәнә ИЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ 2019 йылда 16 төбәктә, шул иҫәптән Башҡортостанда мәшғүллек хеҙмәттәре эшен берҙәм талаптар буйынса ойоштороуҙың пилот проекты башлана. 1 июлгә тиклем илдең Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәте һәм Хеҙмәт министрлығы биналарға, эш регламентына, ҡабаттан уҡытыу программаларына һәм уларҙың хеҙмәткәрҙәрен мотивациялауға берҙәм талаптарҙы билдәләгән халыҡ мәшғүллеге үҙәге стандартын әҙерләргә һәм раҫларға тейеш.

✓ "Башҡортостандың яратҡан рәссамдары" ижади проекты үҙенең сәнғәт турын дауам итә. 2019 йылдың ғинуарында команда республика ҡала һәм районларына гастролдәргә юллана, тип хәбәр итте проект етәксеһе Наил Мәхмүтов. Проекттың презентациялары 10 район һәм ҡала мәҙәниәт һарайында уҙа. Унда яҡташ рәссамдар тураһында һөйләү, осрашыу-концерттар ҡаралған. Төп ваҡиға - II "Башҡортостандың яратҡан рәссамдары" халыҡ рейтингын тапшырыу тантанаһы 31 ғинуарҙа "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа.

✓ Оҙайлы яңы йыл каникулдары тамамланды, ә сиратта Башҡортостан халҡын йәнә байрам көндәре көтә. 2019 йылдың март һәм май айҙарында граждандар, дөйөм алғанда, 12 көн ял итә. Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөн билдәләүгә бәйле 8 марттан 10-ына тиклем ял. Майҙа республика халҡы Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы уңайынан - 1-енән 5-енә, ә Еңеү көнөндә 9-ынан 12-һенә ҡәҙәр ял итә.

✓ "Спорт-экспресс" 2018 йыл спортсылары, тренерҙары, командалары, легионерҙары һәм асышы рейтингын баҫтырып сығарҙы. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә Өфө командаларының элекке уйынсылары һәм тренерҙары төп урынды биләй. Әйтәйек, иң яҡшы йыл спортсылары исемлегендә элекке ике "юлаевсы" - Кирилл Капризов, Александр Радулов һәм киберфутболсы Роберт Фәхретдинов, йыл тренерҙары исемлегенә "Өфө" футбол клубының элекке ике остазы: Виктор Гончаренконы һәм Сергей Семак ингән.

**“БАШИНФОРМ” материалдары ҡулланылды.**

*✓ Башҡортостанда тейешле стажға эйә булған һәм әлеге ваҡытта эшләмәгән 51 мең ауыл кешеһенә билдәләнгән түләү арттырылды. Ағымдағы йылдың ғинуарынан ауыл халҡына айлыҡ арттырыу 1333 һумдан ашыу тәшкил итә.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ЙОҒОНТОЛО БУЛДЫ

✓ **Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Сәйәси һәм иҡтисади коммуникациялар агентлығы" эксперттары төҙөгән Рәсәй Федерацияһы субъекттары башлыҡтарының йоғонто яһау рейтингында күтәрелде.** Билдәләнеүенсә, Радий Фәрит улы рейтингта 24-се урынды биләй ине. Әле республика етәксеһе 21-се баҫҡыста. "Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың Торатау һәм Йөрәктау шихандарын һаҡлау өсөн "Торатау" геопаркын булдырыу тураһында ҡарарынан һуң рейтингы күтәрелә башланы", - тиелә хәбәрҙә. Тәүге өсәү иҫәбенә Мәскәү мэры Сергей Собянин, Чечен Республикаһы башлығы Рамзан Ҡадиров, Санкт-Петербург губернаторы вазифаһын башҡарыусы Александр Беглов инде.

✓ **Быйыл 12 һәм 13 мартта Федерация Советында Башҡортостан Республикаһы көндәре уҙа.** "Федерация Советы комитеттарының киңәйтелгән ултырыштарында республиканың стратегик үҫешен, Башҡортостан иҡтисадындағы өҫтөнлөклө проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙы, башҡа төбәктәргә таратыу маҡсатлы ярашлы булған иң яҡшы тәжрибәләребеҙҙе тикшереү күҙаллана, - тип хәбәр итте Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Беҙ Рәсәй субъекттары бюджеттары тигеҙләнеше, төбәк һәм федераль ҡануниәтте камиллаштырыу мәсьәләләрен дә күтәрергә уйлайбыҙ".

✓ **Дәүләт Думаһы депутаттары тәүге уҡыуҙа Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай әҙерләгән һәм Рәсәй парламентының түбәнге палатаһына тәҡдим иткән "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡабул итте.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, һүҙ белем биреү ойошмалары эшмәкәрлеген бойондороҡһоҙ баһалау өлкәһендә дәүләт органдары вәкәләттәре хаҡында бара. Ҡабул ителгән законға ярашлы, мәғариф эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу шарттары сифаты баһаланырға тейеш. "Ләкин "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль закондың ҡайһы бер статьяларында шарттар төшөнсәһен үҙ эсенә алмаған мәғариф эшмәкәрлеге сифатын бойондороҡһоҙ баһалау тураһында элекке формулировка һаҡланған. Беҙҙең закон сығарыу башланғысы ошо етешһеҙлекте бөтөрөүгә йүнәлтелгән", - тип өҫтәне Константин Толкачев.

✓ **Рәсәй Хөкүмәтендә төбәктәргә хәүефле агрометеорология күренештәре менән бәйле ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән килгән зыянды ҡаплауға аҡса бүлеү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйылды.** Документҡа ярашлы, Башҡортостан 238,3 миллион һум алды. Тәбиғи характерҙағы ғәҙәттән тыш хәлдәр һөҙөмтәһендә килтерелгән зыянды компенсациялауға субсидиялар республика ауыл хужалығы етештереүселәре иҫәбенә йүнәлтелгән дә инде. Былтыр яҙғыһын һәм йәйгеһен төбәктең ҡайһы бер райондарында һауала һәм тупраҡта ҡоролоҡ, ҡыуан ел, ҡойма ямғыр һәм боҙборсаҡ күҙәтелде. Хәүефле агрометеорология күренештәре теркәлгән 19 район һәм Күмертау ҡалаһы биләмәһендә ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелде. Дөйөм алғанда, 105,6 мең гектар майҙанда төбәктең 223 ауыл хужалығы предприятиеһы сәсеүлеге зыян күрҙе.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Яңы йылда Өфө ҡала хакимиәтендәге тәүге оператив кәңәшмә, нигеҙҙә, байрам көндәрендә уҙған сараларға һәм ҡала хеҙмәттәренең эшенә йомғаҡ яһауға ҡайтып ҡалды. "Вьюговей-2019" фестивале хаҡында Мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы етәксеһе Исламетдин Мәмбәтов сығыш яһаһа, ҡала хеҙмәттәренең эше тураһында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова таныштырҙы. Шулай уҡ былтыр көн ҡаҙағына сығарылған мәсьәләләр буйынса ла яуаплылар яуап тотто.**

# ЙОМҒАҠ ЯҺАЛДЫ

Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары, Финанс идаралығы начальнигы Гөлнара Вәлиева йыл башында мотлаҡ атҡарылырға тейешле эштәр тураһында йыйылыусыларҙың тағы бер тапҡыр хәтеренә төшөрҙө. Йәғни муниципаль заданиеларҙы үтәүгә тотонолған сығымдарҙы ваҡытында финанслау маҡсатында автономиялы һәм бюджет учреждениеларының финанс эшмәкәрлегеге планы раҫланырға һәм билдәле ваҡытта рәсми сайтта урынлаштырылырға тейеш. Шулай уҡ барлыҡ бюджет йөкләмәләре иҫәпкә алыныуы мотлаҡ. Әгәр инде ошо эштәр эшләнмәһә, ойошмаларҙы финанслау мөмкин булмаясаҡ. Әлбиттә, эш хаҡы позицияһы финансланасаҡ, әммә башҡа позициялар буйынса тотҡарлыҡтар булыуы ихтимал.

Яңы йылдан төрлө закондар, ҡарарҙар көсөнә инә, уларҙың ҡайһыларын халыҡ хатта ишетеп, аңлап та өлгөрмәй. Йыл башынан индерелгән шундай яңылыҡтарҙың береһе - ул ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын, йәғни, ябайлаштырып әйтһәк, сүп-сарҙы махсус хеҙмәттәрҙең йыйыуы һәм уның өсөн ҡала халҡының ғына түгел, хатта төпкөл ауыл халҡының да аҡса түләргә тейешлеге. Кәңәшмәлә был төп мәсьәлә булып торҙо тиергә лә мөмкин.

"Ҡаланы таҙартыу буйынса махсуслаштырылған автомобиль хужалығы" МУП-ы директоры Айрат Әхмәтов белдереүенсә, 1 ғинуарҙан республиканың үҙәк өлөшө, шул иҫәптән Өфө ҡалаһы һәм тағы ла 14 муниципаль район ингән беренсе зонала төбәк операторы эш башлаған. 1-8 ғинуарҙа зонала 67 махсус техника эшләгән һәм 23700 кубометр сүп-сар сығарылған.Ҡайһы бер райондарҙа был эш 2 ғинуарҙа башланғанлыҡтан, уларҙа контейнерҙар тулып, сүп-сар ситкә лә өйөлөп киткән, әммә улар артабанғы ике көндә тулыһынса таҙартылған. Бындай күренештәр Жилин, Жуков, Иглин ҡасабаларында күҙәтелгән. Сүп-сарҙы ваҡытында ташып бөтөү өсөн өҫтәмә техника бүленгән, Аҡбирҙе ауылында өҫтәмә контейнерҙар урынлаштырылған.

Баш ҡалала байрам көндәрендә 102 берәмек техника йәлеп ителгән, барлығы 58 мең кубометр ҡый сығарылған. Уҙған йылдың 31 декабрендә һәм яңы йылдың беренсе көнөндә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын түгеү күләме 15-20 процентҡа артыуын иҫәпкә алып, ҡаланың ҙур майҙандарына өҫтәмә бункерҙар ҡуйылған. Шуға ҡарамаҫтан, айырым майҙансыҡтарҙа тулы контейнерҙарға техника яҡын килә алмау һәм эште ҡулдан башҡарыу һөҙөмтәһендә, маршруттарҙың ваҡыттан тайпылыу осраҡтары ла теркәлгән.

Әйткәндәй, "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсуслаштырылған автомобиль хужалығы" МУП-ында хәҙер көн һайын иртәнге 8-ҙән киске 8-гә тиклем колл-үҙәк эшләй, граждандар унда шылтыратып, ТКО буйынса һорауҙарын бирә ала. Раштыуа каникулдары ваҡытында барлығы 72 шылтыратыу булған һәм уларҙың һәр ҡайһыһы буйынса сара күрелгән. "Төбәк операторының байрам көндәрендәге эшен анализлап, шуны әйтергә була, - тине Айрат Әнүәр улы. - Беҙгә өҫтәмә техника кәрәк. Шулай уҡ булған автопаркты яңыртыу талап ителә, сөнки ул 70,1 процентҡа иҫкергән. Баҡса миҙгеле етеүгә баҡса участкаларында, шулай уҡ ауылдарға контейнерҙар ҡуйырға, контейнер майҙансыҡтарын модернизацияларға кәрәк".

Кемгә нисектер, әммә сығыш яһаусыны тыңлағандан һуң, яңы реформаға халыҡ ҡына түгел, власть үҙе лә, уны тормошҡа ашырырға тейешле ойошмалар ҙа әҙер булмай сыҡты, тигән фекер ҡалды. Ярай, ҡалала контейнер майҙансыҡтары ла, техника ла бар һәм сүп-сар түгеү элек-электән башҡарылып килә. Әммә оператор ҡарамағына ингән зоналарҙағы ауылдарҙа контейнерҙарҙың эҙе лә күренмәй әле. Ҡыҫҡаһы, һорауҙар ҡала.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# АУЫЛДАҒЫЛАРҒА

**2019 йылдың 1 ғинуарынан ауыл хужалығында 30 йыл хеҙмәт стажына эйә эшләмәгән пенсионерҙар өсөн страховка пенсияһына билдәләнгән түләү 25 процентҡа арттырылды.**

"Башҡортостанда тейешле стажға эйә булған һәм әлеге ваҡытта эшләмәгән 51 мең ауыл кешеһенә билдәләнгән түләү арттырылды. Ағымдағы йылдың ғинуарынан ауыл халҡына айлыҡ арттырыу 1333 һумдан ашыу тәшкил итә. Бының өсөн бер ниндәй ҙә ғариза яҙыу талап ителмәне, был пенсия (түләү) эше мәғлүмәттәре буйынса башҡарылды", - тип хәбәр итте Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров. Уның һүҙҙәренсә, ауыл хужалығындағы эш стажын иҫәпләү өсөн Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән раҫланған Эштәр, производстволар, һөнәрҙәр, вазифалар, белгеслектәр исемлеге файҙаланылған. Ауыл ерендә төп эшмәкәрлеге ауыл хужалығы менән бәйле булмаған ойошмаларҙа һәм учреждениеларҙа (мәктәптә, ауыл советында, фельдшер һәм медицина пунктында) эшләгәндәр өсөн билдәләнгән түләү арттырылмай. Ауыл хужалығында (үҫемлекселек, малсылыҡ, балыҡсылыҡ) 30 йыл эш стажы хеҙмәт кенәгәһендәге яҙмалар менән раҫланмаған пенсионерҙар пенсияны яңынан иҫәпләтеү өсөн теләгән ваҡытта Пенсия фондына өҫтәмә документтар тапшырырға хоҡуҡлы. 1 ғинуарҙан 31 декабргә тиклем мөрәжәғәт иткән осраҡта пенсия 2019 йылдың башынан тейешле суммаларҙы юғалтыуһыҙ ҡабаттан иҫәпләнә. 2019 йылдың 31 декабренән һуң иһә страховка пенсияһына билдәләнгән түләүҙе яңынан иҫәпләү тураһында ғариза бирелгән айҙан һуң икенсе айҙың 1-енән иҫәпләнә.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә 2019 йылдың декабренә Дуҫлыҡ монументы янында Сочи урамы аша ер аҫты йәйәүлеләр үткәүелен төҙөү күҙаллана. Контракттың максималь хаҡы - 140 миллион 599 мең һум, тендер дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Подрядсыны билдәләү аукционы 2019 йылдың 25 ғинуарында була. Подрядсыға 110 метрлыҡ үткәүел төҙөргә, яҡтыртҡыстар ҡуйырға һәм коммуникацияларҙы күсерергә кәрәк. Проект Өфө бюджетынан финанслана.

✓Дәүләт һатып алыуҙары сайтында Өфө яры буйынан үтергә тейешле автомобиль юлы документтарын әҙерләүгә һәм төҙөлөш-монтаж эштәрен башҡарыуға тендер баҫылған. Оҙонлоғо 507 метрлыҡ юлды 465,6 миллион һумға һалырға тәҡдим ителә. Ғаризалар 2019 йылдың 14 ғинуарына тиклем бирергә мөмкин, 24 ғинуарҙа подрядсы билдәләнә. Эштәрҙе 2019 йылдың 30 сентябренә ҡәҙәр башҡарырға кәрәк. Проектты Өфө бюджетынан финанслау күҙаллана.

✓Өфөлә сноуборд буйынса Бөтә Рәсәй балалар ярыштары үтте. Йәш спортсылар өсөн һынауҙар баш ҡаланың тау саңғыһы буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбендә уҙҙы. Республика Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Өфөгә 11-14 йәшлек 120-гә яҡын сноубордсы йыйылды. Башҡортостан исеменән 37 спортсы - Өфө һәм Белорет спорт мәктәптәре тәрбиәләнеүселәре сығыш яһаны.

✓Өфөләрҙе "Беренсе чемпион Ғабдрахман Ҡадиров" фильмының премьераһына саҡыралар. "Башҡортостандың йөҙ исеме" проекты сиктәрендәге презентация 29 ғинуарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһында уҙа. Ғабдрахман Ҡадиров - СССР-ҙа берҙән-бер боҙҙа мотоуҙыш буйынса алты тапҡыр донъя чемпионы, Европа чемпионы, команда ярыштарында өс тапҡыр СССР чемпионы. Ун йылдан ашыу СССР йыйылмаһы өсөн сығыш яһай, һуңынан унда өлкән тренер булып эшләй, Өфөнөң "Башҡортостан" командаһы менән күнекмәләр үткәрә.

✓24-26 ғинуарҙа Бөрө ҡалаһында "Керәшен һыуыҡтары - 2019" төбәк-ара эстрада йыры һәм бейеү фестиваль-конкурсы Башҡортостанда конкурс миҙгелен аса. Ғаризалар kreshmorozy2019@mail.ru, gukrcnt@mail.ru электрон адресына 2019 йылдың 23 ғинуарына тиклем ҡабул ителә. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: 8 (347) 289-66-96, 8-905-355-44-20.

**"БАШИНФОРМ" материалдары ҡулланылды.**

КӨН ҠАҘАҒЫНА

# ҠАР - БӘРӘКӘТ

**Әлеге миҙгелдә ҡала халҡын ниндәй мәсьәлә борсой, беләһегеҙме? Хәйер, быны өсөн күрәҙәсе булыу кәрәкмәй, сөнки йылдар дауамында инде халыҡтың тын алышынан уның нимә уйлағанын белергә өйрәнеп тә бөттөк шикелле. Әлбиттә, ҡар яуыу һәм уны таҙартыу бөгөн дә көн үҙәгендә тора: оҙайлы байрамдар тамамланды, эшкә ваҡытында йөрөү талабын бер етәксе лә үҙгәртмәгән. Һәм ҡала халҡының иң маҙаһына тейгәне ҡар булып сыға. Әйткәндәй, ауыл халҡы тәбиғәттең был күренешенә ыңғай ҡарай һәм ни тиклем ҡар ҡатламы күберәк, шул тиклем нығыраҡ ҡыуана - ҡар яуыуын улар бәрәкәткә тиңләй. Ә ҡала кешеһе өсөн ҡар - проблемалар сығанағы. Быйыл ул нисек хәл ителә икән?**



4 ғинуарҙа киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре Ҡала торлаҡ хужалығы идаралығы хеҙмәткәрҙәре менән берлектә ошо мәсьәлә буйынса рейд үткәрҙе. Бер үк ваҡытта яңы алынған махсус техниканың эше менән танышыу ҙа булды. Өфөлә ихаталарҙы комплекслы таҙартыу быйыл дүртенсе тапҡыр алып барыла. Психологтар кеше бер үк гәмәлдә 21 көн дауамында эшләһә, күнегеп китә, ти. Баш ҡала халҡы әллә икенсе ҡамырҙан әүәләнгән, әллә психологтар хаталана - дүрт йыл дауамында атҡарылған эштең халыҡҡа ла бәйле икәнен граждандар әле булһа төшөнөп етә алмай, шикелле. Сөнки ихаталарҙы көндәлек таҙартыуҙан айырмалы, комплекслы таҙартыу графикка ярашлы тормошҡа ашырыла һәм уға төп юлдарҙы, йәйәүлеләр юлдарын, парковка урындарын, подъезд, йорт ҡыйыҡтарын, япмаларҙы ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу инә. Йәғни, ябайлаштырып әйткәндә, генераль таҙартыу. Барыһына ла мәғлүм: фатирҙарҙа, ғәҙәттә, генераль таҙартыу үткәргәндә, унда бар мебель урынынан күсә, һәр ек енеткләп таҙалана. Әммә... Ни өсөндөр ҡала йорттары ихаталарында генераль таҙартыу башланһа, граждандарҙың автомобилдәре ҡамасау булып ултыра ла ҡуя. Байрам көндәрендә, әлбиттә, графикка ярашлы комплекслы эш башланһа, хужалар тимер атын күсереп ҡуя ала, ә бына эш көндәрендә автомобилдәре ихатала ултырып ҡалған осраҡта коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәренә нимә эшләргә? Әлбиттә, улар генераль таҙартыуҙы өҫтөн-мөҫтөн генә үткәрергә мәжбүр, әммә был, эшләмәйҙәр, тип әйтергә нигеҙ була алмай, сөнки ҡала хеҙмәттәре ҡар яуыуға бәйле килеп тыуған уңайһыҙлыҡтарҙы нисек булһа ла кәметергә тырыша. Хатта граждандарҙы әүҙемерәк булырға, ихаталарҙы таҙартыу барышында шәхси автомобилдәрен алып торорға, боҙлауыҡ барлыҡҡа килгән, ҡыйыҡтан ҡар төшөргә торған хәүефле урындарҙы күреү менән территория ҡараған идара итеү компанияларына шылтыратып хәбәр итергә саҡыра. Ҡул аҫтында булһын өсөн беҙ ҙә уларҙы гәзит битендә бирергә булдыҡ: Өфө ҡалаһы райондарының Торлаҡ хужалығы идаралығының диспетчерҙары телефоны:

**Дим районы 281-22-30;**
**Ленин районы 293-56-40;**
**Киров районы 293-11-00;**
**Совет районы 223-12-42;**
**Октябрь районы 292-73-00;**
**Орджоникидзе районы 286-00-90;**
**Калинин районы 238-43-81;**
**Үҙәк диспетчер 235-48-00.**

Яңы йылдың тәүге эш көнөнә сыҡҡан төндә лә ҡар яуыуға ҡарамаҫтан, Өфө ҡалаһы территорияһында 237 берәмек техника, 59 юл хеҙмәткәре, 854 урам һепереүсе эшләй. Бигерәк тә күперҙәргә, юлдарға, юлдарҙа үр артылыу һәм төшөү урындарына, туҡталыштарға етди иғтибар бирелә. Уларға ҡом һибелә. Коммуналь хеҙмәттәрҙең эшен Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ярҙамында алынған махсус техника ла бер аҙ еңеләйткәндер, моғайын. Ни тиһәң дә, 14 үҙбушатҡыс техника, 5 - ауыр һәм 11 еңел автогрейдер, 6 фронталь тейәгес, өс ҡар тейәгес коммуналь хеҙмәткәрҙәр өсөн ҙур ярҙам һәм көс. Әммә, ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: ул техниканы элекке мэр ваҡытында ла алып булмай инеме ни? Уның республика етәкселеге менән мөнәсәбәттәре киҫкен ине, шуға Хөкүмәт ҡалаға ярҙам итмәне, тип яуаплаусылар ҙа табылыр. Ләкин бында ни өсөн кешеләр һәм эшселәр зыян күрергә тейеш һуң? Бары тик власть алмашыныу менән бығаса булмаған финанс мөмкинлектәренең килеп сығыуы, яңы мэрға һәр саҡ Хөкүмәт тарафынан ярҙам ҡулы һуҙылыуын күреп, "Ялалов бер ниндәй финанс ярҙамһыҙ нисек эшләне икән?", тип аптырарға ғына ҡала. Әлегә яңы йылда күрттәр барлыҡҡа килтереп яуған ҡарҙар булмағанлыҡтан, халыҡ яңы мэрҙы һәм яңы башлыҡ тандемын маҡтай. Әммә кешегә ай ҙа, ҡояш та ярамай: ҡар ҙа яумай тормаҫ, уны яңы техника ла таҙартып һәм ҡаланан ситкә сығарып өлгөрмәй башлаһа, тағы ла ғәйепле табылыр. Ә ауыл халҡы, киреһенсә, ҡар яуыуға шатланыр ғына...

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әҙерләне.**

# МАШИНАЛЫЛАРҒА

**9 ғинуарҙан Рәсәй Үҙәк банкының автограждандыҡ яуаплылығын мотлаҡ страховкалауҙа (ОСАГО) тариф коридорын өҫкә һәм аҫҡа 20 процентҡа киңәйтеү тураһында күрһәтмәһе үҙ көсөнә инде.**

Физик берәмектәрҙең еңел автомобилдәре өсөн база тарифы ставкалары диапазоны әле 2746-4942 һум тәшкил итә. Быға тиклем ул 3432-4118 һум ине. Бынан тыш, 9 ғинуарҙан водителдәрҙе стаж һәм йәш буйынса 58 категорияға бүлеү аныҡлана (ғәмәлдә дүртәү). Ике йылға тиклем автомобиль йөрөтөү тәжрибәһенә эйә булған 16-21 йәшлек водителдәр өсөн максималь коэффициент арта - 1,8-ҙән 1,87-гә ҡәҙәр ."Мультидрайв" полистары өсөн коэффициент та 1,8-ҙән 1,87-гә тиклем арта.

Шулай уҡ стаж һәм йәш өсөн ташламалар ғәмәлгә инде. Иң ҙуры - 7 процент (0,93 коэффициентына тап килә) алты йыл стаждан башлап 59 йәштән өлкәнерәк водителдәр өсөн билдәләнә. Элекке ОСАГО системаһында стаж һәм йәш өсөн ташламалар булманы. Бынан алда Рәсәй банкында яңы тарифтар индереү сәбәпле полистың уртаса хаҡы 1,5 процентҡа артыуы ихтимал тип баһаланғайны. Рәсәй Автостраховкалаусылар союзы баһаһы буйынса, страховкалаусылар йыйымы үҫеше яҡынса 5 процент тәшкил итергә тейеш.Шулай уҡ Рәсәй Үҙәк банкы күрһәтмәһенә ярашлы, 2019 йылдың 1 апреленән "бонус-малус" коэффициентын биреү системаһы үҙгәрә (аварияһыҙ йөрөгән өсөн ташлама һәм авария өсөн өҫтәмә).

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ТӘҘРӘЛӘР ВАТЫЛА...

**Башҡортостан Республикаһы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләнеп, күп тә үтмәҫтән, Радий Хәбиров баш ҡалалағы вандализм күренештәрен ҡаты тәнҡитләп сыҡҡайны. Әммә тәнҡит менән генә тормоштоң кире күренештәрен ыңғай яҡҡа үҙгәртеп булһа икән!**

Эйе, Өфөлә граждандарҙың йәшәү һәм ял итеү шарттары сифатын яҡшыртыу буйынса күп эштәр башҡарыла, әммә барыһы ла уны тейешенсә баһалаһа икән дә бит, юҡ шул, ҡала киңлегендә һәм дөйөм йорт милкендә булған нәмәләр даими рәүештә ҡыйратылыуға дусар ителә. Мәҫәлән, уҙған йылдың һуңғы кварталында ғына 4 мең вандализм осрағы теркәлгән һәм милекте ҡайтанан тергеҙеүгә 500 мең һум аҡса сарыф ителгән. Бик йыш торлаҡ йорттарҙың баҫҡыс майҙансығы, почта йәшниктәре, яҡтылыҡ сығанаҡтары, ишек биктәре, ҡыйыҡҡа сығыу һәм подвалға төшөү юлдары, йорт фасадтары, балалар һәм спорт майҙансыҡтары, эскәмйәләр, сүп һауыттары зыян күрә. Һөҙөмтәлә идарасы ойошмаларға шул уҡ йорттарҙа йәшәүселәрҙән йыйылған аҡсаны планда ҡаралмаған сығымдар өсөн тотонорға тура килә, йәғни зыянды шул йорттарҙа йәшәүселәр үҙҙәре ҡаплай. Шуға күрә, ҡыйратырға, емерергә ҡул ҡысып торғанда ла, вандалдар тәүҙә аҡсаның кем кеҫәһенән сыҡҡанын уйлаһын ине...

# РЕТРО-АВТОМОБИЛДӘР МУЗЕЙЫНДА

**Кириллово ҡасабаһында Насировтар ғаиләһенең үҙенсәлекле "Техника легендалары - ретро донъя" тип аталған шәхси музейы бар. Ошо көндәрҙә унда Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин да булып китте.**

Коллекция хужаһы Рим Насиров белдереүенсә, 2005 йылда һатып алынған "Москвич-401" машинаһынан башланған коллекцияла хәҙер бөтөн донъянан йыйылған 200-ҙән ашыу техника, шулай уҡ мотоциклдар, велосипедтар, танкылар, хатта самолет та бар. Автомобилдәрҙе реставрациялау өсөн ике автосервис эшләй, бер машинаны тергеҙеүгә бер нисә айҙан йыл ярымға тиклем ваҡыт китә. Үкенескә күрә, әлеге ваҡытта музей раритет техника менән танышырға теләүселәрҙе ҡабул итмәй, бары тик һирәк-һаяҡ мәктәп уҡыусылары, етем һәм физик мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн генә экскурсиялар ойоштороla. Сәфәре һуңында Өлфәт Мансур улы музей өсөн айырым урын бүлеү зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ул саҡта инде теләгән һәр кем һирәк ретро-автомобилдәр, уларҙың тарихы менән танышыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Әнис орлоғо

✧ Әнис (укроп) орлоғо ҡан баҫымын нормалләштереү, эс ҡатыуын дауалау өсөн, ашҡаҙан һәм бөйәл ҡыуығы ауыртҡанда, шулай уҡ бөйәл тотмағанда ҡулланыла. Бер семтем әнис орлоғон ябай сәйгүнгә һалып, ҡайнар һыу ҡойоп, сәй кеүек бешерергә. 40 минут таҫтамалға урап тотоғоҙ, шул саҡта орлоҡтоң файҙалы матдәләре бүленеп сығып өлгәрә. Сөзгөн морононан көнөнә 7-10 тапҡыр 3-әр йотомлап эсеп йөрөргә. Ас ҡарынға ярамай. Шулай уҡ ашҡаҙанығыҙ тулы ла булмаһын. Дауаланыу курсы - 1 аҙна, һуңынан уны сирҙе иҫкәртеү өсөн айына 2-3 көн эсеп алырға.

✧ Әнис орлоғо тәнәтмәһе йүткереүҙе, ҡурылдайҙы, тамаҡ ауыртыуҙарын яҡшы дауалай. Йөҙөкһоҙлоҡтан яфаланғанда ла әнис орлоғон сәй итеп эсегеҙ.

## Һоло

Һоло һыуы ҡанды таҙарта, матдәләр алмашыныуын көйләй, бөйөрҙәр эшмәкәрлеген яҡшырта, иммунитетты нығыта. Уны әҙерләү өсөн тигеҙ күләмдә ярҙырылған һәм ҡабыҡлы ҡоро һоло алырға, болғарға. 3 ҡалаҡ һолоға ярты литр һыу өҫтәп, ҡайнау хәленә еткерергә һәм талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға. Һыуына төшкәс, марля аша һөҙөргә. Һоло һыуы әҙер. Ҡасан эскегеҙ килә, шул саҡта эсергә. Көнөнә 2 стакан тирәһе килеп сыға. Тәнегеҙ еңеләйеп китер. Һолоно магазиндарҙан да, дарыуханан да һатып алырға була.

## Күреү һәләтен яҡшыртыу

✧ 0,5 кг алоэ япраҡтарын ҡара ҡағыҙға йәки фольгаға урарға һәм 2 аҙна һыуытҡысҡа һалып торорға. Япраҡтарҙы йыуырға ла, ҡырҡырға ла кәрәкмәй. 2 аҙнанан һуң сәнскеләрен ҡырып алып, ит турағыстан үткәрергә. Уға ярты кг бал һәм ярты литр кагор өҫтәргә. Яҡшылап болғатырға, ҡапҡаслы быяла һауыттарға һалырға һәм һыуытҡыста һаҡларға. Иртән ас ҡарынға йылы һыуға ҡушып 1-әр ҡалаҡ ашарға. Оҙайлы ваҡыт ҡабул итергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Үҙең йәшәгән төбәктең, йорттоң энергетикаһы тигән нәмә бар. Оло кешеләр, ошо энергиянан айырылһа, ауырый башлайҙар, ғүмер буйы йәшәгән ерҙәрен һағынып, һағышҡа баталар, төшөнкөлөккә бирeләләр...*

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Борон бөтөн төбәк башҡорттары ла кейеҙ менән таныш булған. Тик ултыраҡ тормошҡа күсә барыу (ул Кама буйы һәм башҡа төньяҡ ерҙәренән башланып, яйлап көньяҡҡа таралған), иң мөһиме, мал һанының (бигерәк тә һарыҡтарҙың) кәмеүе һөҙөмтәһендә был шөғөл йәшәгән территория тарайған.**

XIX быуат башында кейеҙ баҫыу таралған өлкәләр ярым күсмә тормош алып барған малсылыҡ районлары сиктәре менән тап килгән, ҡайһы бер ерҙәрҙә ултыраҡ малсылыҡ һәм ер эшкәртеү районларында (Р. Янғужин билдәләүе буйынса) осраған. Был осорҙа ярым күсмә малсылыҡ менән Екатеринбург, Шадринск, Силәбе, Верхнеуральск, Ырымбур, Боғорослан, Быҙаулыҡ, Бөгөлмә һәм Стәрлетамаҡ, һирәгерәк Бәләбәй, Өфө, Троицк өйәҙҙәрендә осрай. Был мәлдә Өфө өйәҙенең ҙур өлөшө ултыраҡ тормош алып бара. XIX быуаттың аҙағына был өйәҙҙәр ер эшкәртеүсе төбәк иҫәпләнә башлай. Ҡалған территорияла малсылыҡ һаман төп урында тора. көньяҡ һәм көнсығыш далаларында XX быуат башында ла халыҡ йәйләүгә сыға, традицион көнкүреш тә һаҡлана. Торлаҡта кейеҙ ҡулланыла. Ә кейеҙ баҫыу өсөн һарыҡсылыҡ үҫешергә тейеш була.

Башҡорт малсылығы системаһында һарыҡсылыҡтың урыны бөгөнгәсә насар тикшерелгән. Был XVIII быуат аҙағында, XIX быуатта һәм хатта XX быуат башына башҡорттарҙың хужалығында күпме баш һарыҡ булыуы, дөйөм өлкә тураһында мәғлүмәттәрҙе өҙөкйыртыҡ ҡына беләбеҙ. XVIII быуатта ҙур көтөүҙәр киң талаған күренеш булған. И. Георги, Көньяҡ Уралға һәм күрше төбәктәргә академик экспедиция һығымталарын йомғаҡлап, малсы башҡорттарҙың хужалығы тураһында былай тип яҙа: "... хатта ябай ғына кешенең дә 30-50 аты бар, ҡайһыларҙа улар 500-гә етә, байҙарҙа 1000-дән алып 2000 мең йылҡы, йәки унан да күберәк. Байҙарҙа һарыҡтар һаны йылҡылар һанына тиң, йәки унан да күберәк".

"Ат - дан, һарыҡ - байлыҡ" тигән мәҡәл бар башҡортта. Әммә XIX быуатта хатта Ырымбур губернияһында һарыҡтар һаны кәмей. Һарыҡсылыҡ өсөн шарттар насар булыу сәбәпле, таулы төбәктәрҙә, бигерәк тә Ағиҙел йылғаһы бөгөлөндә һәм бейек тауҙарҙа һарыҡтарҙы аҙ тоталар. Инйәр буйындағы Ҡатай улысының ҡайһы бер урындарында (Уҫманғәле, Бирҙеғол, Әрепҡол, Ғәҙелша, Ноҡат, Көйөк һ.б) XIX быуатта һарыҡ һәм кәзә көтөү малсылыҡтың иң үҫешкән йүнәлеше булып тора, әммә уларҙа ла мал һаны аҙ була (1 ихатаға уртаса 4-5, һирәгерәк 10 һарыҡ). Бына шуның өсөн дә таулы урындарҙа бүрәнә йорттар һәм ҡыуыштар киң тарала. Уларҙа кейеҙ урындыҡҡа түшәү, түшәк ярағы булараҡ ҡына ҡулланыла.

Урал алдында XIX быуат уртаһында һарыҡсылыҡ Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Юрматы улысында үҫешә. Ашҡаҙар һәм уның ҡушылдыҡтары үҙәнендә ауылдар күп (Елембәт, Бала Сытырман, Ҡабыҡҡыуыш, Әлиғужа һ.б), статистика буйынса уларҙа 1 ихатаға 20-25 һарыҡ тура килә. Көньяҡҡараҡ, Урал тауҙарына табан сағыштырмаса түбән күрһәткесле (1 ихатала 4 һарыҡ) ауылдар ултыра. Уларҙың араһында һарыҡты күпләп тотҡандары ла осрай. Мәҫәлән, Нөгөш буйындағы Тамьян улысынданың Смаҡ ауылында 1842 йылда һарыҡтар һаны (460 баш) йылҡы һанын ике тапҡыр уҙып киткән, уртаса бер ихатаға 20 һарыҡ тура килгән. Оло Эйек буйы киңлегендәге Моҡас ауылында дөйөм һарыҡтар көтөүе 760 баштан торған, уртаса күрһәткес Смаҡ ауылы менән сағыштырғанда түбәнерәк.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҺАБАҠТАР



**Олоғайып, һыу-маҙарға йөрөргә ауыр була башлағас, өләсәйемде икенсе ауылға күсереп алып ҡайттылар. "Тиҙ генә машина менән барып, бөтә нәмәһен тейәгеҙ ҙә, алығыҙ ҙа ҡайтығыҙ, юғиһә, бер ҡасан да килмәҫ ул", - тигән әсәйем. Шулай эшләгәндәр ҙә, хатта өйөндә бер бөртөк ҡалаҡ та ҡалдырмағандар. Бар ауыл килеп, аптырап, илап хушлашып тороп ҡалған. Ә бит өләсәйем 15 йәшендә генә килен булып төшөп, ғүмере буйы ошо ауылда йәшәгән. Әлбиттә, ауылда яңғыҙына ауыр, бигерәк тә оло кешегә. Мин үҙем дә, олоғайғас, Хоҙайым, кешегә көнөмдө ҡалдырмаһаң ине, тип ниәттәр әйтеп кенә йөрөйөм…**

# ОЛОЛАРҘЫ...

## нигеҙенән айырмағыҙ!

Ауылға ҡайтып төшһәм, өләсәйем өйөбөҙҙөң икенсе ҡатындағы бер бүлмәлә япа-яңғыҙы моңһоуланып ултыра. Уны күрҙем дә, аптырап киттем. Ошо йәшенә тиклем ниндәй генә осраҡта ла, бер ҡасан да бындай кәйефтә күргәнем юҡ ине уны. Ҡапыл ғына күҙҙәремдән йәш ағыла башланы. Оҙаҡ уйлап та тормай: "Кейен, әйҙә, әйберҙәреңде йый", - тинем өләсәйемә. Ул минең ошо һүҙҙәремде генә көтөп торғандай, тиҙ генә әйберҙәрен йыя һалды. Самауырын, һауыт-һабаһын, кейем-һалымын тоҡсайға тултырып, ауылына алып ҡайтып киттем өләсәйемде. Өйҙәгеләр аптырап тороп ҡалдылар... Мин отпускыла саҡта булһа ла, исмаһам, үҙ өйөндә йәшәһен, тинем. Ауылға етер алдынан зыяратҡа туҡтап, өләсәйем әрүәхтәргә аят ҡылды (ул һәр ваҡыт шулай итер ине).

Ҡайтып төштөк. Әйтерһең дә, өләсәйемә ҡанат ҡуйғандар ҙа, "Йә, ос!" тигәндәр. Күрһәгеҙ икән, нисек ҡанатланып, осоп йөрөгәнен 83 йәшлек өләсәйемдең. Иң беренсе булып мейесенә ут тоҡандырып ебәрҙе лә, икмәк баҫа башланы. Шундай ҡәнәғәтлек менән, доғаларын уҡый-уҡый икмәк баҫа, ә ике күҙе тәҙрәлә. Ауылдың теге осонда йәшәгән йәшлек әхирәтен - Йомабикә инәйҙе күҙләй инде. "Э-эй, Йомабикә минең өйҙөң торбаһынан төтөн сыҡҡанын күрһә, аптырар инде", - тигән була. Шулай итеп, өләсәйемде айға яҡын үҙ нигеҙендә, үҙ йортонда рәхәтләндереп, ҡыуандырып, йәшәтеп алып ҡайттым. Һуңынан да йыл һайын йәйҙәрен уны шулай ауылына алып ҡайтып, бергә булырға тырыштыҡ. Һуңғы ҡайтҡанында күҙҙәре күрмәй ине инде. Ҡайтып төштө лә, ҡапҡаһын асып ингәс тә, ергә теҙләнеп, доғаларын уҡый-уҡый ултырып иланы... Һиҙгәндер инде бахырың, көҙгә мәрхүм булды.

Мин быларҙы ни өсөн яҙам? Оло кешеләрҙе үҙенең өйрәнгән урынынан ҡуҙғатырға ярамай! Йәштәр ошоно аңламай, хатта аңларға ла тырышмай. Үҙең йәшәгән төбәктең, йорттоң энергетикаһы тигән нәмә бар. Оло кешеләр, ошо энергиянан айырылһа, ауырый башлайҙар, ғүмер буйы йәшәгән ерҙәрен һағынып, һағышҡа баталар, төшөнкөлөккә биреләләр... Минең таныштар араһында бындай хәлдәр булды. Берәүҙәр әсәләрен ҡышҡылыҡҡа үҙҙәренә алып ҡайтты. Әсәй кеше ҡыш буйы кейәү-килен йортонда, ейән-ейәнсәрҙәр шау-шыуында түҙеп йәшәй, март айы етеү менән сумаҙандарына кейемдәрен тултырып, ҡайтам, тип сыҙатмай башланы. Ә йәштәр ҡарт әсәне ауылға алып ҡайтырға ваҡыт тапмай ҡаңғырҙы. Икенсе бер таныштарымда ауылдан күсереп килтерелгән әсәй кеше, һағышына түҙә алмайынса, үҙе юлға сығып китеп, аҙашты...

Шуның өсөн мин һәр ваҡыт кешеләргә: "Атай-әсәйҙәрегеҙҙе, өләсәй-олатайҙарығыҙҙы урынынан ҡуҙғатмағыҙ, ҡуҙғатһағыҙ ҙа, ваҡытлыса, ҡышҡылыҡҡа ғына алығыҙ, бөтөнләй күсермәгеҙ, зинһар, нигеҙҙәренән айырмағыҙ!" - тим. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, гәзит уҡыусылар?

**Мәрйәм ЗАКИРЙӘНОВА.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМ ГЕНӘ АЛЫРЛЫҠ

**Йәй буйына бергә-бергә төркөм булып Һаҡмарға барып, кис еткәс теҙелешеп, бергә генә ҡайтып йөрөгән аҡыллы ҡаҙҙарымдың береһенә әллә нимә булды ла ҡуйҙы бит! Башҡалары ҡайта, был юҡ. Эҙләп сыҡһаң, эре генә баҫып, күрше Фәрхәнә апайҙың ҡаҙҙары араһында йөрөй. Ҡайтыу уйында ла юҡ. Был хәл көн дә ҡабатлана башлағас, барып етте минең башҡа: ҡаҙым ғашиҡ булған бит! Күршенең ҡараҡай ғына ҡаҙына!**

Шунан күҙәтә башланым тегеләрҙе. Йөрөгән була инде минең ҡаҙ, муйынын дуғаландырып, күкрәген киреп, ҡәҙимге егетлеген күрһәтә белә! Теге ҡараҡай ҡаҙына башҡалар яҡынлай башлаһа, суҡышы менән этеп кенә ебәргән була. Әрһеҙләшкәндәрен муйынын оҙон итеп һуҙып, яман итеп ҡаңҡылдап әрләп, алыҫҡараҡ баҫтыра. Ә теге һөймәлекле ҡараҡайы ҡәнәғәт. Яҡлаулы икәнен белеп, тыныс ҡына йәшел үлән йолҡа. Һөйгәненең ҡыйыулығын хуплап, ҡанаттарын ҡағып, наҙлы ғына итеп ҡаңҡылдап ала. Фәрхәнә апай, сығып, ҡаҙҙарын саҡыра башлаһа, теләр-теләмәҫ кенә айырылышырға мәжбүр ғашиҡтар. Мин дә тегене һуҡрана-һуҡрана ҡыуып алып ҡайтам: "Үҙебеҙҙең ҡаҙҙар араһынан тапһаң булмаймы бер һылыуҙы, улай бик дәртле булғасың? Кеше йонсотоп..."

Шулай йөрөй торғас, ҡаҙҙарҙы бикләп ҡуйып һимертер ваҡыт етте. Өй хужабыҙ: "Етте һеҙгә, башҡаса йөрөмәйһегеҙ, көнө буйына ем ашап өйҙә тораһығыҙ!" - тип бикләп ҡуйҙы ла, үҙе вахта менән эшкә сығып та китте. Ем, һыу биреп ашатыу минең елкәгә ҡалды. Башҡалары ашай ҙа ул, теге ҡаҙым бер ҡабым да ем ҡапмай. Башын ғорур күтәреп, муйынын һуҙып, ҡапҡа аша күршеләр яғына ҡарап тик тора. Теге яҡта ҡаҙҙар шаулашҡанын ишетһә, әсе итеп, йөрәк өҙгөс тауыш менән ҡаңҡылдап ебәрә. Теге ҡараҡайы ла йәлләнес итеп тауыш бирә. "Ни булды һиңә, ҡайҙа юғалдың?" - тип ишетелә ул минең ҡолағыма. Шулай бер нисә көн көрәш алып барҙыҡ. Ҡаҙым минең ныҡлығым менән көрәшә, мин - үҙемдең хис-тойғоларым менән. Ем бирергә барған һайын ата ҡаҙым күҙҙәремә мөлдөрәп ҡарай: "Нимә, мөхәббәт уттарында янманыңмы ла, һағыныу хистәрен кисермәнеңме?" Өйгә табан атлаһам, "Ҡыйғаҡ!" ти, ә миңә "Зинһаррр!" тип ишетелә. Өй хужаһының: "Ҡаҙҙарҙы сығарма!" - тигән һүҙен ҡолаҡ артынараҡ шылдырып, йүгереп барып ҡапҡаны асып ебәрҙем. Ҡаңғылдашып осоп сығып китте ҡаҙҙарым, ҡаурыйҙары ғына туҙырашып ятып ҡалды. Арттарынан мин дә Һаҡмарға табан йүгерҙем, теге икәүҙең нисек итеп осрашҡанын күреү теләгем көслө. Төркөм-төркөм булып, йылғаның өҫтөн тотош ябып йөрөгән йөҙләгән, юҡ, меңләгән ҡаҙҙар араһына минекеләр ҙә барып ҡушылды. Һалҡын һыу эсеп, янған йөрәктәренә ял алдылар ҙа, йөндәрен ҡабартып, йөҙөп киттеләр. Меңәрләгән тауыш араһынан бер-береһенең тауышын танып, теге ике ғашиҡ йән, ағымды йырып, бер-береһенә яҡынлай башланылар. Юҡ, ҡосаҡлашманылар ҙа, үбешмәнеләр ҙә, оҙон муйындары менән бер-береһенә һарылышманылар ҙа... Баштарын һелкә-һелкә үҙ телдәрендә тыйнаҡ ҡына итеп нисек итеп бер-береһен һағынышҡандарын аңлаттылар ҙа, бергәлектәренә ҡәнәғәт булып, йөҙөп киттеләр...

Эй, гонаһһыҙ йәндәр! Ҡыҫҡа ғына ғүмерегеҙ эсендә лә кешеләргә күпме фәһем биреп йәшәйһегеҙ һеҙ. Ғашиҡтар! Шул ҡаҙҙарҙан үрнәк алығыҙ: бергә булыу өсөн көрәшегеҙ, күңел ҡапҡаларын асығыҙ, бергә булған мәлдәрҙең ҡәҙерен белегеҙ. Кейек ҡаҙҙарҙың ғына түгел, йорт ҡаҙҙарының да яҙмышы йырҙарҙа йырланырлыҡ шул...

**Миләүшә ҠЫҘРАСОВА.**

✓ *Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла башҡа халыҡтарҙың ер-һыуына баҫып инеп ҡан ҡоймаған. Бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙын илатмаған. Ул, киреһенсә, үҙе ете быуат ярым буйына баҫҡынсыларҙың йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# КАТАЛОН АТЛАСЫНДА...

## Мәскәү юҡ, ә Башҡорт ҡалаһы бар

**Баш ҡалабыҙҙа Нияз Мәжитов иҫтәлегенә бағышлап үткәрелгән Халыҡ-ара фәнни симпозиумға "Боронғо Өфө" республика тарихи ҡурсаулығы музейы саҡырыуы буйынса Санкт-Петербург ҡалаһынан тарихсы-картограф Александр Григорьевич Юрченко ла килгәйне. Александр Григорьевич тикшеренеүсе, сәйәхәтсе, урта быуаттар яҙыуҙарын уҡый белеүсе генә түгел, боронғо карталар белгесе лә. Беҙҙең сараға ул 1375 йылда төҙөлгән Каталон картаһын алып килгәйне. Картала "Башҡорт" тип билдәләнгән ҡала ла бар. Тарихсы ауыҙынан ишеткән мәғлүмәттәрҙе гәзит уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итәбеҙ.**





**➔ Александр Григорьевич, Каталон картаһы ниндәй тарихи ҡиммәткә эйә? Сауҙагәрҙәр, илселәр йәки илдәрҙе өйрәнеүсе карталарҙан ул нимәһе менән айырыла? Кем өсөн һәм ниндәй маҡсат менән төшөрөлгән был атлас?**

- Беренсе ҡарашҡа, Каталон картаһы - донъя картаһы. Техник яҡтан тикшергәндә, ул һарыҡ тиреһенән яһалған пергаменттарҙан йыйылған алты бүлектән тора. Атластың төп нөсхәһе Францияның Милли китапханаһында һаҡлана. Уны төҙөгән картографтың исеме лә билдәле - король Педро Арагонскийҙың карталар һәм компастар төҙөүсе оҫтаһы Крескес Авраам.

Атластың беренсе панеле космологик һәм космографик характерҙағы текстарҙа, икенсеһе астрономик һәм астрологик бирелештәрҙә һүрәтләнә. Өсөнсө һәм дүртенсе панелдәр порттар тураһында мәғлүмәт бирә. Әгәр ул ошолай ғына тамамланған булһа, был ғәҙәти диңгеҙ капитандары картаһы ғына булып ҡалыр ине. Тик бында артабанғы бүлектәр ҙә бар. Бишенсе һәм алтынсы панель Монгол империяһы, Һиндостан менән төрлө тәмләткестәр етештергән утрауҙарҙы һүрәтләй. Шулай итеп, картаның заказсылары авторҙан Урта Азияны, Һиндостанды һәм Ҡытайҙы ла индереп, донъя картаһы яһата. Тағы ла ике панелдә донъяның барлыҡҡа килеүе, ете планета һәм йондоҙлоҡтар менән берлектә ер, йәшәйеш яралыуы хаҡындағы текстар бар. Бында донъя картаһының космографияға әйләнеүе күҙәтелә.

Атласты эшләгән картограф һәм заказсы менән Алланың, Ерҙең һәм Йыһандың серҙәрен төшөнөргә теләү маҡсаты идара иткәндәй. Сөнки был карта донъя кимәлендәге ниндәйҙер мөһим проблеманы хәл итеүгә ҡоролған космографик трактат булып тора. Трактаттың теле лә ғәҙәти булмағанса: картографик майҙандар төрлө һындар, символдар, миниатюралар менән тулы. Уларҙы пиктограммалар итеп ҡарарға кәрәк. Һындар бер системала теҙелеп, географик ысынбарлыҡҡа нигеҙләнгән. Билдәләр нисек кенә мөһим булһа ла, уның карталағы ултырған урыны мөһимерәк роль уйнай булып сыға. Символдар һүҙлеген белгәндә, Каталон атласын текст кеүек итеп уҡырға ла була. Әммә был һүҙлек юҡ һәм шунлыҡтан карта ла бөгөнгө көнгә тиклем асылмаған. 1889 йылда крайҙы өйрәнеүсе Ф.Чекалин бишенсе панелдәге Алтын Урҙа территорияһын фаразлап уҡып, яҙып сыҡҡайны, шуның менән бөгөн дә файҙаланалар. Тик былар ғына бик аҙ.

Билдәләп китергә кәрәк, Каталон атласы ун дүртенсе быуаттағы Монгол империяһының Һары йылғаһынан алып Дунайға тиклем булған ерҙәре төшөрөлгән берҙән-бер Европа картаһы. Бында империяның ҡалалары һәм идарасылары менән бергә дүрт олоҫо, Урыҫ ерҙәре, Волга буйы, Ҡырым, Кавказ һәм Себерҙе үҙ эсенә алған Алтын Урҙа территорияһы ла ингән. Атластың авторы Крескес Авраамдың был ҡалаларҙың, ханлыҡтарҙың, кенәзлектәрҙең гербтары, махсус тамғалары тураһында ла хәбәрҙар булыуы хайран ҡалдыра.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

**Башҡорт халҡының тарихында оялырлыҡ, хурланырлыҡ бер генә нәмә лә юҡ. Беҙҙең аһ-зар, ҡан-йәш менән һуғарылған тарих юлы көмөш кеүек саф. Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла башҡа халыҡтарҙың ер-һыуына баҫып инеп ҡан ҡоймаған. Бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙын илатмаған. Ул, киреһенсә, үҙе ете быуат ярым буйына баҫҡынсыларҙың йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән, йән аямай ғәҙеллек өсөн, азатлыҡ өсөн көрәшкән.**

Башҡорт автономияһы өсөн көрәш юлы - ул шул уҡ аҫаба ерҙәрҙе һаҡлап ҡалыу, милләтте, телде йәшәтеү, киләһе быуындарға милли үҙаңды ҡалдырыу өсөн көрәш юлы ла. Был яуҙа ҡатнашҡан һәм башын һалған зыялыларыбыҙ, тарихта мәңгелек исемдәре ҡалған шәхестәребеҙ, улар башҡарған эш һәм кисергән яҙмыштар беҙҙән был хәл-ваҡиғаларҙы онотмауҙы талап итә.

1917 йылдың февралендә, Беренсе донъя һуғышы барғанда, Рәсәйҙә буржуаз-демократик революция булған. 2 мартта Ваҡытлы хөкүмәт ойошторолған, унда күпселек урынды конституцион-демократик партия ағзалары (кадеттар) алған. Император Николай II тәхеттән баш тартҡан. В. И. Ленин (Ульянов) етәкселегендәге Рәсәй социаль-демократик эшсе партияһы (большевиктар) йәшерен хәлдән сығып, революцияны артабан үҫтереү, уны социалистик революцияға әйләндереп, власты ҡулға алыу өсөн көслө көрәш башлаған.

Февраль революцияһын һәм ҡаты колониаль иҙеүҙе кәүҙәләндергән батшаның төшөрөлөүен башҡорттар шатланып ҡаршы алған. Ваҡытлы хөкүмәттең ирек һәм халыҡтар тиңлеге хаҡындағы белдереүе башҡортта яҡты азатлыҡ өмөтө уятҡан. Башҡорт халҡы күңелләнеп, киҫкен милли мәсьәләләрҙе хәл итеү эшенә ең һыҙғанып тотонған. Башҡорттоң бөтә күңелен биләгән төп мәсьәлә ер мәсьәләһе булған. 1917 йыл яҙ Өфөлә йыйылған губерна крәҫтиән съезында башҡорттар ер мәсьәләһе буйынса асыҡ талап ҡуйған: "Беҙ, башҡорттар, ерҙе, съезд ҡарар иткәнсә, социалләштереү менән дә, демократтар ҡуйғанса, дәүләтләштереү менән дә риза түгел. Беҙҙең ер үҙебеҙҙә ҡалдырылыу ғына түгел, алдыҡ һәм көслөк менән беҙҙән тартып алынған бөтә ер кире ҡайтарылырға тейеш".

Ләкин яңы власть органдарында башҡорттар ҡуйған талапты аңларға ла, яҡларға ла теләмәгәндәр. Был органдар, элеккеләре кеүек үк, Башҡортостанда рус алпауыттары һәм күскенселәренең мәнфәғәтен яҡлаған, ул ғына етмәгән, яңы күскенселек тулҡыны һәм яңы баҫҡынсылыҡ өсөн уңайлы шарттар булдырған.

Шул ваҡытта милли мәсьәлә буйынса программалары менән большевиктар сыҡҡан. Үҙҙәренең 24 - 29 апрелдә үткәргән VII Бөтә Рәсәй (Апрель) конференцияһында улар резолюция ҡабул иткән. Был резолюцияла: "Рәсәй эсенә ингән милләттәрҙең барыһына ла ирекле рәүештә айырылып, үҙ аллы дәүләт ҡороу хоҡуғы бирелергә тейеш. Шул хоҡуҡты кире ҡағыу һәм ғәмәлдә үтәлешен тәьмин итерлек сара күрмәү баҫҡынсылыҡ һәм аннексия политикаһын яҡлауға тиң", - тип әйтелгән. Большевиктарҙың резолюцияһы Ваҡытлы хөкүмәт белдереүҙәренән ҡырҡа айырылып торған һәм башҡорттарҙың теләгенә тулыһынса яуап биргән. Шунан тыш, ул резолюция большевиктарҙың милли политикала II съездарынан (1903 йылдан) бирле үҙгәрмәгәнен күрһәткәндәй булған һәм ихласлығына ышандырған. Шуның өсөн башҡорттар большевиктарҙың власть өсөн көрәшеүен хуп күргән һәм еңеүен теләгән. Большевиктарҙың Апрель конференцияһында ҡабул иткән резолюцияһына таянып, башҡорттар милли-территориаль үҙбилдәләнешкә ныҡлы йүнәлеш алған.

**(Дауамы бар).**

✓ *Сәнғәт донъяһының ниндәй булыуына килгәндә, тамашасы күҙе алдындағы матур һәм сағыу өлөшөнән тыш, уның сәхнә артындағы болғансыҡ һәм ҡара яғы ла бар. Билдәлелеккә һәм данға һәр кем үҙ юлы менән килә.*




**Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, ябай итеп әйткәндә, ярты быуат буйына башҡорт тамашасыһының күңелен ҡанатландырған шәхес Суфия Шәрәфулла ҡыҙы ҠОРБАНҒӘЛИЕВА менән яҡындан аралашыу бәхете тейҙе. Актриса сәй өҫтәле артында ҡырҡ сырағының береһе янып, береһе һүнеп, унан ҡайһыһылыр ҡабаттан тоҡанып, барыр юлын яҡтыртыуы хаҡында бәйән итеп, һүҙ артынан һүҙ ялғанып, иҫтәлектәр артынан иҫтәлектәр уянып, аралашып, сер бүлешеп, күңелен бушатып алды. Уны сәхнә аша ғына белгәндәргә был әңгәмә ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайым.**

**Суфия апай, һеҙ өлкән быуын артисы. Бөгөн, ярай, артист һөнәрен һайларға теләгән балаларға артыҡ ҡаршылыҡ юҡ. Ә һеҙҙе һуң, төпкөл башҡорт ауылында тыуып үҫкән ҡыҙ баланы, нисек итеп артист һөнәренә барыуҙан тыйманылар? Беҙҙең халыҡта бит элек-электән "Тик артист булам тимә!" тип киҫәтә инеләр...**

- Мине лә тыйҙылар! Тыймаймы һуң! Һигеҙенсе синыфта уҡығанда мәктәптә "Артист булғым килә" тиһәм, уҡытыусыбыҙ "Сиған тормошо нимәгә кәрәк ул, ҡыҙҙарға бөтөнләй ярамаған йәшәү рәүеше ул", тип, әллә күпме дәлилдәр килтерә ине. Ә мин бәләкәй генәнән "театр" уйнап тик йөрөйөм. Ололар эшкә сығып китеү менән әсәйҙең кейемдәрен кейеп, тәҙрә ҡорғандарын ысҡындырып алып, селтәрен ябынып, өйҙәге көс еткән бар нәмәне шылдырып, ниҙәр генә ҡыланмай инем. Берҙән-бер артлы ултырғыс бар ине, шуны оҙон имән өҫтәл өҫтөнә мендереп, ҡулыма тәртешкә тотоп ултырам. Уйын булырын белгән тиҫтерҙәрем "һә" тигәнсе йыйыла һала ла, һәр беребеҙ бер роль алып, уйнай башлайбыҙ. Мин өҫтәл башынан уларға нисек ҡыланырға, нимә эшләргә икәнде өйрәтеп, күрһәтмәләр биреп ултырам. Был уйын ялҡытып китһә, тиҙ генә кейемдәребеҙҙе алыштырабыҙ ҙа, уҡытыусы булып уйнарға керешәбеҙ. Бында ла мин "уҡытам". Ҡыш көндәре булһа, баҡса артындағы ғына күлдә боҙҙа шыуа инек. Быймаларыбыҙға конькиҙар бәйләтеп алабыҙ ҙа, фигуралы шыуыу ойошторабыҙ. Әлеге мин бейеү "һалам", ҡысҡырып көйләп торам һәм үҙем үк баһалайым. Бына шундай һәр ваҡыт лидерлыҡҡа ынтылған һәм ниндәйҙер ижади мөхит эсендә йәшәгән бала булдым.

Һигеҙенсене тамамлағанда әле мин ололарҙың "артист булма"һына ҡаршы торорлоҡ түгел инем. Бер төркөм ҡыҙҙар менән Салауат педагогия училищеһына илтеп тапшырҙым документтарымды. Әхирәттәрем уҡырға инә алманы, яңғыҙым үтеп киттем. Бар класташтарым гөрләшеп Ишембай ҡалаһына уҡырға китә, ә мин бер яңғыҙым моңайып ҡына Салауат яғына сығып китәм. Был хәлем менән килешмәй, бер саҡ илай башланым. Ялға ҡайтам да илайым, ҡайтам да илайым. Әсәйем түҙмәне: "Шәриф, ҡыҙыңды үлтерәһең бит һарғайтып. Бар инде, миҙалдарыңды таҡ та, Ишембайға барып һөйләш... " - тине атайыма. Атайым шкаф башында теҙелешеп ятҡан өс эшләпәһенең тантаналар өсөн генә кейелә торғанын кейеп, миҙалдарын ялтыратып тағып, Ишембай мәктәп-интернатының директорына барып, һөйләшеп, килешеп ҡайтты. Беҙ өйҙә уны дүрт күҙ менән көтөп ултырабыҙ. Атайым ҡайтып инде лә, ҡыҫҡа ғына итеп: "Булды",- тине. Шундай кеше ине инде ул беҙҙең атай, ғөмүмән, ул быуын ирҙәре барыһы ла шундайҙар ине, ахыры. Улар бер ваҡытта ла ниндәйҙер мәсьәләне хәл итеүгә, килешеү-маҙарға, һораныуға, йүнләүгә ҡатындарын йөрөтмәне. Белемлеһе лә, белемһеҙе лә үҙҙәре белгәнсә хәл итте проблеманы. Ә ҡатындары уларҙың хәл иткәнен көтөп кенә ултыра белде...

Урта мәктәпте бөтөүемә училищела театр факультеты ябылып ҡуйғайны. Бер йыл эшләп алыуға Өфө сәнғәт институтында театр факультеты асылды. Ике туған апайым Сажидә Ҡорбанғәлиева Ишембай халыҡ театры артисы ине, ул режиссер әхирәте менән бергәләп, мине имтихандарға әҙерләгәйне. Шул әҙерлек менән, атайымдың һалдат сумаҙанын тотоп, юлландым сәнғәт донъяһына. Атайымдың эсе бошто, нишләптер. Бойоғоп ҡына сығып оҙатып ҡалғайны. Мин имтихандар биреп, уҡырға инеп урап ҡайтҡансы вафат булып ҡуйҙы... Йә инде, шул ваҡиғаларға ла илле йылдан ашыу ваҡыт үткән...

**Атайығыҙҙың ғаиләлә абруй булыуын аңғарҙыҡ инде. Ғөмүмән, ниндәй ине атай-әсәйегеҙ?**

- Атайым бөйөк һөйләүсе ине. Ул беҙҙе, бәләкәс кенәләрҙе, теҙеп ултырта ла, төрлө тарих һөйләй ине. Ашыҡмай, һорауҙарыбыҙға тулы яуап бирә-бирә, аңлайышһыҙ атамаларҙы аңлата-аңлата, сәғәттәр буйына ауыҙына ҡаратып ҡуя ине. Һөйләүҙән туҡтай ҙа: "Балалар, ә хәҙер йүгерешеп кенә шуларҙы-шуларҙы эшләп алабыҙ..."- ти. Беҙ сабышып эшкә тотонабыҙ, ә күрше-тирә балалары үҙҙәренә йүгерә. Кем утын ташый, кем һыу алып килә, кем башҡа йомоштарҙы үтәй ҙә, тағы атай янына йыйылабыҙ. Уның һөйләгәндәре буйынса мин һуғыштың бер китапта ла яҙылмаған, бер кинола ла күрһәтелмәгән ҡыҙыҡлы һәм ҡыҙғаныс яҡтарын беләм. Бына шундай әңгәмәсе, тарихсы ине атайым. "Совет Башҡортостаны", "Ленинсы" гәзиттәренә, журналдарға мәҡәләләр яҙҙы, хикәйәләр ижад итте. Мине лә ҡағыҙ биреп ултырта ла, "Яҙ, ҡыҙым, уй-фекерҙәреңде ҡағыҙға төшөрөп өйрән", ти торғайны. Ләкин минең ундай һәләтем булманы инде.

Атайыбыҙ 1934 йылда Өфөләге комвузды тамамлаған, унан һуғышҡа тиклем Белорет ҡалаһында райкомдың беренсе секретаре булған. Заманына күрә ҙур вазифа биләгән. Мин ул ваҡытта тыумағанмын әле. Һуғыш башланғас, ғаиләһен сит ерҙә ҡалдырырға теләмәй, тыуған яғына алып ҡайтып урынлаштырып китә. Белоретта ҡалһалар, бәлки, һуғыш йылдарында артыҡ асыҡмаҫтар ҙа ине, атайҙың эш урынынан да хәстәрләрҙәр ине. Ә Ишембайҙа аслыҡ ныҡ булған, бер ерҙән ризыҡ килмәгән, саҡ-саҡ ҡына йәндәрен һаҡлап ҡалғандар. Инде тороп йөрөр хәлдәре ҡалмағас, әсәйем балаларын төрөп-төрөп урындыҡҡа теҙеп һалып сыҡҡан да, үҙе лә улар эргәһенә ауған. Әнүәр ағайым, урындыҡтан тәгәрәп төштөм дә, менеп ятырға хәлем юҡ, әсәй ҙә ярҙам итә алмай, тип хәтерләй торғайны. Беҙҙең әсәй Ҡарлар ауылынан ине, уның ун ағаһы булған. Бәхеткә күрә, шул ағайҙарының береһе хәл белергә тип килеп төшкән һәм һеңлеһен балалары менән ошондай хәлдә килеп тапҡан. Ул йәһәтләп өйҙө йылытып, балаларҙың эстәренә йылы төшөрөп, атайҙың яҡшы-яҡшы кейемдәрен баҙарға алып барып ризыҡҡа алмаштырып алып ҡайтҡан. Атайым гел генә шул ағайыма: "Ҡайнаға, ҙур рәхмәт, һин бит минең балаларымды үлемдән ҡотҡарғанһың",- тип әйтә торғайны.

Атайым политрук булған һуғышта, һәр ваҡыт атакаға күтәргән, алдан үҙе йүгергән. Һаташҡанында ла "За Родину! За Сталина! Вперед!" тип ҡысҡырып ята торғайны. Тәне шау ғына яраларҙан сыбарланғайны.

Йомшаҡ холоҡло булды ул беҙгә, мәрхәмәтле ине. Бер тауыш күтәрмәне, әрләмәне. Әсәйебеҙгә ҡарата ла сабыр һәм ғәҙел ине. Әйтер һүҙен өҙөп кенә әйтә, тауыш-янъял сығармай торғайны. Әсәйебеҙ иһә ҡаты холоҡлораҡ булды. Һәр ваҡыт эш өҫтөндә, һәр саҡ ашығып, нимәлер хәстәрләп йөрөй. Ғүмере буйы колхозға икмәк бешерҙе. Беҙ, һигеҙ бала, атайҙың 68, әсәйҙең 12 һум пенсияһына уҡып, кеше булып бөттөк шулайтып...

**Уҡыуҙы тамамлап, тормошҡа аяҡ баҫҡан йылдарығыҙҙы, тәүге хеҙмәт коллективына яраҡлашҡан ваҡыттарығыҙҙы, ғаилә ҡороу тарихын, дуҫтар-дошмандар мөнәсәбәттәрен асыҡтан-асыҡ һөйләй алаһығыҙмы бөгөн?**

- Алам, минең яҙмыш бик сағыу һәм һәр ваҡыт күҙ алдында булһа ла, оялырлыҡ та, йәшерерлек тә ектәре юҡ. Һәр хәлдә, намыҫым таҙа, тип иҫәпләйем.

Өфө сәнғәт институтын тамамлағас, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә килдем. Һөнәр алмайынса, кейәүгә сыҡмаҫҡа, тигән талап ҡуйған инем үҙемә, шул вәғәҙәмде тотоп, берәүгә лә әүерәмәй генә хеҙмәт юлын башланым. Әхирәтем Миңзиә Ханнанова Фәйзи Ғәскәровтың бейеү ансамблендә бейей, уның концерттарына йөрөйөм. Бар бейеүселәрҙе лә танып беләм. Бигерәк тә Марс Сафиуллиндың эшләгән трюктарына хайран ҡалам. Уның бармаҡ остарында ғына "сиған тормошо" булды инде. Ирем бер яҡта, мин икенсе яҡта "уйнап" тик йөрөйбөҙ. Балалар сәхнә артында мәж килеп шаярыша, уйнай, шунан арып йоҡлап китәләр. Ете йәшлек оло улым, ғәҙәттә, бәләкәс ҡустыһына күҙ-баш булып ултыра. Башта малайҙарымды әле был, әле икенсе туғыныма ташлап китә инем гастролдәргә, бер саҡ апайым: "Суфия, һин балларыңды ҡуша алып йөрө, ҡалайтһалар ҙа, көн дә күҙ алдында булырҙар. Юғиһә, улар һағыналар бит",- тигән аҡылды әйтте. Шунан алып ҡайҙа юлланһаҡ та уларҙы ла бергә алып китә инем, ни күрһәк тә, бергә күрҙек. Икебеҙ ҙә сәнғәт кешеләре булғас, ирем менән бер-беребеҙҙе аңлай инек. Икебеҙ ҙә эшебеҙгә мөкиббән киткән ке-

# МИНЕҢ

## оялырлыҡ та,

йөрөп, грузин бейеүен башҡарыуына барыбыҙҙың да һушыбыҙ китә. Ансамблдең солисы, комсоргы, репетиторы, инспекторы, ҡыҫҡаһы, аҫыл егет инде. Һәм мин, әлбиттә, күп ҡыҙ-ҡырҡын кеүек үк, уға ғашиҡмын.

Бейеү ансамбле сит илдәрҙән ҡайтып инмәй, барыһы ла матур кейенәләр, сибәрҙәр, һомғолдар. Уларға яҡын барыуы ла мөмкин булмаған хәл һымаҡ ине ул саҡта. Марс театрҙа йәки урамда осрағанында, күкрәгенә ҡулын ҡуйып, еңелсә генә баш эйеп үтә ине миңә. Тик бер ваҡытта ла һөйләшмәй. Бер ваҡыт әлеге әхирәтем Миңзиә йәй айында үҙҙәренең төркөмө менән гастролдә йөрөп килергә саҡырҙы. Был төркөмдә Марс та булып сыҡты һәм... Баҡтиһәң, ул да мине оҡшатып йөрөгән, тик өндәшергә батырсылыҡ итмәгән икән. Ошо аңлашыуҙан һуң ул миңә тотто ла тәҡдим яһаны. Мин иһә уйлап тороу, икеләнеү тигәнде башыма ла индермәгәнмен. Ул да шулай. Әйтерһең, бер бөтөн икәнебеҙҙе белеп, тойоп йөрөгәнбеҙ. Ризалығымды алғас, ул шунда уҡ мине әсәһенә таныштырырға алып ҡайтып китте. Бишбүләк районында йәшәгән оҙон буйлы, зәпзәңгәр күҙле матур инәй алдына барып баҫыуым һаман хәтеремдә. Инәй ҙә һүҙҙе ҡыҫҡа тотто. Шкафынан тауар төргәге алып, "Бына, был күлдәклекте буласаҡ киленемә тип алып ҡуйғайным", тип, ҡулыма тотторҙо ла, мулла алып килеп, никах уҡытты ла ҡуйҙы. Шулайтып, мин гастролдән ир ҡатыны булып ҡайтып төштөм. Туйымда ултырырға атайым да, әсәйем дә юҡ инеләр инде.

Нисек булдымы беҙҙең тормош? Гастролдәр тормошо, бала сағымда ололар әйткән шеләрбеҙ. Башта миндә ниндәйҙер көнләшеү тойғолары булды. Тик бер ваҡытта ла уға һиҙҙермәнем. Эстән яндым-яндым да, үҙемдең мәшәҡәттәрем менән онотолорға, башҡа нәмәләргә әүрәргә тырыштым. Шулай йәшәнек.

Сәнғәт донъяһының ниндәй булыуына килгәндә, тамашасы күҙе алдындағы матур һәм сағыу өлөшөнән тыш, уның сәхнә артындағы болғансыҡ һәм ҡара яғы ла бар. Билдәлелеккә һәм данға һәр кем үҙ юлы менән килә. Кемдәрҙер ҡара тирен түгеп, кемдәрҙер һылыулығын файҙаланып, кемдәрҙер туған-тыумасалыҡ ярҙамы менән. Бер һәләт кенә күтәрмәй ул кешене. Һәләт янында башҡа сифаттарҙың да булыуы шарт. Шул юҫыҡта көнсөллөк тә, аҫтыртын аяҡ салыуҙар ҙа, ошаҡлашыуҙар ҙа, ялыу яҙыуҙар ҙа ҡалҡып сыға ине. Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов заманында әле һәләт һәм хеҙмәт юғары баһаланды. "Бөгөндән Мәскәү театрына барып уйнай алырҙай биш кешем бар", тип теҙгәндә минең дә исемде телгә ала ине. Тартынмай ғына уның шундай баһаһын әйтә алам бөгөн. Әле бына уйлап ултырам: коллективты тәртиптә тота алған, артистарҙы ролдәргә дөрөҫ урынлаштыра белгән етәксе булған ул. Был осор театрҙың да алтын осоро булған. Һағынамын шул йылдарҙы.

**Театр осоро һәм репертуар тураһында һүҙ сыҡҡас, бөгөнгө репертуар тураһында ла һөйләшәйек әле. Әлеге мәлдә беҙҙең театрҙарҙы комедия жанры баҫып алған, шулай бит? Нилектән ошолай ул? Тамашасының тормошҡа ҡарашын еңеләйтеү маҡсатынанмы, әллә башҡа сәбәптәнме?**

**✓ *Бөгөн тәнҡит тә юҡ йәштәр араһында. Башҡарғанды анализлау юғалып бара. Актер тәнҡитте ҡабул итмәй, үсегә икән, ул инде актер түгел. Ул үсмәйәсәк. Заманында тәнҡит йә кәңәште ололарҙан үҙем һорап ала торғайным.***

# ТОРМОШОМДОҢ...

## йәшерерлек тә ектәре юҡ

- Бөгөнгө комедиялар менән илленсе-алтмышынсы йылдарҙағы комедияларҙы сағыштырып ҡарағанда, айырма ҙур. Хәҙерге комедиялар күп осраҡта билдән түбән шаярыуҙарға ҡоролған. Йә булмаһа, ҡолап, йә тертләп, йә ҡолата һуғып, йә артына тибеп көлдөрөп маташа, йә ирҙәрҙе ҡатын-ҡыҙ итеп кейендерә бөгөнгө комедиялар. Ә нигеҙендә фәлсәфә юҡ. Фәлсәфәһеҙ, тәрбиәүи мәғәнәһе булмаған комедия ул сәнғәт түгел, ә ябай анекдот ҡына. Комедия - көлдөрөү генә түгел, ул илата ла алһын. Тамашасы бит алйот түгел. Яраҡһыҙ, мәғәнәһеҙ комедиялар менән тамашасының ваҡытын, аҡсаһын урлауҙы енәйәт итеп күрәм мин. Элек батшаларҙың мәжлесен биҙәп йөрөүсе шуттары булған. Улар шулай тибешеп, ҡолата һуғышып, кәмит ҡорған. Беҙҙекеләр ҙә шул шуттар кәмитен башҡорт сәхнәһенә күсереп алды.

Амплуа тигән әйбер бар, ул бөгөн ҡабул ителмәй, әммә йәшерен генә йәшәп килә. Комедияны яҡшы уйнаған артистар бар, был мәрәкәселек уларҙың фиғеленә һеңеп китә. Мин, мәҫәлән, йәш саҡта һәр ваҡыт етди ролдәрҙе, хата трагик ролдәрҙе уйнаным. Үҙемде шундай характерҙағы актриса тип уйлай инем. Һәм бер ваҡыт миңә "Гармунсы дуҫ"та көлкөлө роль бирәләр. Эй, мин көйәм хәҙер. Минән ниндәй көлкө сыҡһын, тип уйлайым. Образымдан көлгәндәрен дә үҙ итә алмайым. Әммә режиссер ныҡышып эшләтте һәм, ышанаһығыҙмы, булмышымды һындырып, үҙгәртеп ҡороп ҡуйҙы - башҡарҙым. Спектаклдә сығарғас, оло актерҙар ҙа, режиссер ҙа маҡтаны.

Ә шулай ҙа мин тамашасы театрҙа комедия ҡарап ҡына ял итә ала, тигән фекерҙә түгелмен. Илап та, инрәп тә, һағышланып та, тетрәнеп тә ял итеп була театрҙа. Хистәр солғанышы ни тиклем күберәк, кеше организмы ла шул тиклем ҙурыраҡ яңырыу кисерә...

**Үҙегеҙгә оҡшаған даими сәхнә партнерығыҙ булдымы?**

- Минең даими уйнаған партнерым Рәфил Нәбиуллин донъянан иртә китте. Илле йәшен үткәрҙе лә, баҡыйлыҡҡа күсеп тә ҡуйҙы. Ул киткәс, мин театрҙа бөтөнләй партнерһыҙ тороп ҡалдым. Ул минең хеҙмәттәшем генә түгел, яҡын дуҫым да, серҙәшем дә ине. Ир менән ҡатын араһында дуҫлыҡ булмай тиһәләр ҙә, беҙ йәштән ағайлы-һеңлеле кеүек яҡын булдыҡ һәм был матур дуҫлыҡты ғүмеребеҙ буйы таҙа килеш һаҡланыҡ. Бер-беребеҙҙе яҡшы тойҙоҡ, аңланыҡ. Ул йыш ҡына ғаиләһендәге проблемаларын да миңә һөйләп, икәүләшеп кәңәшләшеп, хәл итеү юлдарын эҙләйбеҙ. Рәфил бөйөк импровизатор ине. Ул бер ролен көн дә уйнағанда ла бер үк итеп уйнаманы. Һәр ваҡыт ниндәйҙер яңылыҡ, үҙенсә үҙгәреш индерҙе. Был холҡон белгән мин дә юғалып ҡалмайым, ҡушылып уйнауға ҡулайлашам. Шундай шәп, эшлекле, һәләтле һәм яҡты күңелле булды дуҫым, коллегам.

**Артистарға образға инеп уйнау мотлаҡ, белеүемсә. Образынан сыға алмай, уйнаған ролдәренән алынған репликалар менән генә һөйләшеп йөрөгән артистар ҙа етерлек. Улар хаҡында нимә әйтә алаһығыҙ?**

- Эйе, бигерәк тә тамашасы яҡын ҡабул иткән артистар үҙ булмыштарын, асылдарын онотоп китеп, публика өсөн йәшәй башлаусандар. Тағы ла артистарҙа (был фиғел барыһында ла бар) көнсөллөк тигән тойғо ныҡ үсешкән. Үҙенән һәләтлерәк, шәберәк, йәшерәк коллегаһы барлыҡҡа килә икән, китә хәсәтләк. Быны ошо тойғоно енә белеү, үҙендә лә, башҡаларҙы ла ағыуламай ғына йәшәй, эшләй белергә өйрәнеү мотлаҡ.

Йәшерәк ваҡытта мин сәхнәлә уйнаған ролдәремдән арына алмай, образдан сыға алмай ҡаңғыра инем. Хәтеремдә, бер спектаклдә мин үҙем кеүек бер ҡатынды уйнай инем. Эштән бушамай, эш тип сабып, ирен дә юғалтҡан, балаларынан да алыҫайған бер бахыр ҡатынҡайҙың образына инеп, шундай убылып, арып сыҡтым. Сыҡтым да, гримды ла юймайынса, такси алып елдерҙем. Өйҙә улым температурала ятып ҡалғайнымы, әллә бер үҙҙәре инеме - һәр хәлдә, ашыға инем. Шунда таксист миңә: "Һеҙгә ҡыйынмы, әллә ауырыйһығыҙмы?" - тип һораны. "Нишләп, - тием, - юҡ, мин әле генә спектаклдә уйнап сыҡтым". Бик аҡыллы кеше булды, ахыры, таксист: "Һеҙгә ваҡытында образдан сыға белергә йәки йәшәү рәүешегеҙҙе алмаштырырға кәрәк", тигәйне. Шул хәлдән һуң мин үҙ өстөмдә эшләй башланым. Сәхнәләге образымдан сығып, уның хакимлығынан ҡотолоп, артабан китә белергә өйрәндем. Тормошта, эйе, образына артыҡ инеп, уның холҡон, һөйләшен үҙләштереп, ысынбарлыҡтан айырылып, хатта психикаларына зыян килгән артистар ҙа юҡ түгел...

**Совет осоро актерҙары менән беҙҙең заман актерҙары араһында ниндәй айырма бар?**

- Бөгөн актерҙар ҙа, студенттар ҙа репетицияға, дәрескә йыйыла икән, улар аралашмай. Ҡыҙыҡлы, тере аралашыу юҡ. Һәр береһе телефонында ултыра. Бер театрҙа эшләп тә, улар бер-береһенең холҡон белеп етмәй, мөмкинлектәрен баһалай алмай. Күрешеп иҫәнләшәләр ҙә - бөттө. Шунлыҡтан, уйнағанда ла бер-береһен етерлек кимәлдә аса алмайҙар. Үҙ-ара хәлдәрен, йәшәйештәрен, проблемаларын уртаҡлашмайҙар. Ә беҙҙең осорҙа аралашыу, яҡынлашыу тәбиғи ине. Элек бер-беребеҙҙең хәлен һорашып, бер-беребеҙгә ярҙамлаша белә торғайныҡ. Хәҙер йәштәр бер-береһенең өйләнгәнме-юҡмы, ауылданмы-ҡалананмы йәки аныҡ ҡына кем икәнлеген дә белмәй, белергә лә теләмәй. Улар эшкә килде лә, ролен уйнаны ла, китте. Шунлыҡтан, мин студенттарым йәки йәш коллегаларым килеп, кәңәш һораһа, шатланып китәм, оло теләк менән әңгәмәгә инәм, булдыра алғансы ярҙам ҡулы ла һуҙам. Беҙ бит шулай теремек йәшәүгә, аралашыуға өйрәнгәнбеҙ.

Бөгөн тәнҡит тә юҡ йәштәр араһында. Башҡарғанды анализлау юғалып бара. Актер тәнҡитте ҡабул итмәй, үсегә икән, ул инде актер түгел. Ул үсмәйәсәк. Заманында тәнҡит йә кәңәште ололарҙан үҙем һорап ала торғайным. Гөлли Мөбәрәкова, Зәйтүнә Бикбулатова, Зинира Атнабаева, Нурия Ирсаевалар тәнҡиттәрен тура ғына итеп әйтә белә, ә мин уларҙы файҙаға тотонорға тырыша инем.

**Улдарығыҙҙың атаһы менән оҙаҡ йылдар бергә ғүмер иткәндән һуң юлдарығыҙ ҡапыл айырылып китеүе ул ике ижад кешеһенең бергә йәшәй алмауы булдымы? Инде барыһы ла бар, барыһы ла етеш, бар маҡсаттарға өлгәшелгән мәлдә ни өсөн һеҙ яңғыҙ ҡалырға ҡарар иттегеҙ?**

- Марс ағайығыҙ Фәйзи Ғәскәров ансамбленә бөтөн булмышын, һаулығын, ғүмерен, хатта ғаиләһенә бирә торған бар йылылығын ҡорбан иткән кеше. Пенсияға тиклем ике йыл ҡалғас, уны бригадаға бейеүсе итеп күсерҙеләр. Ул шуны ауыр кисерҙе. Йәйләп эскегә бирелде. Бер нәмә менән ҡыҙыҡһынмай, күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Үҙен ташланған, кәрәкмәгән итеп тойҙо. Мин һаман ике урында эшләйем, ижад итәм, балаларҙың шундай уҡ ижади тормошо менән янам. Марс шулайтып беҙҙең арбанан төшөп ҡалды. Хәҙер инде көнләшә, кемгә етте шуға ҡуша, кәмһетә башланы. Ә мин уға ғүмер буйы тоғро булған, унан башҡаларҙы күҙгә лә элмәй йәшәгән ҡатынмын. Шунлыҡтан, уның был ҡылығы ғорурлығыма үтә лә ҡаты һуҡты. Һәм мин уны шундай бер эскән, ғәйепләүҙәр яуҙырған ғауғаһы мәлендә, йыйындырҙым да, буш торған бер бүлмәле фатирыбыҙға күсереп ҡуйҙым. Әрләшмәнем, талашманым, ҡырҡа ҡарар иттем дә, айырылыштым. Ҡыйын булды, әммә шулай кәрәк икәнен һәм башҡаса ундай йәшәйеште кисерә алмаҫымды аңланым. Ниндәйҙер насар хәлдәр булып ҡуймаҫ элек, арабыҙға кәртә ҡуйыйым тинем.

Ир кеше ир кеше инде, күп тә тормай, янына ҡатын индереп тә алды. Аллаға шөкөр, тинем мин. Йәшәһендәр, бәхетле булһындар, яңғыҙаҡ, ҡарауһыҙ булып урамда йөрөмәһен. Кемдеке шуныҡы, балаларымдың атаһы бит. Минең уға үпкәм юҡ.



**Артист мотлаҡ матур булырға тейешме? Һеҙ бына матурлыҡ һағында нимәләр эшләйһегеҙ, нимәләр ҡулланаһығыҙ?**

- Тамашасы һөйөүен яуларға теләгән артист матур булырға тейеш. Мәҫәлән, һеҙ төп ролдә уйнаған артисты йәмһеҙ көйө ҡабул итә алыр инегеҙме? Һеҙ бит театрға гүзәллек күрергә, һоҡланырға, ғашиҡ булырға өмөтләнеп киләһегеҙ.

Мин үҙем йәшлекте һаҡлау, тәҫ ташламау өсөн ниндәйҙер махсус алымдар ҡулланмайым. Әле етмеш йәшемдә ҡаршылағанда ла ярайһы яҡшы кәйефтәмен. Йүгереп эшләп йөрөйөм, сәхнәлә уйнайым. 45 йыл театрҙа, 35 йыл уҡытыуҙамын. Дуҫтарым, туғандарым менән аралашып йәшәйем. Ысынында, бер минут та ваҡытым юҡ. Йомшаҡ ҡына холоҡломон. Кеше кәйефен боҙа, битен йырта йәки хәсәтләнә торған ғәҙәтем юҡ. Үҙ самам менән әйткәндә, ыңғай ғына кешемендер ул. Оптимистмын, эске көсөм бар. Бик һиҙгермен. Бирешмәҫкә, ебеп төшмәҫкә тырышып көн күрәм. Быны ошолар миңә ҡартайырға ла бирмәйҙер тип уйлайым. Тамашасыларымдың, таныштарымдың "Матур ҡартаяһың" тиеүе лә оло баһа. Һәр береһенә шул теләк.

**Ысынлап та, матур олоғая апай. Тышҡы ҡиәфәте генә түгел, уның эске донъяһы ла теремек, ҡыҙыҡһыныусан һәм ҡыҙыҡлы. Тамашасыһына ла, студенттарына ла, улдарына ла кәрәкле икәнен тойоп һәм һәр береһе менән күңел йылыһын бүлешеп йәшәй белгәнгәлер...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

Мостафа ҡарттың өйө Шамилдарға күрше генә, янынан кире оҙаҡ ҡына тәпәйләргә тура килде ике һәүреккә. Ғүмер буйы леспромхозда бухгалтер булып эшләгән ауыл аҡһаҡалы йәштән үк ауыл тарихы, уның кешеләре менән ҡыҙыҡһынды. Күпләп гәзит-журнал алдырҙы, әҙәбиәтте, мәҙәниәтте яратты. Бер бирелгән ғүмерҙе бушҡа үткәрмәйем, барыһына өлгөрөргә кәрәк, тип йәшәне ул. Йыйғанын йыйып, теркәрен теркәп ярайһы уҡ мәғлүмәт туплағас, ғүмер ҙә сикһеҙ түгел, фанилыҡтыҡы фанилыҡта ҡалһын тип, яңыраҡ ауыл хакимиәте менән бергә мәктәптең бер кабинетында "Ауыл тарихы" тигән музей булдырҙы. Ауылда кем боронғораҡ әйбер таба, уға алып бара. Аталарының орден-миҙалдарын да бүләк итеүселәр булды. Таҫтамал-камзул, тирмән ташы, ватыҡ көршәк кеүек әйберҙәр шул тиклем күп, хатта музейға һыймай ҡайһы берҙәре уның келәтендә ята әле ул. Шамил да уға, унынсыла уҡығанда буғай, олатаһынан ҡалған ике иҫке китапты алып инде. Ысынлап та ҡәҙерле ҡомартҡылармы икән, йәнәһе? Мостафа ҡарт бик һөйөндө, Шәмсетдин Зәки тигән олуғ фәйләсүфтең яҙмаларын олатаң ҡайҙан тапты икән, тип аптырап ултырҙы ла, илле тәңкә аҡса тоттороп, китаптарҙы алып ҡалды. Аҡсаһына Рәми менән Рафаэль Сафиндың шиғыр китаптарын һатып алғайны Шамил. Ҡайҙа ул саҡта, эсеү башҡа ла килмәгән. Тәмләүен тәмләй ине ул зәһәр утлы эсемлектәрҙе, тик байрамдарҙа ғына. Ул саҡта шиғыр уҡып, яратҡандарын яттан һөйләп тә йөрәү ине. Шәп гәҙәт булған да, хәҙер бына онотола бара, зәһәр утлы һыу эскә, аңға нығыраҡ инә. Эйе шул, ҡайһыныһы булһа ла енергә тейеш тә инде. Шиғырҙан ҡарағанда, тимәк, был әсе һыу көслөрәк.

- Көршәк-мөршәктәре, һабан төрәндәре, һәнәк-көрәктәре күп инде уның, ә бына кешегә почти ғүмер буйы терәк булған таяҡ музейҙа күренмәне, алыр. Шулай бит, Федя? - килә торғас, Шома шиген белдереп ҡуйҙы. "Ғүмер буйы" тип арттырып ебәрҙе, әлбиттә, егет. Шулай тип баһаһын күтәрмәксе таяҡтың.

- Ә алмаһа?

- Алмай нишләр тиң. Олатайым уны һуғыштан алып ҡайтҡан, тиерһең.

- Ул һуғышта булмаған.

- Улайһа, Бохаранан алып ҡайтҡан, тиерһең.

- Уның ҡайҙа икәнен дә белмәгән ул.

- Ярай, уйларбыҙ берәй нәмә.

Быларҙың бәхетенә Мостафа ҡарт өйҙә ине. Һаулыҡ һорашып амин тотҡас, хәл-әхүәл һорашҡан булдылар. Шунан ғына Шамил тоҡ эсенән таяҡты килтереп сығарҙы.

- Байлыҡ алып килдек үҙеңә, Мостафа бабай, - үҙе ҡулының шаҡтай ҡалтырауын белдермәҫкә тырышты.

- Ҡайҙа әле, ниндәй байлыҡ икән? - тип аҡһаҡал таяҡты ҡулына алды. Текләп-текләп ҡараны. - Һе, ябай имән таяҡ түгелме һуң? Заты ниҙә инде быуның?

- Ну-у, был бына Фәнилдең олатаһының таяғы ул. Ситдиҡ бабай ғүмер буйы уға таянып йөрөнө. Ҡояшлы көндә лә, дауыл-бурандарҙа ла ошо таяҡ ярҙамында бабай аяғында ныҡ торҙо, йығылманы. Ныҡлыҡта һәм терәк була белеүендә уның заты, - Шамил, һин дә күтәрмәлә тигәндәй, Фәнилгә күҙ һалып алды.

- Бохараның үҙенән алып ҡайтҡан шикелле олатайым... - тигән булды әшнәһе.

- Ситдиҡтың Бохара тарафтарында йөрөгәнен һис тә иҫләмәйем. Ябай ғына таяҡ та түгелдер, Ситдиҡ кеүек шәп ир-аҙаматты имән таяҡтар ғына һөрәндәрмәй йөрөтә алғанын аңлайым да, тик нингә бында алып килергә булдығыҙ әле?

- Ну, музейға экспонат булһын, тигәйнек. Хаҡы төшөрҙәй булһа, берәй шешә генә сәмәй булмаҫмы, тип тә уйлағайныҡ, - Шамил, бар ҡыйыулығын йыйып, килеү сәбәбен еткерҙе. Маңлайынан тир бәреп сыҡты.

Мостафа ҡарт тынып оҙаҡ ҡына ултырҙы. Шамилдарҙың өйөндә ҡалған себен бында ла үҙ тауышын белдерҙе, уның без-без килгән тауышы ҡолағына инеп, йәненә тейҙе шиғри күнелле егеттең. Ә Фәнил, башын эйеп, шым ғына ултыра бирҙе. Ғәҙәттә, бахмурҙа ул һәр саҡ шулай һәйкәл кеүек ҡата,




хатта ҡуҙғалмай сәғәттәр буйы, уйға сумған гений кеүек бер аяғын икенсеһенә һалып, башын ҡулына терәп ултыра ала. Себен ҡунһа ла ҡымшанмай.

- Быныҡ хаҡы бер сәмәйгә етмәй... Үлсәме башҡа. Таяғығыҙҙы алығыҙ ҙа сығығыҙ. Шул, - һүҙ тамам, тигәндәй, Мостафа ҡарт өйөнә инеп китте.

Нишләргә? Эш килеп сыҡманы. Идея тыумаҫ борон уҡ ҡарында үлде. Тормошҡа ашманы. Иңәлеүҙән файҙа уҡ. Хаҡы етмәй, тип ҡәтғи әйтте. Ни өсөн шулай әйтелгәнен ныҡлы аңланылар. Бында ундай хаҡ тураһында һүҙ бармағанын икеһе лә аҡылы менән түгел, йөрәге менән төшөндө. Ҡул йылыһы һаҡлаған таяҡты нисек бер ярты сәмәйгә генә алыштырмаҡ кәрәк. Таяҡты яңынан тоҡҡа урапылар ҙа урамға сыҡтылар.

Нишләргә? Тегендә Рафа картуф ҡыҙҙырып көтә. Ҡыҙған картуфты әҙерәк еүешләп-сылатмаһаң, тамаҡтан үтмәй йонсота ул.

- Киттек сауҙагәр Хамматҡа. Йәйен бесәнен сабышырбыҙ әле, көтәсәккә бирер, - Шамил һыр бирмәҫкә тырышты.

- Уға минең бурыс муйындан. Өс шешә тейеш, бармайым. Барыбер бирмәйәсәк, - Фәнил ҡаршылашып маташты. Үҙе башын тотоп нишләргә лә белмәне. Барһаң, мәсхәрә итеп бер буласаҡ, бармаһаң... мейе сығып килә, тамаҡ төбө үлтереп ҡыҫыта. Ә күңелгә бер ни ҙә кәрәкмәгән кеүек, хет ошо таяҡты ҡосаҡла ла тәүлек буйы тик ят.

- Мәңге ябыҡ ишек кенә шығырламай, ти шағир әфәнделәр. Астырып ҡарарға кәрәк, бәлки, майлап ебәрербеҙ. Бир әле таяҡты, - Шамил таяҡты тоҡтан тартып сығарҙы ла, уға таянып, бер яҡҡа ҡыйшая биреп, һылтанлап атлап китте. Хәйлә ҡормаҡсы, тағы ла бер идея.

- Оһо минең должниктар килә ята. Индәрендә бер тоҡ аҡса. Әллә тоғоғоҙ буш инде. Буш шул, уның тулы булғаны ла юҡ. Үпкәгеҙ күрәнә, томшоҡтарығыҙҙы ябып йөрөгөҙ, ел һуғыр ҙаһа, - кәйефе шәп ине, ахыры, сауҙагәрҙең, яһалма ялтыр тештәренең сағылышы шулайыраҡ хәбәр һалғандай. Шамил быны белеп бөткән, ауыҙына, йәғни сауҙагәрлек бизнесына, берәй арыу ғына ем инһә, тештәрен йыйып ала алмай торған. Кәйефе шәп сағында башҡаларҙы мәсхәрәләргә, көлөргә ярата ул, шунан оло ләззәт ала. Алһын да, оло ер шарында һәр кемдең үҙ ләззәте, үҙ йәлләде, тигәндәй, бөгөн беҙгә йыуаныс булырҙай бер шешә сәмәйен бирһә, шул еткән. Уның тоҙһоҙ мәсхәрәһенә түҙергә була ул, баш сатнай, шуныһына сыҙар әмәл юҡ.

Шамил, йөҙөн сирыштырып, йонсоған ҡиәфәттә, ихата алдында яткан бүрәнәләрҙең берекенә барып ултырҙы. Таяҡты ике бото араһына ҡыҫтырып, эйәген уға һалды.

- Һыҙландыра бит, Хаммат ағай, ой, һыҙландыра. Аяҡты ҡаймыҡтырҙым шикелле, йәллә әҙерәк.

- Улай ҙа һыҙлангас, духтырға бар, энекәш. Хаммат ағайың бағымсы түгел.

- Һин духтырҙан былайыраҡ, һин үләндәрҙе терелтеүсе. Һин, һин... - Шамил ни әйтергә белмәне. - Быйыл бесәнеңде сабып, йыйып бирербеҙ. Һинең кеүек арыу кешегә, почти фәрештәгә почти бушлай. Йәлләмә бер ярты.

- Фәрештәләр ярты менән бысранмай, шиш бына, - сауҙагәр бармаҡтар араһынан баш бармағы тыштырып йөҙроҡло ҡулын Фәнилдең танау төбөндә уйнатты. - Тәүҙә бурыстарҙы түләйек, иблис заттары.

- Күпме? - Фәнил дә телгә килде.

- Нимә күпме?

- Бурыс инде, тағы нимә булһын, фәрештә-ә?

Шамил белә, ныҡлы бахмуры башланһа, Фәнилдең тәкәһе һеҙәргә тотона, хәҙер ҙә яйлап-майлап ҡалмаһаң, "фәрештә"нең ҡанатын һындырғансы тондороуын көт тә тор.

- Хаммат ағаҡайым, борсолма, Фәнил белә ул күпме алғанын, күпме биргәнен. Беҙ киләһе аҙна вис кенә ҡайтарабыҙ. Бөгөн кәрәк ине. Прәме әле. Һин нимә ҡушаһың, шуны эшләргә әҙербеҙ, - Шамил, сатанларға ла онотоп, быларҙың араһына килеп инде. - Һинең бит хөрмәтең ҙур, беҙгә лә, мирға ла. Бына хәҙер ошонда аяҡ һуҙһаҡ, халыҡ һинең һаранлыҡты кисермәҫ.

- Минме һаран? Һин нимә, мин бары экономный. Тик бурыстарығыҙҙы ҡасан ҡайтараһығыҙ?

- Киләһе аҙна, тинек бит.

- Фәнил, нишләптер, бер ҙә өндәшмәй. Әллә ул ҡайтармаҫҡа уйлаймы? - Хамматҡа үҙенән ике башҡа оҙон әзмәүерҙәй ике егеттең, уның алдында тубыҡланырға әҙер булып, меҫкенләнеп тороуҙарын күреүе рәхәт ине. Бер ярты өсөн тағы ниндәй хәлгә төшөрҙәр икән? Ҡара бынау Фәнилен, ғорур булып маташҡан була әле. Һе, хәҙер нисек маймылға әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡаласаҡ.

- Фәнил, әйт, ҡайтарабыҙмы? - Шамил, ниндәйҙер өмөт уянғанын һиҙеп, дуҫына баҡты. Уныһы башын ҡалҡытып ҡына сауҙагәргә ҡараны ла:

- Ҡайтармаған бармы ни? Ҡулым иҫән, ошо запойҙан ғына сығайым да, - тине. Шунан, Шамилдан таяҡты алып, яңынан тоҡҡа урап ҡуйҙы.

- Ҡайтарырбыҙ, Хаммат ағай, хәлгә ин, зинһар.

Быныһы - йылан, тегенеһе тәкәббер, тип уйланы хужа. Бирмәй генә сығарырға ла ебәрергәме? Улай ҡыҙыҡ түгел. Бер кәрәкмәһә, бер кәрәктәре тейергә мөмкин, эсмәһәләр көслө лә ләүҙҙәре. Хаммат ихатаһына үтте. Шамил артынан эйәрҙе, Фәнил арттараҡ һөйрәлде.

- Аяғың һыҙлауы бөттө түгелме?

- Һинең йылмайыулы йөҙөндө күргәс тә баҫылғандай булды ул, Хаммат ағай.

Хаммат ҡарағайҙан эшләнгән бейек йортона инмәне, сәскәле, алмағаслы баҡсанан үтеп, шулай уҡ ҡарағайҙан һалынған иркен мунсаһының ишеген асты:

- Шәпме мунса? Бер ҡосаҡ утын ягам, эсеһе көнө буйына етә. Яратам мин мунса инергә, - егеттәрҙе эскә уҡ үткәрмәһә лә, мунсаһы менән эй маҡтанды сауҙагәр. Шунан ҡапыл: - Фәнил, әйт әле, һиңә ҡаш ҡәҙерлеме, күҙме? - тип һораны.

Арттараҡ торған бойоҡ Фәнил уны ишетмәне, ишетһә лә, уның мунсаға ни ҡыҫылышы бар әле, тигәндәй яуапһыҙ ҡалды, ә әрһеҙ Шамил уға һорауҙы ҡабатларға мәжбүр булды.

- Күҙҙәр. Ябай әҙәмгә ней... Затлы йөҙөк булһам, ҡаш тиер инем, - һаман тырмаһын арҡыры тартыуын белде быныһы.

Йоморо Хаммат, етеҙ генә инеп мунсанан һабын менән ҡырынғыс алып сыҡты ла алма төбөндә торған өҫтәлгә ҡуйҙы. Шунан өйөнә инде, бер аҙ торғас, ҡултыҡ аҫтына ике шешә сәмәй ҡыҫтырып, егеттәр алдына барып баҫты. Егеттәр, бер ни аңламай баҡсала көтөп торҙо.

- Һыҙландыра, тиһең инде, Шамил? Бына, һул яҡтағы шешә һинеке. Уң яҡтағыһы, Фәнил, һиңә тәғәйен. Тик шарт бар. Бер-берегеҙҙең берәр ҡашын ҡырһағыҙ, бер литр, ысынлап та, һеҙҙеке.

- Тимәк, бер ҡаш - бер ярты? - Шамил ҡулын ыуып алды.

- Эйе, күҙ ҡәҙерлерәк, уға йәшник ултыртырға ла була. Ҡаштың хаҡы шул сама ғына.

Фәнил аңланы: һөмһөҙ, ғүмерен алыпһатарлыҡ менән үткәргән, элек совет заманында спекулянтлыҡ менән байыған, бөгөн бизнесмен булып дан алған Хаммат сауҙагәр быларҙың намыҫын бер шешә сәмәйгә алыштырмаҡсы. Нишләргә? Ошо запойҙан сыҡһамы?! Бер айҙа ул ҡаш яңынан үҫеп сығыр инде былай. Тәүәккәлләргәме?

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

# ТЕАТР СӘНҒӘТЕ МЕНӘН...

## бала саҡта танышырға кәрәк

**Сәхнәнән башҡа бер генә сәнғәт төрө лә кеше күңеленә көслө тәьсир яһай алмай, тигәнме әле Чеховтың "Күңелһеҙ тарих" повесы геройы? Ысынлап та, театр сәхнәһендә барған һәр спектакль тамашасыны уйға һала, тап уның сәхнәһендә сәнғәттең бөтөн төрҙәре сағылыш таба. Ошо ижади мөхитте булдырыуҙа актерҙың өлөшө ниндәй күләмдә? Бөгөнгө үҙгәрештәр заманында театр үҙенең тамашасыһы менән идара итеү өҫтөнлөгөн һаҡлап ҡалғанмы? М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Вадим ҠЫЛЫСОВ менән ошолар тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**



**➔ Үткән быуаттағы театр тамашасының иғтибарын үҙенә йәлеп итә, уны уйландыра, йогонто яһай ала ине. Хәҙер иһә, театрға кеше тормоштағы проблемаларын онотоп торорға, күңел асырға йөрөй, тип әйтергә яратабыҙ...**

- Театрҙы бөгөн күңел яраларын дауалаусы итеп күргеләре килә икән, бында бер зыян да юҡ. Башҡорт тамашасыһы башҡа милләт тамашасыларынан нимәһе менән айырыла, беләһегеҙме? Уға йырбейеү яҡыныраҡ. Театрҙы ла ул шундай итеп күргеһе килә. Сәхнәлә йырлайҙар, бейейҙәр икән, унда күрһәтелгән мөхәббәт тарихы матур тамамлана икән, уларҙың күңеле лә була. Шулай бер Салауат башҡорт дәүләт театрында спектакль ҡарайым. Һәр театрҙа бөтөн спектаклдәргә лә йөрөгән тамашасы була, ғәҙәттә, улар театр яратҡан оло йәштәге апайҙар. Сәхнәлә бөгөнгө заманға хас проблема күтәрелә, был апайҙар ҡарап ултыралар, өндәшмәйҙәр. Шул мәлдә актер таҡмаҡ йырлай-йырлай килеп сыҡҡайны, дәртләнеп киттеләр, ҡул саба башланылар. Мин быны ғәйепләп әйтмәйем, беҙҙең тамашасы романтик театр өлгөһөндә тәрбиәләнгән. Уның күңеленә матур тарихтар яҡын. Улар йырлаған актерҙарҙы ярата. Кеше театрға барып ҡайғырып түгел, көлөп, бушанып ҡайтырға теләй икән, бында ла хәкикәт бар. Шуға ла театр тәнҡитселәре комедияларҙы күпме генә әрләмәһен, улар репертуарҙа кәрәк. Тамашасының һайлау мөмкинлеге булырға тейеш.

**➔ Ә йәш тамашасы ниндәй бөгөн?**

- Уларҙың да төрлөһө бар. Әйткәндәй, тамашасының ҡасан һәм ниндәй спектаклгә күберәк йөрөйәсәген дә алдан һиҙемләп булмай. Йәштәрҙе бигерәк тә. Өлкән тамашасы хисле, улар өсөн һүҙҙең мәғәнәһе, тәьҫире мөһим. Ә йәштәргә әҙәби театрға ҡарағанда, күҙҙәр аша ҡабул ителгән мәғлүмәт, тышҡы һүрәт ҡыҙығыраҡ. Был уларҙың интернет донъяһында ҡыҫҡа мәғлүмәттәрҙе ҡабул итеп өйрәнеүе һөҙөмтәһелер, бәлки. Үҙемдә оло йәштә тип һанамаһам да, мин уларҙы ҡайһы саҡта аңламайым. Хәҙерге ваҡытта ишетеп, күреп йөрөйбөҙ, театрҙа ла яңы форма эҙләйҙәр, эксперименталь спектаклдәр күбәйә. Драматургия һәм режиссура үҙәге лә осталыҡ дәрестәре үткәрә, уларҙың драматургтар һәм режиссерҙар менән берлектә ойоштороған сараларында актерҙар ҙа әүҙем ҡатнаша. Былар барыһы ла ҡыҙыҡлы. Эҙләнеүҙәр булырға тейеш. Был бөтөн донъя театрҙарына хас күренеш.

**➔ Милли сәхнәлә ҡуйылған эксперименттарҙың сиге ҡайҙа булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ? Беҙ нимәне ашаҡлап үтә алмаясаҡбыҙ?**

- Былтыр йәй Рәсәй театр эшмәкәрҙәре берлегенең халыҡ-ара йәйге театр мәктәбендә ҡатнашыу бәхете тейгәйне. Был бик уникаль проект, иң яҡшы билдәле педагогтар бөтөн донъянан йыйылған ҡатнашыусылар менән көн һайын сәхнә теле, актерлыҡ осталығы, сәхнә хәрәкәте, фехтование, акробатика, театр тарихы буйынса дәрестәр үткәрә, билдәле режиссерҙар, актерҙар менән осрашыуҙар була. Иң ҡыҙығы, спектаклдәр әҙерләп, аҙаҡтан уны тамашасылар һәм башҡа ҡатнашыусылар өсөн уйнайһың. Ошо мәктәп миҫалында был һорауға яуапты мин яҡшы аңланым. Башҡорт халҡының әхлаҡи ҡиммәттәре башҡараҡ. Төркиә, шулай уҡ Кавказ халыҡтарында ла әҙәп көслө. Ниндәй генә эксперименттар булмаһын, ошо әхлаҡ ҡанундары, башҡаларҙың күҙенән тыйған ғәмәлдәр сәхнәгә сыҡмаясаҡ, тип уйлайым. Беҙҙә ошо ҡиммәттәрҙе бер ҡасан да аяҡ аҫтына һалып тапамаясаҡтар, быға бер режиссер ҙа бармаясаҡ.

**➔ Баш ҡала тамашасыһы һине иң тәүҙә "Калигула" спектаклендә Калигула ролендә күрҙе. Ошо роль үҙең өсөн дә, тамашасы өсөн дә һинең актер булараҡ нимәгә һәләтле икәнеңде күрһәтте, тип әйтә алаһыңмы?**

- Әгәр ҙа һин ниндәйҙер ролгә ризалығыңды бирәһең икән, һин режиссерға тулыһынса ышанырға тейешһең. Режиссер Азат Йыһаншина ышанмаҫҡа бер нигеҙем дә юҡ ине. Беҙ тәүҙә уны Стәрлетамаҡ башҡорт театрында ҡуйғайныҡ. Башта ауыр булды. Тәбиғәтем буйынса мин ундай кеше түгелмен, кемгәләр ауыр һүҙ әйтеүе лә миңә ҡыйын. Әммә был роль, һәм һин образды аңларға, уның өҫтөндә эшләргә һәм сәхнәгә сығарырға тейешһең. Роль миңә, минең холҡома тура килмәй тип әйтә алмай актер. Ул үҙен һындырырға тейеш. Улайға китһә, "Йәшәгән, ти" (М. Ладо, режиссеры Р. Хәкимов) спектаклендә минең геройым ир-егет булараҡ бик көсһеҙ характерлы. Бары тормош уны шундай шарттарға ҡуйған. Әгәр ҙә ул образға әҙерәк характер өҫтәһәң, пьесаны яңынан яҙырға тура киләсәк. Тағы бер нәмә бар, был турала психологтар ҙа әйтә. Кеше бер ҡасан да үҙемдә 100 процентҡа беләм тип әйтә алмай, сөнки ниндәй ваҡиғала һин үҙеңде нисек тотасағыңды алдан әйтеүе, ай-һай, ҡыйын.

Әлбиттә, һәр спектакль ниндәйҙер фекер килтерә, тәжрибә туплана. Калигуланы ниндәйҙер тиран, тип кенә беләбеҙ. Сенатҡа атын индергәне, ғәскәрен диңгеҙ ярына теҙеп ҡуйып, һыу батшаһы Нептунға ҡаршы һуғыш асҡаны иҫкә төшә. Ә был спектакль мөхәббәт, үлем һәм, иң мөһиме, иреклек тураһында. Калигуланың ынтылған иреклегә абсолют иреклек, ул физик иреклектән бигерәк рухи иреклеккә өҫтөнлөк бирә. Ул әхлаҡ ҡанундарынан, мөхәббәттән, нәфрәттән азат булырға ынтыла. Был бит ҡурҡыныс, кешенең бер нәмәгә лә бәйләнеше булмауы. Балалары алдында яуаплылыҡ та юҡ, бер нәмәнән дә ҡурҡмай ҙа - бындай кеше булыу мөмкинме?

**➔ Балалар спектаклдәрендә иң яратып уйнаған ролең ниндәй?**

- Мин бөгөн Йәштәр театрында эшләүем менән бик ҡәнәғәтмен, дөрөҫ юлда һәм үҙ урынымдамын, тип иҫәпләйем. Бында ике труппаның спектаклдәрендә лә ҡатнашабыҙ, был актер өсөн ҙур тәжрибә. Ә балалар өсөн уйнауы үҙе бер мажара. Улар кеүек ошо әкиәт донъяһына башкөллөй сумып ҡараған, һинең менән бергә ҡайғырған, бергә шатланған, һинең геройыңды ихлас йәлләгән тамашасы юҡ. Улар өсөн театрҙа әкиәттәрҙән тыш, матур спектаклдәр ҙә күп. "Беҙҙең өйҙәң йәме" (М. Кәрим, режиссеры М. Күлбаев), яңыраҡ сәхнәгә сыҡҡан "Левушка" (А. Крым, режиссеры М. Күлбаев) спектаклдәрен мотлаҡ ҡарағыҙ, күпме изгелек, яҡтылыҡ, ихласлыҡ уларҙа. Ғөмүмән, һәр бер спектакль тамашасының күңеленә ниндәйҙер эҙ ҡалдыра, шуға ла театр сәнғәте менән бала саҡтан таныш булыу хуп.

Балалар спектаклдәрендә йәнлек-хайуандарҙы ғына уйнамайбыҙ. Мин һуңғы осорҙа "Пес Барбос и необычный кросс" (И. Казакова, режиссеры Р. Хәкимов) спектаклендә Балбесты рәхәтләнеп уйнайым. Ул шундай күңелле, балаларға ғына түгел, өлкәндәргә лә оҡшай.

**➔ Актер өсөн маҡтауҙар, ролдәре тураһында ыңғай фекерҙәр мөһимме?**

- Кемгә нисектер инде. Кемгәләр күберәк сыбыртҡы кәрәк, кемгәләр - прәник. Кемдәлер әрләһәң, сәмләнеп тороп эшләйәсәк, кемдер шунһыҙ эшләмәй. Маҡтауҙан һуң да кемдәр шашып китә, кемдер дәртләнә. Ролең тураһында фекерҙәр, уларҙың ыңғаймы, киреме булыуына ҡарамайынса, кәрәк. Сөнки ситтән яҡшыраҡ күренә.

Тамашасы беҙҙә өндәшеп бармай, әлбиттә. Әммә тамашасы психологияһынан ҡараһаң, ул аҡылы менән аңлай, сәхнәлә бер нәмә лә дөрөҫ түгел, герой үлмәне, тик унда барғандарға шул тиклем ышана. Калигуланың да ысын Калигула түгеллеген, актер икәнен аңлай. Стәрлетамаҡ башҡорт театрында эшләгәндә Распутиндың "Йәшә һәм онотма" (режиссеры Т. Воронина) спектаклендә дезертирҙы уйнаным. Енеү көнөндә уйнаныҡ та, залда ултырған ветерандарҙы сәхнәгә саҡырҙыҡ. Бер ағай миңә таяғы менән киҙәнеп, һуғырға маташа. Өлкәнерәк йәштәге тамашасыларҙың: "Вот һин аны, шулай тиме?"- тип спектаклде ҡыҫҡырып һөйләнеп ҡарағанына барыһы ла шаһиттыр. Тамашасыны үҙе алдан әҙерләнеп килгән тылсымға ышандыра алһаң, актер өсөн ошо маҡтауҙан да ҙурыраҡ баһалыр, моғайын.

**➔ Бәхет төшөнсәһенә ниндәй мәғәнә һалаһың?**

- Кеше күңеленең бөтөнлөгө ата-әсәһенең, туғандарының, яратҡан кешеһенең, балаларының сәләмәт, имен булыуынан тора. Тыуған яғым - Йылайыр районы Сизер ауылында йәшәүсе атайым менән әсәйем, ағайым һәм уның ғаиләһе беҙгә ҙур терәк, уларҙың йылы мөнәсәбәте менән бәхетлемен. Хәҙер атай менән әсәйгә ярҙам итеү өсөн түгел, күберәк ҡунаҡ булып ҡайтырға тура килә. Уларҙың миңә биргән тәрбиәһе өсөн рәхмәтлемен. Кәләшем, әсәйем кеүек үк, уҡытыусы. Ул минең һөнәремә аңлап ҡарамаһа, мин тыныс күңел менән ижад итә алмаҫ та инем. Ҡыҙыбыҙға өс йәш тә тулмаған әле. Балалар баҡсаһына барырға әҙерләнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әгәр ҙа урамда кеше китеп бара һәм ярты саҡрымдан уҡ уның артист икәне күренә икән, ул насар актер тиҙәр. Уҡыусы һиҙгәндер, йәш актер менән һөйләшеүебеҙ бер тапҡыр ҙа, мин шундай, мин бындай актер, мин шуға-шуға һәләтле, тигәнерәк юҫыҡҡа төшөп китмәне. Актер баҫалҡы булырға тейеш, тимәйем, тик сәхнәлә түгел икән, уның тәбиғи, ябай һәм ихлас булыуы тап һәйбәт актер булыуының күрһәткесе, тип иҫәпләйем. "Үҙеңдәге сәнғәтте сәнғәттәге үҙеңә ҡарағанда нығыраҡ яратыу"ҙан да дөрөҫөрәк нимә бар...**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Мин уны Фатима инәй, тинем. Аллаһы Тәғәлә әмере менән минең тормош юлымда осраған оло шәхес ул Фатима инәй. Өфөгә килеп уҡый башлауымдан алып, ул Хызыр-Ильяс кеүек ҡурсалаусым булды.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТОҘҘО...

## самалап ҡуллан

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Балаларҙың иртәнге ашында аҡһым мотлаҡ булырға тейеш, тип белдерә Пенсильвания университеты диетологтары. Уларҙың фекеренсә, иртән углевод ашаһаң, тиҙерәк асығаһың һәм төшкө ашта артыҡ калория йыяһың. Тикшеренеүҙәрҙә 8-10 йәшлек балалар ҡатнашҡан. Уларға һәр береһенең дөйөм энергетик ҡиммәте 350 калория булған өс төрлө иртәнге аш тәҡдим ителгән. Бынан һуң балалар уйнаған һәм төшкө ашты тағы ла һайлап алған. Иртән аҡһымдан торған ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүселәр углевод ашаусыларға ҡарағанда төш мәлендә яҡынса 4 процентҡа аҙыраҡ ашаған. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар өсөн 4 процент бәләкәй һан түгел, ти белгестәр һәм баланың иртәнге ашына күберәк иғтибар бирергә саҡыра.

■ Йоҡоһоҙлоҡ - организм һәм психика өсөн етди һынау. Йоҡоһоҙлоҡ менән интегеүселәрҙең рационына банан индерергә кәрәк. Уның составында калий менән магний бар. Триптофан тигән аминокислота серотонин синтезында ҡатнаша. Серотонин иһә "йоҡо гормоны" мелатонинға әйләнә. Шуға ла йоҡларға ятыр алдынан банан ашағыҙ. Шулай уҡ аҡһымға бай йомортҡа, эремсек, тауыҡ ите йоҡлап китергә ярҙам итер. Бер стакан йылы һөт тә тик файҙаға буласаҡ. Йоҡлар алдынан бер стакан һөткә ҡушып, бер ус сәтләүек ашаһаң, яҡшы йоҡлайһың икән. Сәтләүектәрҙән бразилия сәтләүегенә өҫтөнлөк бирегеҙ, ул калий менән селенға бай, ә һөттә кальций бар. Насар йоҡлаусылар туҡланыу рационынан майлы ризыҡтарҙы, бигерәк тә, аҡ майҙы һәм сырҙы алып ташларға тейеш.

■ Тоҙ ҡулланыуҙы кәметеү йөҙәр мең кешенең ғүмерен һаҡлап алыуға булышлыҡ итәсәк, ти күптән түгел генә үткәрелгән тикшенеренеүҙәрҙең авторҙары. Тоҙ - натрий хлориды тип аталған химик берләшмә. Натрий хлоридының 60 проценты хлорид, ҡалған 40 проценты натрий. Тап натрий сәләмәтлеккә зыян килтерә лә инде. Йөрәк ауырыуҙарын өйрәнеүсе Америка ассоциацияһы көнөнә 1,5 миллиграмм натрий ҡулланырға кәңәш итә. Әммә күптәр уны күберәк тотона, был һан сама менән 306 миллиграмм тәшкил итә, тимәк, норманан ике тапҡырға артып китә. Тоҙҙоң кеше организмына йоғонтоһон тикшергәндә натрий ҡулланыуҙы яйлап ҡына кәметеүҙең һөҙөмтәһен күреү өсөн ғалимдар компьютер ярҙамын ҡулланған. Ун йыл эсендә тоҙ ашауҙы аҙлап ҡына кәметеү ҙә яҡынса 500 мең кешенең ғүмерен һаҡлап ҡаласаҡ, ти улар.

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ШӘХЕС ӨЛГӨҺӨ...

## хәтирәләрҙә сағылды

**Өфө ҡалаһының Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы ошо көндәрҙә үҙенә исем биргән күркәм шәхесебеҙ Фатима Мостафинаның тыуыуына 105 йыл тулыуын билдәләне. Шул айҡанлы белем усағының ветеран уҡытыусылары, Фатима Хәмит ҡыҙының туғандары, яҡын таныштары, уҡыусыларҙың ата-әсәләре ҡатнашлығында асыҡ дәрестәр һәм тантаналы тамаша уҙғарылды.**

Башҡорт АССР-ның мәғариф министрын шәхсән белгән, уның менән бергә эшләгән ветеран уҡытыусылар Фәниә Ҡазыханова, Банат Мөхәмәтова, Лира Камалова, Роберт Арыҫланов, Сәбилә Сөләймәнова, Тәнзилә Бикбаева, Миләүшә Вәлиева, Флорида Ғәбдрәхимова, Бибигөл Билалова, Миңлебикә Мирғәлиева, Венера Ураҡсина, Шәрифулла Ғабдрахимов, Фатима Әминева, Рәүфә Илһамовалар асыҡ дәрестәрҙә ҡатнашты. Шулай уҡ сараға Фатима Мостафинаның һеңлеһе, табип Нәфисә Сабанчина, һуңғы көндәрендә бергә булған Гүзәл Сафиуллина, биографияһын барлап, телевизион тапшырыуҙар төшөргән һәм китаптар нәшер иткән Сәрүәр Сурина ла килгәйне. Уҡыусыларға улар бик ҡиммәтле бүләк - Фатима Хәмит ҡыҙы тураһында хәтерҙәрендә һаҡлаған иҫтәлектәрен һөйләп ишеттерҙе. Уҡыусылар иһә матур концерт тамашаһы әҙерләп ҡуйғайны. Белем усағының сәхнәһендә күкрәк киреп ҡурай уйнанылар, орсоҡтай әйләнеп бейенеләр, шиғри һүҙ яңғыраттылар.

- Ошо мәктәпкә нигеҙ һалынғанда һәм тәүге уҡыусыларын туплағанда Фатима Хәмит ҡыҙы "Был мәктәп 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты кеүек, туған телен һәм тарихын белгән лидерҙар, етәкселәр тәрбиәләгән белем усағы булырға тейеш!" тигәйне. Уның һүҙҙәренә тоғро ҡалған уҡытыусыларҙы һәм уҡыусыларҙы күреүемә шатмын бөгөн, - тине Фәниә Ҡазыханова уҡыусыларҙың сығышынан ҡәнәғәтлеген белдереп. Уның һүҙҙәрен тележурналит Сәрүәр Сурина ла ҡеүәтләне: "Кеше үҙенең туған ере менән көслө. Һамар өлкәһе Ырғыҙ буйы башҡорттары электән бында яҡташтар клубын булдырып, ойошоп йәшәгән. Фатима Хәмит ҡыҙы ла башҡорт мәктәбе асҡан ваҡытта Өфө башҡорттары тап шулай тупланып, фекер алышып, рухланып, көсәйеп һәм бер ҡор булып йәшәһендәр, тигән теләк белдергән. Шул васыятты тотабыҙ һәм тотасаҡбыҙ".

Хәтер кисәһенең тантаналы өлөшө тамамланғас, шәхесте көндәлек тормошта яҡшы белгән кешеләр менән аралашыу форсаты ла тейҙе. "Ғәҙеллекте ныҡ яратты, кешеләргә ярҙамсыл, балаларҙың уҡыуына талапсан булды", - тип хәтергә алды Гүзәл Сафиуллина Фатима Хәмит ҡыҙы хаҡында. Ә бына һеңлеһе Нәфисә Сабанчина уны тормошта маҡсаттар ҡуйып йәшәргә, юғары белемле булырға һәм ҡаршылыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа өйрәтеүсе яҡын кәңәшсеһе итеп белә. "Мин әсәйем Майгөл кеүек табип һөнәрен һайланым, Фатима апай өйрәткәнсә, үҙ көсөмә таяндым. Кеше уҡырға һәм һәр ваҡыт белемен камиллаштырырға тейеш, тигән кәңәшен һаман да тотам. Иң мөһиме, уның кеүек тормошта ярҙамсыл булырға тырышам. Ейәндәре барыһы ла техник белем алды, беҙҙең арала апайым кеүек оло йөрәкле педагогтар юҡ", - ти Нәфисә Фәтих ҡыҙы. Ә бына шәхестең яҡташы Банат Мөхәмәтова былай тип иҫкә төшөрҙө: "Ғәзизә инәйем, Һамар өлкәһендәге башҡорт ауылдарынан уҡырға һәләтле балаларҙы йыйып, поезға ултырып, Өфөгә килеп төшәбеҙ ҙә, туп-тура Фатима апайҙарҙың өйөнә барып инә торғайныҡ. Тормош иптәше Абдулла Вәли улы "Ыһ" та тигәне булманы: күмәк Һамар балаларының дәрестәрен тикшерер, "Һамарса бешерәм", тип, табала картуф ҡыҙҙырып ашатыр ине, тип һөйләй торғайны. Мин Өфө нефть техник университетына уҡырға ингәс, Фатима Хәмит ҡыҙы, математика уҡытыусыһы бул, тип күндерҙе. Бына 50 йыл хеҙмәт стажын тултырып, былтыр хаҡлы ялға сыҡтым. Бөгөн беҙҙең менән аралашҡан йәш быуынға башҡорт халҡын данлап йәшәһендәр, тигән наказ бирергә тип шатланып килдем".

Сарала ҡатнашыусыларҙың кеменән һораһаң да, Фатима Хәмит ҡыҙы чиновник булыуҙан бигерәк, оло йөрәкле кеше ине, тигән яуап ишеттек. Был хәтирәләрҙе тыңлаған уҡыусылар күңелендә лә яҡты иҫтәлек һәм ғәм уянмай ҡалмаҫ, моғайын.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ФАТИМА ИНӘЙ



Мин уны Фатима инәй, тинем. Аллаһы Тәғәлә әмере менән минең тормош юлымда осраған оло шәхес ул Фатима инәй. Өфөгә килеп уҡый башлауымдан алып, ул Хызыр-Ильяс кеүек ҡурсалаусым булды. Миңә генә түгел, бик күптәргә белем алыр, киләсәктә кеше булыр, халҡыбыҙға хеҙмәт итер, тигән төп өмөтөн бағланы. Атай-әсәйҙән йыраҡта, ҙур ҡалала уҡып йөрөгән йәш кешегә кәңәш тә, ярҙам да, йылы һүҙ ҙә кәрәк. Әгәр ошоларҙы бирер кешең булһа, был - бәхет. Фатима инәй бик күп йәштәрҙең ышаныслы терәге булды.

Студент йылдарымда мин уның йортонда йыш булдым, ҡайсаҡ аҙна һайын барам, оҙаҡ бармайыраҡ йөрөһәм, уңайһыҙ кеүек ине хатта. Бөтә туғандары менән яҡындан аралашып-ҡатышып йәшәнек. Бик күптәр һыйынды һәм һыйҙы ул йортҡа, һәр кемгә яҡты йөҙ, йылы сәй булды. Һәр кем кәңәш йә ярҙам алды, быға иманым камил. Әммә ул миңә ҡарата бигерәк тә иғтибарлы, яғымлы кеүек ине, мине үҙ итеп торҙо. Уның мине айырып яратыуын һиҙә инем, сөнки үҙем уны бик яҡын күрҙем, гел күргем-һөйләшкем килә, һүҙҙәрен тыңлағым килә... Һағынып китәм дә телефондан шылтыратам. Ул өйҙә булһа, йүгерәм...

Башҡортостан телевидениеһында эшләй башлағас, ул мине эҙләп эшемә килде, йөҙөмә текләп ҡарап, кәйефемде, эшемде һорашты. Милли мәктәптәр институтында эшләүе, фән менән шөғөлләнеүе, китабы сығыуы хаҡында һөйләне. Мин кейәүгә сығырға хәл итһәм, уға буласаҡ иптәшемде мотлаҡ күрһәтергә тейеш инем, ысынлап та, бергәләп өйөнә барҙыҡ. Бабайы Абдулла Вәли улы менән бергәләп, минең Артурымды икеһе ике яҡтан уртаға алып ултыртып, оҙаҡ һөйләштеләр, бик ҡәнәғәт ҡалдылар.

Беҙ байтаҡ ваҡыт ятаҡта йәшәнек. Фатима инәйем киске прогулкаға сыға, гел беҙгә килеп етә. Ҡайсаҡ балалар йоҡларға ятҡан була, ул өҫ кейемен сисмәй генә үтеп ултыра ла, шыпырт ҡына һөйләшеп, хәл белешеп, ял итеп сығып китә. Ҡайсаҡ сәй эсәбеҙ. Күстәнәскә гел булка алып килер ине.

Сипайловонан фатир алдыҡ, ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Инәйем, такси яллап, бүләктәрен тотоп килеп тә етте. Беҙҙе генә түгел, күптәрҙе шулай хәстәрләп йөрөнө ул. Ниһайәт, үҙ мөйөшө булған һәр башҡорт ғаиләһе өсөн ихлас ҡыуанды.

Фатима инәйем бер заман нисектер беҙҙең Күгәрсен яғына ла барып сыҡты. Мин балалар менән ауылда инем. Ул Мәксүт ауылына килгән дә, минең Үрге Һаҙҙа ялда ятҡанымды ишетеп, беҙгә килеп төштө. Эй аптыраныҡ, эй шатландыҡ. Нисек ҡунаҡ итәйек, тип торабыҙ,

✓ *Унда ҡара мәрмәргә шундай һүҙҙәр сүкелгән: "Әсәнән ҡыҙ тыуһам да, ирҙәй батыр булдым мин..." Башҡорт халҡының "Аҡбуҙат" эпосында Һомай ҡыҙҙың әйткәне Фатима инәйгә ҡайһылай тура килә!..*



сөнки яңы килен төшөргәнбеҙ, килен сәйенә бисәләр саҡырған-быҙ. Инәйебеҙҙе табын түренә ултыртып, килен сәйе үткәрҙек. Ул бик риза булды, беҙҙе ҡат-ҡат ҡотланы, ҡалай матур йолаңы тотаһығыҙ, тип маҡтаны. Мин уға тирә-яҡ тәбиғәтте күрһәтергә уйлап, атайымдан ат ектертеп, арбаға ултырышып, әсәйем менән бергә инәйҙе урман яғына алып киттек. Ғәләмәт ҡыҙыҡ, күңелле булғайны.

Фатима инәй тураһында хәтерләһәм, уның иң матур бер холҡон әйтеп китмәй булмай. Инәй аҙ һүҙле, күргәнен генә һөйләй, бер ҡасан да ғәйбәт һөйләмәй, башҡа берәүҙе лә яманламай ҙа, маҡтамай ҙа. Ул һәр нәмәгә үҙенең тормошо, уйҙары, күргән-кисергәне аша ҡарай. Ныҡ сер һаҡлай торған сифаты бар ине. Уның таныштары, дуҫтары күп, әммә әшнәләре, йәғни ваҡ-төйәк хәбәр һөйләшә торған кешеһе юҡ. Ул аралашҡан кешеләре менән бөтә йөрәген биреп, ихлас ҡатнашты.

Бер ҙур ғына кеше уның хаҡында "Сталин кешеһе бит ул", тине. Ысынлап та, йөрәгендә башҡорт халҡына ҡарата оло мөхәббәт һәм изгелек тулы кеше нисек итеп шәхес культы осорон имен сыҡҡандыр... Һәҙиә Дәүләтшина менән Шәрифә Тимерғәлинаны ул гел телгә алды, уларҙы юҡһынды, уларҙы беҙҙең иҫкә төшөрөп торҙо. Һәҙиә апайҙың әсәһенә ярҙам итергә тырышыуы, уны һаман сәйгә саҡырып тороуы, таяныс булыуы бөтә кешегә мәғлүм.

Фатима Хәмит ҡыҙы беҙҙең халыҡтың яҡты киләсәгенә ышанды, туған халҡына ҡарата рәхмәт һәм һөйөү менән йәшәне. Ул башҡорт милләтенән булған уҡытыусылар, табиптар, инженерҙар һәм нефтселәр менән ғорурланды, улар халыҡ араһынан сыҡҡан, тип ҡабатлай торғайны. Башҡортостандың етәкселәре итеп кешелекле, илһөйәр рухлы, талантлы, интеллигент, уҡымышлы кешеләрҙе күрергә теләне. Башҡортостан халҡының үҙ-ара татыу-тыныс, аңлашып-ярҙамлашып йәшәүендә милли мәктәптәрҙең роле ҙур. Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина ошо хәҡиҡәтте белде, һәр милләт балаһының үҙ туған телендә уҡыуын яҡлаңы һәм шуға нигеҙ һалыусы булды.

Фатима Хәмит ҡыҙы кешенең һәләттәрен дөрөҫ баһалай һәм йәш кешенең тормошондағы хәл иткес мәлдәрҙә дөрөҫ билдәләй белде. Кеше үҙ ҡулдары, үҙ йөрәге һәм белеме менән яҙмышын ҡора ала, тип ышанды ул. Һәр кем ваҡытын бушҡа әрәм итмәйенсә, ныҡышмалы рәүештә үҙенең хыялын тормошҡа ашырырға, маҡсатына ирешергә тейеш, тип ҡабатларға яратты. Ул үҙен "тарихи ғәрәсәттәрҙә бер мөғжизә менән генә иҫән ҡалған башҡорт халҡының вәкиле" тип һананы.

Инәй 1993 йылда үҙенең һикһән йәшен ил менән бергә байрам итеп, Ил инәһе дәрәжәһен алып, оло рәхмәт һәм ихтирам күреп шатланды. Был сараны Башҡортостан, Ырымбур, Һамар башҡорттары гөрләп үткәрҙе, ул осорҙа ил башлығы, Юғары Совет Президиумы рәйесе Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов Фатима инәйҙе тәбрикләп сығыш яһаны. Һеҙ халҡыбыҙ өсөн күпме яҡшылыҡ эшләнегеҙ, беҙ һеҙҙе ризалата алырбыҙмы икән, тине.

Фатима инәйҙең тыуыуына туҡһан йыл булған көндәрҙә Республика мәғарифын үҫтереү тарихы музейында Хәтер кисәһе ойошторҙоҡ. Нурмөхәмәт хәҙрәт уның тураһында иҫ киткес фәһемле вәғәз һөйләне, инәйҙең яҡты рухына аят бағышланы. Уның тураһында телефильм төшөрә башлағас, һәр кем йылы һүҙен әйтергә ашыҡты. Зәйнәб Биишева, Зәкәриә Аҡназаров, Мостай Кәрим, Рамазан Өмөтбаев һәм башҡа шәхестәребеҙ Фатима инәй менән бер заманда бергә янып, бергә ènеп йәшәгәне өсөн ғорурлана, уға һоҡлана булып сыҡты! Шунан һуң инәй тураһында иҫтәлектәр йыйынтығы туплай башланым. Бигерәк тә уның менән бергә эшләгән кешеләр шатланып риза булды - уның рухташтары, арҡаҙаштары һаман да тоғро, һаман да бергә!

Салауат батыр хаҡында йырҙа шундай юлдар бар: "Иҫ китерлек эштәр эшләнек беҙ - Салауат тиген иргә таянып!" Фатима инәйҙең арҡаҙаштары - замандаштары, коллегалары, уҡыусылары ла шулай: "Беҙ Фатима Мостафина дәүере кешеләре булдыҡ - ил өсөн, халыҡ өсөн ең һыҙғанып эшләнек!" - тиҙәр.

Фатима инәйҙең ҡәбере Өфөнөң мосолман зыяратында. Унда ҡара



мәрмәргә шундай һүҙҙәр сүкелгән: "Әсәнән ҡыҙ тыуһам да, ирҙәй батыр булдым мин..." Башҡорт халҡының "Аҡбуҙат" эпосында Һомай ҡыҙҙың әйткәне Фатима инәйгә ҡайһылай тура килә!..

Һамар өлкәһенә ингән иҡһеҙсикһеҙ ҡылғанлы далалар, убалар-йырындар аша борғоланып аҡҡан Ырғыҙ йылғаһы буйында, Оло Башҡортостан биләмәләрендә, башҡорт халҡының данлы-шанлы бөрйән, үҫәргән ырыуы халҡы төпләнгән. Һамар башҡорттары һәр дәүерҙә башҡорт иленән айырылмай йәшәргә тырыша. Ихтилалдар, ауыр һалымдар, әрме бурысы менән сырмалып-миктәп йәшәгән башҡорт халҡының үҙ дәүләтен булдырыу, телен, ерен һаҡлау маҡсаты бөтә ырыуҙары өсөн бер була. Октябрь революцияһынан һуң Һамар башҡорттары Башҡортостанға ынтыла - ил күргәндә күрергә, илгә таянып йәшәргә теләй.

Фатима Хәмит ҡыҙы менән һөйләшкән саҡта ла ул үҙенең төп йәшәү маҡсатын бер ҡасан да йәшермәй, асыҡ итеп әйтеп ҡуя торғайны: "Үҙеңдең халҡың өсөн, илең өсөн файҙалы кеше бул! Быға ирешер өсөн белемле, ҡыйыу, аҡыллы, үткер, тырыш бул!" Фатима инәйҙе Аллаһы тәғәлә башҡорт халҡына мәғрифәтсе итеп яратҡан, шуның өсөн йәшәткән, шуның өсөн йәнә йәннәттә булһын!

**Сәрүәр СУРИНА,**
**драматург.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТУҒАНДАШ, РУХТАШМЫ?

**Дауаханала ятам. Һауа алышынһын тип ярым асып ҡуйған палата ишегенән, сараһыҙҙан, үткәнһүткәндәрҙе күҙәтәм. Шәфҡәт туташтарының, санитаркаларҙың эштәре ниндәй тынғыһыҙ икәненә тағы бер инанып, төрлө уйҙарға сумам. Былдай эштә һөнәрен бар күңеле менән ҡабул иткәндәр генә эшләргә тейештер, тиген һығымтаға киләнә.**

Травма бүлеге булғас, коридорҙа пациенттар күренмәй тиерлек. Бер ҡатта ун ике дауаланыусы, шуларҙың икәүһенең генә яҡындары килеп-китеп йөрөй. Ҡалғандары эскерһеҙ медицина хеҙмәткәрҙәре ҡарамағында. Бер көндә ҡарар күҙгә оло ғына күренгән ҡатынды күрше палатаға һалдылар. Күм-күк битенә, саҡ шылдырып атлаған аяҡтарына ҡарап, һығымта эшләп тә ҡуйылды: иренән туҡмалған. Кемебеҙгә осраһа ла, кәрәк булған ергә етәкләп алып барып, палатаһына оҙатып ҡуябыҙ. Беҙгә яҡындарыбыҙ йыш килгәс, күстәнәстәр йыйылып китә. Ара-тирә ошо ҡатынға ла керетҡеләйем. Тора-бара ҡатындың хәле арыуланды. Коридорҙа эргәгә килеп, хәлен һөйләп китә башланы. Биш йыл Ҡаҙағстанда ҡоллоҡта булған икән. Ауылдан сығып юғалғанына һигеҙ йыл тигәндә әйләнеп ҡайтҡан. Тамаҡ хаҡына бер бай ҡаҙаҡтың донъяһын көткән, һарай-һарай малын ҡараған, ҡыҫҡаһы, ҡоллоҡта йөрөгән. "Һуңға табан хужаның улы бигерәк хаттин ашты, ҡул күтәрә башланы", - ти. Түҙер әмәле ҡалмағас, яйын табып, ҡасҡан...

Ошо ваҡиғанан һуң электән борсоған фекеремде ныҒыраҡ төйнәнем. Һуңғы арала, ҡаҙаҡтар беҙгә рухташ, туғандаш, беҙгә улар менән берҙәм булырға кәрәк, тиген һүҙҙәр ишетелә. Ай-һай! Ошондай туғандарҙың "коллоғона" эләккәндәр бик күбәйеп китмәнеме икән? Беҙҙең районда ғына ла ундай хәлдәрҙе әленән-әле ишетеп-күреп торабыҙ. Көтөүкөтөү аттарыбыҙ ҙа йыл һайын ҡаҙаҡ далаларына ҡыуып алып кителә, тиҙәр. Шуның өсөн, бер ҡатлы булмайыҡсы әле. Ғөмүмән, бәхетте ситтә түгел, үҙ еребеҙҙә, үҙ халҡыбыҙ араһында эҙләйек.

**Наилә ХАМБАЛИЕВА.**

## СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Ул кешеләрҙең һәр ҡайһыһына: "Эйе, һин миңә бик күп яуызлыҡтар эшләнең; хатта миңә ваҡыты-ваҡыты менән шул тиклем ауыр булды... Әммә уларҙың барыһын да йырып сыҡтым, улар барыһы ла үткәндәрҙә ҡалды, мин һине ғәфү итәм. Ғәфү итәм һәм "һау бул" тием... Һин үткәндәрҙә ҡалдың, ә минең тормошом - хәҙерге һәм мин бында һине ғәфү итер өсөн үҙ теләгем менән килдем... Бәхил бул. Мин һине ғәфү итәм..." - тиегеҙ. Һеҙгә әлеге ваҡытта килеүселәрҙең барыһына ла яҡынса шулай тип әйтегеҙ... Бигерәк тә ул яҡын кешегеҙ булһа. Яҡын кешеләр беҙҙе бигерәк тә ныҡ ыҙалата, ауырыраҡ яралар һала... Әгәр хәтерегеҙҙә һеҙҙе дауалаған һәм ярҙам итә алмаған табиптар булһа, уларҙы ла ғәфү итегеҙ. Улар һеҙгә ыҙалар килтерһә лә, моғайын, быны яуыз ниәттән эшләмәгәндәрҙер, ә бары тик ярҙам ғына итә алмағандарҙыр. Ғәфү итегеҙ... Һәм тормош юлын артабан дауам итегеҙ, юлда оҙаҡ тотҡарланмағыҙ һәм осраған бер кешене лә үткәреп ебәрмәгеҙ. Илағыҙ килһә - илағыҙ, йәштәрегеҙҙе тыймағыҙ... Йәш тамсылары менән барлыҡ хәсрәттәрегеҙ китһен, күңелегеҙҙә ауыр булып ятҡан таш иреһен һәм артабан тыныс йәшәргә ҡамасауламаһын... Йәштәрегеҙ, ғәфү итеүегеҙ менән барлыҡ үпкәләүҙәрегеҙ китһен... Сөнки ғәфү итеү, тимәк - ебәреү ул. Әммә эстән генә үҙегеҙгә: "Етер. Мин үткәндә булдым. Һәм был минең теләгем ине... Ләкин минең тормошом - ул хәҙергем. Хәҙер нимә бар - шул... Мин хәҙер элекке түгел, мин үҙгәрҙем, мин яҡшыраҡмын, таҙараҡмын. Элек насар булған бер нәмәнең дә миңә ҡатнашлығы юҡ. Миндә насарлыҡҡа урын ҡалманы..."- тиегеҙ. Әммә, моғайын, һеҙ ҙә һәр саҡ хаҡлы булмағанһығыҙҙыр, һеҙ ҙә әүлиә түгел. Моғайын, кемдәрҙер ҡыйырһытҡанһығыҙҙыр, рәнйеткәнһегеҙҙер һәм ғәфү үтенергә теләйһегеҙҙер. Шул кешегә мөрәжәғәт итегеҙ, уйығыҙҙан ғына ауыр саҡта ярҙам һораған көстәрҙән тағы ла ярҙам итеүен үтенегеҙ. "Эйе, мин күп ауырлыҡ кисерҙем, хаталарым да күп булды. Әммә мин уларҙы еңеп сыҡтым, барыһы ла үткәндәрҙә ҡалды, ә мин хәҙерге менән йәшәйем. Йәшәйем икән, тимәк, көсләмөн, мин был ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡҡанмын. Был көрәштә мин тәжрибә тупланым. Ул миңә хәҙерге тормошомда ярҙам итә. Мин хәҙер бер ваҡытта ла элекке булмам. Мин тағы ла яҡшыраҡ, камилыраҡ булырға тырышам... Быны өсөн көсөмдән килгәндең барыһын да эшләйәсәкмен... Мин йәшәйем, тоям, уйлайым, тын алам, күрәм, ишетәм... Былар барыһы ла - бәхет. Был тормош байрамында мин Тәбиғәттең һайлап алған бәхетле йәне! Тормош ни тиклем ауыр булмаһын, ул барыбер бөтөнләй йәшәмәгәнгә ҡарағанда яҡшыраҡ. Мин үҙемә ышанам. Бәхет өсөн нимә кәрәк - барыһы ла бар. Тормошом мәғәнәһе, маҡсатым бар..." Һәр кемдең үҙ маҡсаты, үҙ мәғәнәһе - балалары, ғаиләһе, эше. Маҡсатығыҙҙы, тормош мәғәнәһен аныҡ билдәләгеҙ. Үҙ урынығыҙҙа һөйбәт икәнен тойоғоҙ.

Хәҙер уйығыҙҙа ҡына киләсәккә күсегеҙ. Бер айҙан, ай ярымдан, ике айҙан һуң нимә булырын аныҡ күҙ алдына килтерегеҙ. Үҙегеҙҙе йәш, сәләмәт, матур, үҙегеҙгә нисек оҡшайһығыҙ - шулай тип күҙ алдына килтерегеҙ. Үҙегеҙҙе яратыуығыҙҙы тойоғоҙ. Һеҙ һөйөүгә һәм ихтирамға лайыҡ. Һеҙ тағы ла яҡшыраҡ булырға теләйһегеҙ, быны өсөн барыһын да эшләйһегеҙ. Һәр күҙәнәгегеҙ менән үҙегеҙгә эстән дә, тыштан да нисек итеп күргегеҙ килә - барлыҡ деталдәренә тиклем йәшлек образын күҙаллағыҙ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 14 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 14 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Сегодня вечером". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.25 "Сегодня вечером". [16+]
16.15 "Давай поженимся!" [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Султан моего сердца". [16+]
23.25 Д/с Премьера. "Самые. Самые. Самые". Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
0.20 Т/с "Секретарша". [16+]
2.20 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.20 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00 Доброе утро, республика!
09.25 Утро России.
09.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Круговорот". [12+]
01.20 Т/с "Только о любви". [12+]
03.20 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Красная кнопка". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Тайм-аут".**
**20.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Наука 102. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Күстәнәс. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Х/ф "Леди Макбет". [0+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.00 Күстәнәс. [12+]**
**4.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 15 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 15 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Султан моего сердца". [16+]
23.25 Д/с Премьера. "Самые. Самые. Самые". Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
0.20 Т/с "Секретарша". [16+]
2.20 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.20 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00 Доброе утро, республика!
09.25 Утро России.
09.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Круговорот". [12+]
01.20 Т/с "Только о любви". [12+]
03.20 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Д/ф "Тайны нашего кино". [12+]**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Х/ф "Доводы рассудка". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 16 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 16 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Султан моего сердца". [16+]
23.25 Д/с Премьера. "Самые. Самые. Самые". Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
0.20 Т/с "Секретарша". [16+]
2.25 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.25 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00 Доброе утро, республика!
09.25 Утро России.
09.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Круговорот". [12+]
01.20 Т/с "Только о любви". [12+]
03.20 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 "Аль-Фатиха. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 Тәмле. [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Д/ф "Династия". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Хазина о Хазине. [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Песня года". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Х/ф "Гоген". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Не ломайте крылья". [12+]**
**4.00 Наука 102. [12+]**
**4.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 17 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 17 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Султан моего сердца". [16+]
23.25 Д/с Премьера. "Самые. Самые. Самые". Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
0.20 Т/с "Секретарша". [16+]
2.25 "На самом деле". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "На самом деле". [16+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.25 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00 Доброе утро, республика!
09.25 Утро России.
09.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Круговорот". [12+]
01.20 Т/с "Только о любви". [12+]
03.20 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Д/ф Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Позывной "Барс". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 Наука 102. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Аль-Фатиха. [12+]**
**17.15 Современник. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Новости (на баш. яз.).**
**18.20 Хоккей. КХЛ. "Барыс" (Астана) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Х/ф "Идеальные незнакомцы". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Девушка с веснушками". [12+]**
**5.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 18 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 18 января. День начинается".
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Х/ф Премьера. "Несокрушимый". [16+]
23.20 Х/ф Премьера. "Свет в океане". [16+]
1.50 Х/ф "И Бог создал женщину". [12+]
3.45 "Модный приговор". [6+]
4.40 "Мужское / Женское". [16+]
5.30 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

05.00, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00 Доброе утро, республика!
09.25 Утро России.
09.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Круговорот". [12+]
23.30 "Выход в люди". [12+]
00.50 Х/ф "Снег растает в сентябре". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Соседи". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Спектакль "Земляки". [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.45 Бала-саға. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**15.45 Шәп арба. [0+]**
**16.00 Гора новостей. [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Д/ф Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.15 Замандаш. [6+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Бирешмә. Профи. [12+]**
**19.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Моя семья. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Х/ф "Гонка века". [16+]**
**1.30 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**
**3.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.00 "Моя семья". [6+]**
**4.30 Х/ф "Гонка века". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 19 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Трембита". [6+]
7.55 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения". [0+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Х/ф "Полосатый рейс". [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф Премьера. "Другого такого нет!" К юбилею Василия Ланового. [12+]
13.20 Х/ф "Алые паруса". [0+]
15.00 К юбилею Василия Ланового. [16+]
15.50 Х/ф "Офицеры". [6+]
17.40 Концерт, посвященный фильму "Офицеры" в Государственном Кремлевском дворце. [12+]
19.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Мистер Штайн идёт в онлайн". [16+]
0.55 Х/ф "Большой переполох в маленьком Китае". [12+]
2.45 "Модный приговор". [6+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]
4.30 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
08.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.25 Вести. Местное время.
11.45 "Далекие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.05 Х/ф "Дочки-мачехи". [12+]
17.30 "Привет, Андрей!". [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 Х/ф "Радуга жизни". [12+]
00.45 Х/ф "Цена измены". [12+]
02.55 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Нико: Маленький Братишка".**
**9.30 "Большой чемодан. [6+]**
**10.15 Моя вершина. [6+]**
**10.30 Күстәнәс. [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Күңелем моңдары. [12+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Книга. [0+]**
**13.15 Әлләсе... [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец).**
**19.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.30 Республика Live. [12+]**
**20.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.00 Х/ф "Атлантида". [16+]**
**0.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**1.30 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**3.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.45 Х/ф "Атлантида". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 20 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Х/ф "Раба любви". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Раба любви". [12+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Русский в городе ангелов". К 75-летию Родиона Нахапетова. [16+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Наедине со всеми". [16+]
13.00 Д/ф "Инна Макарова. Судьба человека". [12+]
14.00 Х/ф "Женщины". [6+]
16.00 Д/ф "Виталий Соломин. "...И вагон любви нерастраченной!" [12+]
17.10 "Три аккорда" в Государственном Кремлевском дворце. [16+]
19.10 "Лучше всех!" Новогодний выпуск.
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". [16+]
0.50 Х/ф "Сумасшедшее сердце". [16+]
2.55 "Модный приговор". [6+]
3.50 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

04.30 Х/ф "Как же быть сердцу". [12+]
06.40 "Сам себе режиссёр".
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.00 Утренняя почта.
08.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Т/с "Время дочерей". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
00.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
01.25 Т/с "Пыльная работа". [16+]
03.20 "Далекие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/с "Десять друзей кролика". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [0+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 "Моя семья". [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Башҡорттар. [6+]**
**15.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Оҙон көй". Гала-концерт республиканского конкурса г. Туймазы. [6+]**
**18.30 "Туктатмағыҙ юлдарымдан". Юбилейный вечер Гульфии Юнусовой. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Свидание с джазом. [12+]**
**0.00 Х/ф "Нечаянные письма". [12+]**
**1.30 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**4.00 Историческая среда. [12+]**
**4.30 Х/ф "Нечаянные письма". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (8) дүшәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |
| 15 (9) шишәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 16 (10) шаршамбы | 8:002 | 9:32 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 17 (11) кесе йома | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |
| 18 (12) йома | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 19 (13) шәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:55 | 17:25 | 18:55 |
| 20 (14) йәкшәмбе | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:57 | 17:27 | 18:57 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

***✓ Эшһеҙҙәр 1 ғинуарҙан айына 1500 һумдан 8000 һумға тиклем пособие аласаҡ. 2018 йыл менән сағыштырғанда, был ике тапҡырға күберәк. Пособие юллау өсөн халыҡтың мәшғүллек үҙәктәрендә иҫәпкә торорға кәрәк.***

*НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?*

# НИНДӘЙ ВАҠИҒАЛАР КӨТӘ?

## Ташлама һәм компенсациялар

✓ 2019 йылдан балалар баҡсаһына түләүгә дәүләт ярҙамы алыу өсөн ғаиләнең дөйөм килеме уның һәр ағзаһына ике йәшәү минимумы күләменән артмаҫҡа тейеш ине. Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә иғлан итеүенсә, был ярҙамды, ғаиләнең матди килеменә ҡарамайынса, барыһы ла аласаҡ. Бының өсөн бюджеттан миллиард һум бүленгән.

✓ Күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләүселәр транспорт һалымынан азат ителә. Законға бындай төҙәтмәне Радий Хәбиров индерҙе. 150 ат көсө ҡеүәтендәге 1 автомобиль өсөн льгота буласаҡ, тип көтөлә. Әгәр ҙә ғаиләнең автомобиле икәү икән, ташлама уларҙың береһенә генә ҡағыласаҡ. Льгота 2024 йылға тиклем үҙ көсөндә буласаҡ. Бындай ташлама индереү бюджетҡа 175 миллион һумға төшәсәк.

✓ 2019 йылдан яңғыҙы йәки тағы ла бер пенсионер, 1-се, 2-се төркөм инвалиды менән бергә йәшәгән өлкән кешеләр капиталь ремонт өсөн түләүҙән 50 процентҡа (70-тән өлкәндәр) йәки 100 процентҡа (80-де үткәндәр) азат ителә. Был ҡанунды БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары ҡабул итте.

✓ Эшһеҙҙәр 1 ғинуарҙан айына 1500 һумдан 8000 һумға тиклем пособие аласаҡ. 2018 йыл менән сағыштырғанда, был ике тапҡырға күберәк. Пособие юллау өсөн халыҡтың мәшғүллек үҙәктәрендә иҫәпкә торорға кәрәк. 16 йәше тулған, бер ерҙә лә эшләмәгән, көндөҙгө бүлектә белем алмаған һәм эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнмәгәндәр эшһеҙ тип иҫәпләнә. Бынан тыш, ҡартлыҡ буйынса пенсияға сығыуға 5 йыл ҡалған эшһеҙҙәр ҙә был пособиены ала аласаҡ. Уларҙың пособие күләме айына 1500 меңдән 11 280 меңгә тиклем.

## Территорияларҙы төҙөкләндереү

✓ 2019 йылдан масштаблы "сүп реформаһы" башланды. Сүп-сарҙы йыйыу, алып сығыу, утилизациялау өсөн әлеге кеүек муниципалитеттар түгел, ә 4 төбәк операторы яуап бирә. Урындағы хакимиәттәр иһә быға тиклем булған сүп-сар урындарын таҙартырға бурыслы. Башҡортостан Хөкүмәтендә аҙна һайын үткән ултырышта Радий Хәбиров белдереүенсә, сүп сығарған өсөн түләү кеше башына - 70, ә төпкөл ауылдарҙа 35 һумдан артмаҫҡа тейеш.

✓ 2019 йылда "Яҡты ҡала" программаһы сиктәрендә республиканың ҡала һәм райондарында урамдарҙы яҡтыртыу өсөн 23 мең яҡтыртҡыс ҡуйыласаҡ. Үткән йылдың аҙағында 370 мәктәптең тирә-яғына яҡтыртыу ҡоролмалары ҡуйылған да инде. Былый ҡараңғылыҡҡа сумып ултырған мәктәптәр ҡалмаҫҡа тейеш.

✓ Республикала подъезд һәм ихаталарға капиталь ремонт үткәреү программаһы старт ала. Киләһе 6 йыл эсендә бының өсөн 6 миллиард һум йүнәлтеләсәк. 26 меңдән ашыу подъезға ремонт талап ителә. Йыл дауамында 4 мең подъезд, 487 ихата төҙөкләндереләсәк. Быға миллиард һум бүленгән. Подъезд ишеге, стеналары, иҙәне, почта йәшниктәре алыштырыласаҡ, энергия һаҡлаусы лампочкалар, видеокүҙәтеү ҡуйыласаҡ. Программала ҡатнашыу өсөн милек хужалары йыйылышы үткәреп, башҡарыласаҡ эштәрҙе, уларҙың хаҡын билдәләргә кәрәк. Дөйөм сметаның 5 процентын халыҡ үҙе йыясаҡ.

## Йәшәү сифаты

✓ Рәсәйҙә 12 милли проект тормошҡа ашырыла башланы, был турала ил Президенты белдергәйне инде. 3 йыл дауамында тормош сифатын яҡшыртыу өсөн дәүләт 28 триллион һум бүләсәк. Владимир Путин билдәләүенсә, учреждениеларҙа ғына түгел, ә халыҡ йәшәгән территорияларҙа - ҡалаларҙа, ауылдарҙа хәл яҡшырырға тейеш. Һәм был үҙгәрештәр ҡағыҙҙа ғына түгел, ысынбарлыҡта булырға, кеше уларҙы күрергә һәм тойорға тейеш. Эшмәкәрлек 12 йүнәлеш буйынса барасаҡ. Һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, торлаҡ һәм ҡала мөхите, экология, автомобиль юлдары, хеҙмәт баҙары, фән, цифрлы иҡтисад, мәҙәниәт, бәләкәй эшҡыуарлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм экспорт, магистраль инфраструктура. 2019 йылда Башҡортостан милли проекттар өсөн - 34,2, 6 йыл эсендә 170,6 миллиард һум аласаҡ. Шулай уҡ быйыл республикаға 7 балалар баҡсаһы төҙөлөшө өсөн - 1,4 миллиард, яңы мәктәп һәм уларҙың матди базаһын нығытыу өсөн - 645 миллион, яңы дауаханалар төҙөү өсөн - 500 миллион, ауыл фельдшер-акушер пункттары һәм күсмә медицина комплекстары өсөн 260 миллион һум федераль аҡса бүленәсәк.

✓ 1 ғинуарҙан бәләкәй предприятиеларҙың банк иҫәбендәге һәм депозиттағы аҡсалары вкладты страховкалау системаһына эләгә. Әгәр ҙә банктың лицензияһын аласаҡтар икән, уларҙың клиенттары - бәләкәй эшҡыуарлыҡ вәкилдәре Вкладтарҙы страховкалау буйынса агентлыҡтан 1,4 миллион һум күләмендә страховка ала аласаҡ. Был агентлыҡтың сайтында вкладтарҙы страховкалау системаһында ҡатнашҡан банктарҙы ҡарарға була. Элек бәләкәй предприятиелар үҙ иҫәбендәге аҡсаны банктың банкротлығы процедураһы тамамланғас ҡына ала ала ине. Был осраҡта ла банктың активы еткәндә генә. Ғәҙәттә, эшҡыуарҙар һирәк осраҡта ғына аҡсаларын ҡайтарып ала инеләр.

✓ 1 ғинуарҙан НДС - өҫтәлгән хаҡҡа һалым 18-ҙән 20 процентҡа артты. Һатып алыусы уны һатыусыға түләй, ә ул, үҙ сиратында, дәүләт бюджетына. Ҡайһы бер тауарҙар өсөн 10 процентлы льгота һаҡлана. Ул, мәсәлән, китаптарға, балалар кейеменә һәм ҡайһы бер аҙыҡ-түлеккә - шәкәр, һөт, йәшелсә һәм башҡа тауарҙарға һалына.

✓ Ғинуар уртаһынан федераль каналдар цифрлы телевизион форматҡа күсә. Телевизор ҡараусылар 20 федераль каналды һәм 3 радио станцияһын юғары сифатта ҡарай һәм тыңлай ала. Яңылыҡ ябай бүлмә антенналары ҡулланыусыларға ҡағыла. Кабель, юлдаш һәм ip-тв абоненттары өсөн барыһы ла үҙгәрешһеҙ ҡала.

✓ Быйылдан Рәсәйҙә пенсия йәше яйлап күтәрелә башлай. Был осор 10 йылға һуҙыласаҡ һәм 2028 йылда рәсәйҙәр пенсияға 5 йылға һуңлап сыға башлаясаҡ: ирҙәр - 65, ҡатын-ҡыҙҙар 60 йәштә. Кем пенсияға быйыл сығырға тейеш булған, улар өсөн пенсия йәше - ярты, 2020 йылда сығыусылар өсөн йыл ярымға оҙайтыла.

✓ 1 ғинуарҙан эшләмәүсе пенсионерҙарҙың страховка пенсиялары 7,05 процентҡа индексацияланa. Өҫтәмә күләме пенсия күләменән сығып билдәләнә.

## Ҙур төҙөлөштәр

✓ Быйыл беҙ Башҡортостан Автономияһының 100 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәкбеҙ. Ошо датаға тиклем Өфөлә тимер юл вокзалын төҙөп бөтөрөргә ниәтләйҙәр. Был хаҡта Радий Хәбиров "РТЮ" ("РЖД") идаражы рәйесе Олег Белозёров менән һөйләшеп килеште. "Вокзал - матур, яҡшы, ләкин унда бер нисә тамамланмаған эштәр бар. Әгәр ҙә улар аҙағына тиклем еткерелһә, ул ысынлап та Рәсәйҙең иң яҡшы вокзалдарының береһе буласаҡ", - ти төбәк етәксеһе.

✓ Ошо йылдың беренсе кварталында Дуҫлыҡ монументы районында Ағиҙел аша күпер һалына башлаясаҡ. Ул 2021 йылға төҙөлөп бөтөргә тейеш. Эштең дөйөм хаҡы 3,5 миллиард һум, тип баһалана. Уның 2,5 миллиард һумын федераль юл агентлығы бүләсәк. Был хаҡта Радий Хәбиров Росавтодор етәксеһе Андрей Костюков менән халыҡ-ара транспорт форумы сиктәрендә осрашып килеште.

## Байрам тантаналары

✓ 2019 йылдың 7 февралендә Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов үҙенең 85 йәшлек юбилейын билдәләйәсәк. Төбәк менән ул 1993 йылдан 2010 йылға тиклем идара итте. Бөгөнгө көндә Мортаза Рәхимов "Урал" Мәрхәмәтлек фонды советы рәйесе булып тора.

✓ Республиканың автономия яулауының рәсми датаһы 1919 йылдың 23 марты тип иҫәпләнә. 2019 юбилей йылында республикала, Мәскәүҙә һәм хатта сит төбәктәрҙә төрлө презентация, күргәҙмә, фәнни-ғәмәли конференциялар үтәсәк, тип көтөлә. Шулай уҡ 2019 йылда, ошо ваҡиғаға тура килтереп, V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙасаҡ.

✓ Май айында Өфөлә "Туғанлыҡ" халыҡ-ара төрки театрҙар фестивале үтәсәк. Йола буйынса, фестиваль биш йылға бер тапҡыр уҙа. Унда ҡатнашыу өсөн төрлө илдәрҙән һәм Рәсәй төбәктәренән театрҙар саҡырыласаҡ. Шулай уҡ фестивалғә билдәле Рәсәй театр коллективы саҡырыласаҡ, тип көтөлә. Улар Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта сығыш яһаясаҡ. Бөгөнгө көндә "Сатирикон" театры менән һөйләшеүҙәр алып барыла.

✓ 2019 йылдың 12 июне Өфө ҡалаһының төҙөлөүҙең 445 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ (1574). Ошо уҡ көндә, традиция буйынса, республика халҡы башҡорт халыҡ милли геройы Салауат Юлаевты ололап иҫкә аласаҡ. Быйыл уның тыуыуына 265 йыл тула.

✓ 9 июлдән 14 июлгә тиклем Өфөлә беренсе тапҡыр 53-сө Халыҡ-ара йәйге балалар уйындары үтәсәк. 12-15 йәшлек спотсылар енел атлетика, футбол, фехтование, пляж волейболы, баскетбол, дзюдо, ҡаяға үрмәләү һәм грек-рим көрәше буйынса төрлө ярыштарҙа ҡатнашасаҡ. Өфөгә донъяның 60 иленән ике меңгә яҡын ҡатнашыусы киләсәк, тип көтөлә. Еңел атлетика һәм футбол буйынса ярыштар - "Нефтсе" стадионында, йөҙөү һәм фехтование - Ҡамышлы урамында төҙөлөп яткан үҙәктә, пляж волейболы һәм баскетбол - "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял итеү паркында, грек-рим көрәше - "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы спорт залында, ҡаяға менеү - "Ватан" паркында, дзюдо - Б.Бикбай урамындағы 32-се һанлы спорт мәктәбендә үтәсәк. Ябыу тантанаһы "Ватан"дың аҫҡы майҙансығында уҙасаҡ.

✓ 2019 йылдың 8 сентябрендә төбәк Башлығын һайлаясаҡбыҙ. Республика Башлығы вазифаһына үҙ кандидатураһын 30 йәштән өлкән һәр Рәсәй граждан ҡуя ала. Уның икенсе илдә гражданлығы булмаҫҡа тейеш. Үҙ кандидатураһын һәр граждан үҙаллы күрһәтергә мөмкин. Шулай уҡ сәйәси партиялар ҙа үҙ кандидатураһын тәҡдим итә ала. Яңы һайланған Башлыҡ тантаналы шарттарҙа урыҫ һәм башҡорт телендә ант биргәндән һуң вазифаһын башҡара башлай.

✓ 2019 йылдың октябрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры, билдәле яҙыусы һәм драматург М.Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыу көнө билдәләнәсәк. Юбилей датаһына уның әҫәре буйынса төшөрөлгән ике кинопремьера әҙерләнә. Улар Айнур Аҫҡаров ҡуйған "Өс таған" һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Александр Галибиндың тулы метражлы "Һеңлекәш" хәрби драмаһы. Шулай уҡ З.Вәлиди исемендәге Милли китапхана Мостай Кәримдең әҫәрҙәрен уҡыу буйынса халыҡ-ара интернет-конкурс уҙғара. Ул 2019 йылдың апрелендә тамамлана.

✓ М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия театры ла үҙенең бер быуатлыҡ юбилейын билдәләй. Әйткәндәй, 2019 йыл Рәсәй президенты Владимир Путин тарафынан Театр йылы тип иғлан ителде. Быйыл шулай уҡ М.Кәрим исемендәге Йәштәр һәм "Нур" Өфө дәүләт татар театрҙары асылыуға ла 30 йыл.

✓ Астрономик календарға ярашлы, быйыл өс тапҡыр ҡояш тотолоуы көтөлә. Ләкин республика биләмәһенән уларҙың тик берәүһен генә - 2019 йылдың 26 декабрендә - күҙәтеп буласаҡ. Ул Өфө ваҡыты менән 09.39 сәғәттә башланасаҡ. Тотолоуҙың уртаһы 09.43 минутҡа тура киләсәк. Ул ваҡытта Өфөлә күренәсәк айҙың 0,13 өлөшө ҡапланасаҡ. 09.58 сәғәттә ай тотолоу тамамланасаҡ.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 ғинуар "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+
**13 ғинуар "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**15 ғинуар "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+
**16 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**17 ғинуар "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+
**18 ғинуар "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 ғинуар "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен) 0+
**13 ғинуар "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+. Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# УҒА ЙОЛАЛАР ҠЫҘЫҠ

**Өфөгә китап нәшер итеүсе, кинопродюсер һәм телевидение тапшырыуҙары алып барыусы Пьер Кристиан Броше килде. Республиканың баш ҡалаһында ҡунаҡ башҡорттарҙың тормошо, урындағы йолалар һәм гөрөф-ғәҙәттәр тураһында тапшырыу әҙерләй.**



Француз Пьер Кристиан Броше 20 йылдан ашыу Рәсәйҙә йәшәй, "Рәсәй-Мәҙәниәт" телеканалы өсөн илебеҙҙең төп халыҡтары тормошо хаҡында тапшырыуҙар әҙерләй, Рәсәй ҡалалары белешмәләрен нәшер итә һәм хәҙерге рус сәнғәте өлгөләрен йыя. "Броше беҙҙәге үҙенсәлекле мираҫ хаҡында тапшырыу төшөрөргә ике йыл элек тәҡдим иткәйне, - тип һөйләне Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. - Был башҡорт халҡына, сармат алтынына, башҡорт эпосына һәм музыкаһына арналған 4-5 тапшырыуҙар циклы булырға тейеш. "Мәҙәниәт" каналындағы беренсе тапшырыу Яңы йылға тиклем үк сыҡты, ә ҡалғандарын 2019 йылда күрһәтерҙәр, тип ышанабыҙ".

# КЕМДӘР ГРАНТ АЛДЫ?

**Башҡортостанда "Урал батыр" эпосы буйынса балалар комиксы һәм анимация фильмы төшөрөлә. 2018 йылда проект дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлап ҡалыуға, үҫтереүгә йүнәлтелгән Башҡортостан Башлығы гранттарының береһен алды.**

Ошондай уҡ гранттарға Башҡортостан Республикаһы китапханалары фондтарын яңыртыуға бәйле "Алтын кәштә" проекттары, "Шәрәле Шаҡман юлы", һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән һәм инвалидтар өсөн "BashDic" электрон уҡыу ҡулланмаһы, "Йөрәк һүҙе" телевизион минипрограммалар циклы, Башҡорт Автономияһының Беренсе баҫма органының факсимиль варианты - "Башҡорт" гәзите һәм башҡа проекттар ҙа лайыҡ булды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы грант аҡсаһына республиканан ситтә Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғарифы көндәрен, "Арҡаҙаш" ойошмаһы "Ер һүҙе" халыҡ-ара кинофорумын уҙғара.

# ТАҒЫ БЕР ФИЛЬМ

**Ошо көндәрҙә Өфөлә Мостай Кәримдең "Өс таған" повесы буйынса фильм төшөрөү тамамланды. Был хаҡта танылған режиссер Айнур Асҡаров хәбәр итте.**

Фильмдың төп өлөшө йәйгеһен Ғафури районының Толпар ауылында төшөрөлдө, унда әҫәрҙә һүрәтләнгән Бөркөтлө ауылы барлыҡҡа килтерелде. Ҡалған кадрҙар декабрҙә төшөрөлөп бөттө. "Бәләкәй кадрҙарҙы төшөрҙөк, мәҫәлән, үгеҙ менән бәйле хәлдә. Ниһайәт, команда йыйыла алды, - тип хәбәр итте Айнур Асҡаров. - Монтаж әҙер тиерлек, әле һуңғы этап бара. Тиҙҙән тауыш яҙҙырыу башлана, музыка яҙырға тотондоҡ. Фильм төшөрөү менән бик ҡәнәғәтмен, беҙҙе һөйбәт, ҡыҙыҡлы кино көтә", - тип һөйләне Айнур Асҡаров "Башинформ" агентлығына.

Режиссер һүҙҙәренсә, фильм төшөрөүҙә иң ауыры хайуандар менән бәйле сәхнәләр булған. Фильмға музыканы Камил Абдуллин яҙа, Айнур Асҡаров уның менән күптән хеҙмәттәшлек итә. "Өс таған" тулы метражлы нәфис фильмы Башҡортостандың Мәғариф министрлығы башланғысы буйынса төшөрөлә. Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләүгә арналған. Фильм төшөрөү өҫтөндә "Йәнле таҫма" кинокомпанияһы һәм "Асҡарфильм" студияһы менән берлектә "Башҡортостан" киностудияһы эшләй. Премьера быйыл көтөлә.

# "МИН - МАРАТ"

**Былтырғы йыл һуңында, 29 декабрҙә, М.Ғафури исемендәге Башҡорт драма театрының Кесе залында "Мин - Марат" спектакленең премьераһы булды. Драманың нигеҙендә - Урал Ғәлиевтың "Тамамланмаған повесть" һәм "Кирегә юл юҡ" әҫәрҙәре. Режиссер, инсценировка авторы һәм башҡорт теленә тәржемәләүсе - Айрат Абушахманов.**

Алдан спектакль өсөн өфөләрҙән совет осоро реквизиттары йыйыу иғлан ителгәйне. Кешеләр шул йылдарҙағы йыһаздар һәм көнкүреш техникаһы - телевизорҙар, магнитофондар, кер йыуыу машиналары, гәлсәр һауыттар алып килде. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбаев спектакль өсөн үҙенең "Ятрань" баҫыу машинкаһын, портфелен һәм яҙыу приборын бирҙе. Театрҙың пиар-менеджеры Шаура Ғәббәсова хәбәр итеүенсә, фильм тамашасыларҙы 1980 йылдарға алып ҡайта. Телевизорҙа - Брежнев, илдә - торғонлоҡ, "гаилә - йәмғиәт нигеҙе". Төп герой Марат - ябай совет табибы, намыҫлы эшләй, төнгө дежурстволар ала, тәртипле ғаилә башлығы һәм яҡшы атай, ҡатыны - уҡытыусы. Көн һайын бер үк хәл: өй - эш, эш - өй. Барыһы ла шулай барырға тейеш һымаҡ, әммә бер көн уның күнегелгән тормошона мөхәббәт килеп инә! Ысынбарлыҡ үҙгәрә, урыны менән ул хатта иллюзияға оҡшап китә. "Мин - Марат" спектаклен тағы ла 15-26 ғинуарҙа ҡарарға мөмкин.

# БАЛАЛАР - ҘУР СӘХНӘЛӘ

**Йыл аҙағында "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалының иң күп һанлы һәм социаль әһәмиәтле проекты - "Сулпылар" республика музыкаль телеконкурсы үҙенең дуҫтарын йыйҙы.**



Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында музыка донъяһына тәүге аҙым яһаған 12 финалсы башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары менән бер сәхнәлә сығыш яһаны. Өсөнсө урынға бер юлы өс финалсы: Артур Асҡаров (Силәбе), Сәйҙә Гәрәйшина (Өфө), Сәлим Ғәбәйҙуллин (Хәйбулла районы) лайыҡ булды. Жюри икенсе урынды Гөлдәр Аллабирҙинаға (Хәйбулла районы) һәм Илнар Ғилметдиновҡа (Илеш районы) бирҙе. Беренсе урынды Ринат Ғаззалов (Әбйәлил районы) алды, ә конкурста Искәндәр Тазетдинов (Миәкә районы) еңде. Байрам "Сулпылар" өсөн махсус яҙылған гимн менән тамамланды. Былтыр конкурс февраль айында башланды һәм өс этапта уҙҙы. Онлайн һайлап алыу турына 200-ҙән ашыу ғариза килде. Видеороликтарҙы иғтибар менән ҡарағандан һуң жюри 70 конкурсантты беренсе турға саҡырҙы. Уларҙың 30-ы ғына икенсе турға үтте, ә финалға бөтәһе 12 бала сыҡты.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ЮЛДАН СЫҠҺАҢ ДА,

## илдән сыҡма

Үҙ илеңдә һандуғас булһаң да, кеше илендә ҡарға булырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡайғыны яңғыҙың да күтәреп була, ә шатлыҡ өсөн икәү булыу кәрәк.

**(Элберт Хаббард).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Урмандар ҡыҙырып, күп батырлыҡтар ҡылып йөрөгән бер аҡыл эйәһе. Бына бер саҡ ағас төбөндә ял итеп ултырғанда һауанан осоп барған һайыҫҡан уның башына тиҙәген ауҙарып китә. Аҡыл эйәһе ҡыҙып китеп, осоп барған ҡошҡа асыулы ҡарашын һирпә. Һайыҫҡан шунда уҡ туҙанға әйләнә. Үҙенең былай ҡеүәте барлығын тойоу уның башын әйләндерә, үҙ һәләтенә маһайыу барлыҡҡа килә. Шунан ул үҙенең ошондай һәләтен тағы кемдәлер һанап ҡарау теләге менән ҡалаға йүнәлә. Бер дин әһеленең йортона инә. Йорт ишеге төбөнә еткәс, хужабикәнән ашарға сығарыуын һорай. "Көтөп тор, - ти хужабикә, - әле мин хужама ярҙам итәм". Аҡыл эйәһе уға асыулы ҡарашын һирпә, әммә хужабикә юҡҡа сығыу урынына көлөп өбөрә һәм: "Һин яңылыштың, аҡыл эйәһе. Мин бит һайыҫҡан түгел", - ти. Аҡыл эйәһе был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡаушап ҡала:"Ул ҡайҙан белгән икән?"- тип уйлай. Ә хужабикә иренә өйҙәге эштәрен тамамларға ярҙам итә лә, ашарға алып, аҡыл эйәһе янына сыға. "Һайыҫҡан менән булған хәлдә һин ҡайҙан белдең? Әйтмәһәң, хәйерендә алмайым", - ти аҡыл эйәһе. "Минең иремә тоғролоҡтан башҡа ҡануным да, инаныуым да юҡ, - ти хужабикә.- Шуға ла минең тойоу һәләтем дә көслө. Һин баҙарға барып, ундағы ит һатыусы Дауыт менән һөйләшһәңсе һәм унан сабырлыҡҡа, етдилеккә өйрәнһәңсе..."**

**Аҡыллы ҡатындан ошондай кәңәш ишеткәс, аҡыл эйәһе Дауытты эҙләп баҙарға китә. Үҙенә сәләм биргән сит кешене күргәс, Дауыт: "Нимә, аҡыл эйәһе, һине минә иренә тоғро ҡатын ебәрҙеме?"- ти. Быны ишеткәс, аҡыл эйәһе аптырап китә һәм һорай: "Һиндә, ит һатыусыла, былай тойомлау ҡайҙан?" Быға ҡаршы ит һатыусы шулай тип яуап бирә: " Мин үҙемдең атайым һәм әсәйемде яратам һәм хөрмәт итәм. Улар минең берҙән-бер таяныстарым. Тәүҙә уларҙы йыуындырам, шунан үҙем йыуынам. Тәүҙә уларҙы ашатам, шунан үҙем ашайым. Тәүҙә уларҙы йоҡларға яткырам, шунан үҙем ятам. Бына шуның өсөн дә күптә белем һәм тоям. Ит һатам, шуның менән көн күрәм. Сауҙа менән шөғөлләнеү - халыҡҡа хеҙмәт итеү, ә аҡсаға ҡыҙығыу түгел. Мин дә, бағы иренә тоғро ҡатын да, үҙ белемебеҙ менән маһайымайбыҙ, маһайыу - белемдең дошманы. Шуның өсөн Хоҙай беҙҙе сикһеҙ белем менән бүләкләгән. Аҡыл эйәләре араһында лайыҡлы аҡыл эйәһе булғың килһә, һис ҡасан аҡылың менән маһайма..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673
Тиражы - 4077
Заказ - 10